***Тамара ҒӘНИЕВА***

# Донъялыр был...

Эссе*

## “Һин үҙең кем, ҡатын?”

*Ҡыпсаҡтарҙы шундуҡ таныйым мин*
*Егәренән, һынсыл ҡараштан.*
*Беҙҙе Хоҙай һибелеп ер өҫтөнә*
*Мәрйен булыр өсөн яралтҡан.*

Кеше яҡты донъяға ни өсөн килә? Тыуған сағында кемдер уға ниндәйҙер маҡсат йөкмәтәме? Үҙенең ерҙәге бурысын бәндә нисек төшөнә һәм яҙмышын ни рәүешле билдәләргә, ойошторорға кәрәклекте ҡайҙан белергә тейеш?

Был иртәме-һуңмы һәр кемдең алдына баҫа торған һорауҙар. Тыуыу менән үлем араһы шундай ҡыҫҡа, бер ҡараһаң, Ер өҫтөн бүтән бер ҙә күрмәҫ өсөн ҡалдырып китеүгә дусар бәндә тәҡдире — ҡотолғоһоҙ фажиға, мәғәнәһеҙлек кеүек күренергә һәм кеше күңел төшөнкөлөгөнә, сараһыҙлыҡ хәсрәтенә бирелергә тейеш кеүек. Миллиардлаған йылдар тереклек иткән кешелек цивилизацияһы тарихына күҙ һалһаң, йәшәү мәғәнәһен эҙләү бер ҡасан да туҡтамаған бит. Кемдер уны — төрлө-төрлө дини тәғлимәт, арбағыс тылсым вәғәҙә итеүсе ғилми асыштар, художестволы образдар, ижади символдар, икенселәр серле эзотерика, астрология һәм сихыр-хөрәфәт кеүек юлдар аша эҙләй. Эҙләнеүҙәре асыштарға юлыҡтыра, нәҡ ана шул эҙләнеүсәнлек, донъяны танып белеүгә ынтылыш, ижад йәшәүҙең үҙен дә ҡыҙыҡлыраҡ, мәғәнәлерәк итә түгелме? Дөрөҫ, уй-маҡсатһыҙ, кәйеф-сафа ҡороп йәшәп, мәңгелеккә тыуғанмындыр тип уйлаған ҡайһы берәүҙәрҙең ерле юҡҡа ғүмер сарыф итеүҙәре лә билдәле беҙгә.

Йәшәүҙе ниндәй генә тәрән фәлсәфәләр менән аңларға һәм аңлатырға тырышма, был хеҙмәттең, әлбиттә, аныҡ һәм бәхәсһеҙ һөҙөмтәләргә килтергәне юҡ әле. Ә шулай ҙа... Нәҡ ана шул уйланыу һәм эҙләнеү — йәшәүҙең үҙелер кеүек миңә. Юғиһә нисек килеп сыға һуң? Бәндәнең балалыҡ, йәшлек йылдары тиҙ үтеүсән. Кеше тәжрибәне тик алтмыш-етмеш йәштәргә генә туплап өлгөрә, ғүмере эсендәге хаталарға баһа бирергә өйрәнә, ҡайһы бер ваҡиғаларҙан тайпыла алмағанлығына үкенә. Ә хаталарһыҙ йәшәп алып китергә инде көсө юҡ. Тимәк... Тимәк, ергә кеше уны танып белеү өсөн генә килә... Күңелһеҙерәк, әлбиттә. Бында мәшәҡәтһеҙ генә йәшәп, ғазаптарҙан азат булып ҡына ғүмер итергә ҡушылһа, ярмамаған инеме ни?! Юҡ шул. Нишләп улай түгеллеген мин үҙем дә төшөнөп бөтә алғаным юҡ әле...

* *Журнал вариантында ҡыҫҡартылып бирелә.*

Әммә, минеңсә, Ерҙәге тормоштоң үҙен бар итеүсе һәм йәшәйешен тәьмин итеүсе тәбиғи Ер, Ут, Һыу, Һауа кеше менән ғаләмдең берҙәмлеген тәшкил итә икән, тимәк, бәндә ғүмеренең асылы ла нәҡ шул ябай һәм тәрән мәғәнәле төшөнсәләрҙең серен аңларға тырышыу һәм шул берҙәмлектә һыйышып йәшәү, шуға хилафлыҡ килтермәй ғүмер кисеү булып килеп сыға түгелме? Хоҙай Тәғәләнең төп идеяһы — Мәңгелек. Мәңгелек, һәр бер төшөнсә кеүек, абстракт уй-фекер. Әммә кеше аңламаҫлыҡ һәм уның ҡулынан килмәҫлек сер түгел, минеңсә.

Ҡешелек цивилизацияһындағы Мәңгелек төшөнсәләр араһында беҙгә иң ғәзизе — мөхәббәт төшөнсәһелер, моғайын. Яратыу хаҡына батырлыҡтар эшләнә, яратыу арҡаһында кеше матурлана, яратыу нигеҙендә киләсәкте дауам итерлек балалар тыуа.

Йәшәүҙең асылын эҙләгән кеше мотлаҡ йәнә бер тылсымға — Ваҡыт һәм Фекер даирәһенә барып юлыға. Былары иһә һирәктәр ихтыярына буйһонған, әсе һәм татлы хәҡиҡәтте аңларға, күнергә йәки һыҙланырға, рәхәт сигергә йәки ғазапланырға, ожмах булыуҙан алыҫ Ер өҫтөнөң аңлайышлы һәм аңлайышһыҙ ҡанундары солғанышында үҙ-үҙеңде табырға саҡырыусы — күҙгә күренмәҫ — Хәрәкәт...

Йыһан эсендәге Абсолют хәҡиҡәтте тайпылышһыҙ төшөнсәләр менән аңлап бөтөп булмай шикелле ул. Әммә ниндәйҙер хәҡиҡәтте, ниндәйҙер ҡанун-ҡағиҙәләрҙе үҙләштереү өсөн кешегә тотош бер ғүмер бирелә. Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел. Тотош Ғүмер.

Һәр кемдең ғүмере тик уныҡы ғына. Бер кем менән дә уртаҡ түгел. Ул берәү. Ҡәҙерле. Мөхәббәтле. Ғазаплы. Бәхетле... Сөнки бәндә — Йыһандың үҙе.

Шуға ла мин, йәшәлгән йылдарым манараһынан тороп, заманым, замандаштарым, үҙем хаҡында йыш уйланам. Уй-хистәрем менән уртаҡлашыу маҡсатында ошо мемуарҙарҙы яҙырға маташам.

Донъяның мәңгелек серҙәренә, йәшәү фәлсәфәһенә төшөнөр алдынан беҙ һәммәбеҙ ҙә тирә-яғыбыҙҙағы кескәй донъяны, ғаилә мөнәсәбәттәрен, ырыу-нәҫелебеҙҙе аңларға тырышабыҙ. Беҙ ни өсөн башҡорт тип аталабыҙ? Ни өсөн тирә-яҡ ауылдарҙа ғына ла кешеләр төрлө телдә һөйләшә, инаныстарыбыҙ, рухи таяныстарыбыҙ ҙа бер төрлө түгел? Дөрөҫ, һуңғы тиҫтәнән ашыу йылдар тирәһендә мәғлүмәт сараларындағы асыҡлыҡ, тарихи дөрөҫлөккә ынтылыш артҡаны бирле мин һорау билдәһе ҡуйған төшөнсәләргә ярайһы дөрөҫ яуаптар табыла бара. Быға республикала киң таралған “Шәжәрә байрамдары”ның йоғонтоһо ла ҙур. Дөрөҫөн әйткәндә, барлыҡ Башҡортостан райондары һәм ауылдарында гөрләп үткән был байрам алдынан уҙғарылған “ҡаҙыныу” эштәре, архив материалдарын аҡтарыу нисаҡлы табыш һәм асыштарға юлыҡтырҙы. Башҡортостан юлдаш телевидениеһының “Башҡорттар” программаһында ғына ла беҙҙең әлеге сиктәрҙә йәшәгән респуликабыҙ халҡы ғына түгел, Силәбе, Пермь, Ырымбур өлкәләре, Татарстан республикаһының Аҡтаныш, Аҙнаҡай, Бөгөлмә райондарында ғүмер итеүсе милләттәштәребеҙ ҙә үҙҙәренең кем, ниндәй тамырлы һәм сығышлы булыуын асыҡлай башланы. “Без үзебез башкорт ыруыннан булып чыгабыз”, — тип һөйләп тора улар. Әммә быуат буйы тирәһе аңы томаландырылған был милләттәштәребеҙҙең аянысла яҙмышы йөрәкте һыҙлатмай ҡуймай.

Мин үҙем башҡорттарҙың ҡыпсаҡ ырыуынанмын. Атайым яҡлап та, әнейем яҡлап та. Әнейемдең ҡартатаһы Арыҫланбәк әлеге Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылына Ишембай районындағы Көҙән ауылынан килеп төпләнгән булған. Арыҫланбәковтарҙың һәр быуынында ла муллалар бар.

Ҡыпсаҡтарҙың ғүмер итмеш даирәһе киң. Рухи донъяһы иһә аңғарып та, төшөнөп тә бөтмәҫлек тәрәнлек һәм киңлектәрҙән ғибәрәт. Бер һүҙ менән әйткәндә, үҙҙәрен Күктең Төркиҙәре, йыһан ҡатнашсылары тип атаусы был арий ҡәүеменең донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшөн баһалап бөткәндәре йә булмаһа баһаларға теләгәндәре юҡ әле.

Ни өсөн? Мин уны үҙемсә шулай аңлатам: балалар, ата-әсәһен нисек кенә хөрмәт итһә лә, асылда, уларҙың көнитмеш, рухи һәм илаһи инаныстарын инҡар итеү аша яңылыҡҡа ынтылыусан. Эволюция, дөрөҫөн әйткәндә, емереүҙән башлана. Емермәй тороп яңыны төҙөп булмай. Әммә... Ҡешелек, яңылыҡҡа ынтылам тип, хәрәбәләр аҫтына саф алтынды ла күмеп ҡуйырға һәләтле шул.

Ә ҡыпсаҡтарҙы, улар ниндәй генә телдә һөйләшмәһен, мин шунда уҡ танийым. Нисек тип әйтәйем икән... Төҫтәренән, үҙҙәрен тотошонан, һөйләшеп киткәндә темалар даирәһе һәм донъяға мөнәсәбәтенән... Уларҙың холҡондағы ниндәйҙер бәҫ, мәртәбә тойғоһонан.

Киевтың Крещатик урамын ҡыҙырыуым хәтеремдә. Сит ҡалала күп нәмә аңлайышһыҙ, шуға күрә урамда осраған кешеләрҙән теге-был адрес, ҡайһы бер маршрут хаҡында һораштырмау мөмкин түгел. Мин Крещатикта үҙемә генә билдәле эксперимент уҙғарып маташтым. “Бынау ханым мотлаҡ ҡыпсаҡ ул”, — тип ҡарар итәм дә үҙемдең хаҡлы булыуымды һынар өсөн, туҡтатып, ниндәйҙер һорау бирәм. Һәм, әлбиттә, яңылышмайым. Ниндәйҙер энергия, ихласлыҡ, һөйкөмлөлөк, кешегә ҡарата ихтирам һәм үҙ мәртәбәһенә тоғро “хохлушка”лар ике-өс һүҙҙән үк ихласлығын асып та һала. Уларҙың ҡыпсаҡлыҡ асылы һинең дә күңелеңә май булып яғыла. Ҡыпсаҡтар бәрелеп-һуғылып барыусан түгел. Донъя ҡыпсаҡтарҙыҡы, иркен, ул — һинеке. Ә был Дон казактарын, христиан динле булыу сәбәпле, “украин” тип теркәгәндәр икән, зәңгәр йә йәшел күҙле, сикә һөйәктәре бүлтәйеберәк торған “яңы украинкаларҙың” ни ғәйебе? Ҡыпсаҡлыҡтары барыбер төҫ-ҡиәфәтендә, холоҡ-фиғелендә ярылып ята ла баһа! Хәйер, әйттем дә һағышланып ҡуйҙым: был тик ҡан хәтере генә сырамытыр һиҙемләүҙәрем бәлки кемгәлер уйҙырма кеүек тә күренер. Әммә генетиктар әйтеүенсә, ҡан хәтере үтә мәғәнәле һәм тотороҡло субстанция икән ул. Беҙ йыш ҡына ҡан аралашыу, шул арҡала ҡан боҙолоу хаҡында шөбһәләнеп һөйләп ҡуябыҙ. Баҡһаң, бер милләттең ҡаны икенсе милләттеке менән бер ваҡытта ла ҡатнашмай икән. Урыҫ менән башҡорттан тыуған балаларҙа йә урыҫ ҡаны ғына, йә башҡорт ҡаны ғына ағыусан. Хатта ҡатнаш ғаиләләге балаларҙың береһенең ҡаны башҡорттоҡо, икенсеһенеке урыҫ булыуы ихтимал.

Ҡыпсаҡлыҡ Мортаза Рәхимов, Нурсолтан Назарбаев, Илһам Әлиев (атаһы Гейдар Әлиев), Минтимер Шәймиев, Олжас Сөләймәнов, Марат Аҙнабаев, Ноғман Мусин, Ғәлим Хисамов, Флорид Бүләков, Рауил Бикбаев, Әхмәт Сөләймәнов, Әхәт Ҡотлоәхмәтов һәм башҡа телгә алынмағандарҙан бөркөлөп тора түгелме ни?! Ниндәйҙер битарафһыҙлыҡ, алға ынтылыш, үҙ-үҙенә тоғролоҡ, донъя мәшәҡәттәренең ваҡлығынан бөгөлөп төшмәү ғәләмәте бар уларҙа.

Дөрөҫ, тарихи ваҡиғалар арҡаһында күп милләттәр араһына мәрйен булып сәселгән, әммә үҙҙәрен ассимиляциялаған милләттәргә телен, инаныстарын һәм рухи ныҡлығын иңдергән ҡыпсаҡтарҙы тарих тәгәрмәсе аҫтында тапалғаны, милләт буларaҡ үҙҙәрен һаҡлап ҡала алмағаны өсөн битәрләргә, улар ижад иткән мәҙәни ҡиммәттәрҙең бөгөн христиан, католик, ислам динле халайыҡтарҙың хазиналығына инеп тырым-тырағай әрәм-шәрәм ителеүенән үкенес кенә түгел, ғәрлек тойғоһона ла бирелергә мөмкин... Ләкин... Баҡыйлыҡ даирәһендә үҙен

мәртәбәле тотҡан ҡыпсаҡтарҙың рухи ҡөҙрәтенә альтернатива булырлыҡ рухиәтте, бик күп быуаттар үтеүгә ҡарамаҫтан, бер кемдең дә тәҡдим иткәне юҡ бит әле.

Нимәнән ғибәрәт һуң был үҙенсәлек? Ҡыпсаҡтар ижад иткән культураның төп асылы империя фекерлелеге һәм ватансылыҡ. Идеалдары — Йыһан әйләнеше, Йыһан хәрәкәте ҡатнашсыһы булыу. Был төшөнсәләр башҡорттоң да төп ынтылышы, төп идеалы һәм уй-аң ғына түгел, художестволы фекер даирәһе лә бит. Беҙҙең халҡыбыҙ Йыһан менән дә, тәбиғәт менән дә аяулы аралашсылыҡ ысулын барлыҡҡа килтереүгә өлгәшеүсе, уны Тәңреселек, Зороастра фәлсәфәһе, Будда тәғлимәтен формалаштырып нигеҙләүсе милләт ул.

Рәсәй тарихсылары тарихи ваҡиғалар хаҡында һөйләгәндә Киев кенәзлеген телгә ала, татар-монгол баҫҡынсылығын тасуирлай, ә бөйөк Ҡыпсаҡ цивилизацияһы хаҡында ләм-мим. Әйтерһең дә, Иван Грозный, Юрий Долгорукий, Тургенев, Суворов, Аксаков, Мусин, Карамзин һ.б. кеүек Рәсәй тарихы һәм культураһына мәңгелек яулаусы ҡыпсаҡтарҙың ҡыпсаҡлығын таныһаң, рус мәҙәниәтенә хилафлыҡ килә. Уларҙы татар сығышлы тип иғлан итеп маташыусылар ҙа бар. Әммә татар мәҙәниәтен ҡыпсаҡ мәҙәниәте менән бутарға ярамай.

Ҡытай, Иран, Византия, Һиндостан культураларынан кәм түгел ҡыпсаҡтарҙың ҡаҙаныштары. Тамырҙары, традициялары көслө була уларҙың. Дөрөҫ, тулакейеҙ, кун, тире, ағас, йәнлек тиреләренән яһалған ҡиммәтле художестволы әйберҙәр Европала һаҡланған таш һарайҙарға сағыштырмалы аҙыраҡ ғүмерле. Ҡиммәтле таштар ултыртылған алтын, көмөш биҙәнгестәр археологтар тарафынан әле лә табылып тора. Дәште-Ҡыпсаҡ илендә социаль институттар, йәмғиәттең йәшәү формаһы, социаль баҫҡыстар, хәрби тәртип, дипломатия һәм, әлбиттә, донъяны, ғаләмде камил аң менән ҡабул итеү — былар бөгөнгөләр саҡ өйрәнеп маташҡан демократик-хоҡуҡи ҡанундар ул. Әйткәндәй, донъя бөгөн дә ҡыпсаҡтар формалаштырған һалым системаһы, субординация, административ буйһонғанлыҡ һәм баҫҡыстар шарттарында йәшәй. Был власть менән халыҡтың үҙ-ара һыйышып йәшәүен тәьмин итеүсе камил мөнәсәбәттәр формаһын Сыңғыҙ хан үҙе яулап алған киңлектәргә идара итеү ҡағиҙәһенә әйләндерә.

Һалым системаһын, билдәле булыуынса, һуңыраҡ Адам Смит ғилмиләштерә, уның ҡыпсаҡтар һәм Сыңғыҙ хан барлыҡҡа килтергән нигеҙҙәре беҙгә, коммунизм төҙөүселәргә лә, бөгөнгө капиталистарға ла хеҙмәт итте һәм итә әле. Ҡыпсаҡтарҙың йәнә бер һоҡланғыс ҡаҙанышы — асыҡ һәм ябыҡ ҡанбабалар мәктәптәре эшмәкәрлеген нигеҙләү. Был мәктәбәләр университет тип аталыуға хоҡуҡлы. Утыҙ йылға тиклем иҫәпләнгән ябыҡ типтағы мәктәбәләр медицина, астрология һәм астрономия (Арҡайым обсерваторияһы, Стоундхедж тибындағы ҡоролмалар), шәжәрә, минерология, геология, Йыһан, уның кешелек, тәбиғәт менән берҙәмлеге һәм башҡа ғилми эшмәкәрлек — былар онотолған, ләкин урыҡ-һурыҡ тарихи шаһитнамәләрҙә, аңыбыҙҙа һаҡланған үткәнебеҙ ул. Отрар ҡалаһында тупланған китапхана Александрияныҡынан кәм булмай. Монголдар ул китапхананы ете көн буйы үртәй, әммә ҡалған-боҫҡаны булһа ла тороп ҡала әле. Ул китапхананы бына нисә быуаттар буйы Иван Грозный китапханаһы тип эҙләйҙәр ҙә эҙләйҙәр.

Ҡыпсаҡтарҙы бөгөн ҡумыҡ, ҡарасәй, балҡар, казак, ҡаҙаҡ, татар, сыуаш, яҡут, хакас, грузин, урыҫ, венгр, әзербайжан, Ҡырым татарҙары, гагауз, башҡорт һәм башҡа милләттәр араһында осратырға мөмкин. Башҡорттар иһә ҡыпсаҡ цивилизацияһының туранан-тура вариҫтары, сөнки борон замандарҙа, ҡыпсаҡтар төрки ҡағанатты етәкләгән осорҙа уҡ, формалашҡан рухи берҙәмлек

Башҡортостан ерендә әле лә ныҡ һиҙелә. Был берҙәмлек тәбиғи, ул ситтән килтерелгән һәм көсләп тағылған элемент һымаҡ сурайып күҙгә төртөлмәй, психологик ризаһыҙлыҡ, ытырғаныс тойғолар уятмай.

XX быуат аҙаҡтарында ҡыпсаҡ тарихы һәм халыҡтың Рәсәй дәүләтен формалаштырыуға индергән өлөшө хаҡындағы мәғлүмәт матбуғатта күренгеләй башланы. Күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәновтың һәм ошо юлдар авторының — "Башҡортостан" гәзитендә, Ғайса Хөсәйеновтың — "Ватандаш" журналында, Әхмәтгәрәй Йәнғәлиндең "Ағиҙел" журналында донъя күргән мәҡәләләре, Әхтәр Босҡоновтың үҙ шәжәрәһе тамырҙарын юллап эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә яҙған китаптары рухи тамырҙарыбыҙҙы барлауға ярайһы ҡыҙыҡлы өлөш индерҙе. Минең үҙемде ҡаҙаҡтың рус телле шағиры Олжас Сөләймәновтың "Аз и Я" тигән китабы, Рәшит Аҡкилдиндың диссертация өсөн туплаған материалдары менән танышыу 90-сы йылдарҙа "Ҡыпсаҡтар" поэмаһын яҙырға илһамландырғайны. Мин уны эпитафия тип атарға йөрьәт иттем. Тырым-тырағай тарҡалған ҡәүемдең ҡәберенә бер шәлкем сәскә һалып маташыуым ине. Уның мәктәп программаһына инеүе мине ҡанатландырҙы. Дөрөҫ, әҫәрҙе ҡапылғара ҡабул итеп тә бөтмәнеләр. Сөнки быны өсөн уҡыусының да мәғлүмәтле булыуы кәрәк бит. Ә инде ҡумыҡ Морат Аджиҙың "Полынь половецкого поля" тигән китабының Башҡортостанға килеп етеүе ҡыпсаҡтарҙың ғына түгел, тотош башҡорттарҙың хәтер офоҡтарын йәнә лә киңәйтеп ебәрҙе.

Грузин яҙыусыһы Константин Гамсахурдияның "Давид Строитель" романында иһә ҡыпсаҡтарға кире мөнәсәбәт белдерелә. Дидгори янындағы Византия баҫҡынсылары менән һуғыш барышында Давид батша яғында 60 мең яугир ҡатнашып, шуларҙың 45 меңе Артыҡ хан етәкләгән ҡыпсаҡтар булыуҙы Гамсахурдия кисерә алмай, күрәһең. Ә бит рәхмәтле булырға тейеш грузиндар был еңеү өсөн. Дәүләтселек яҡлана. Ҡыпсаҡтарҙың күбеһе грузин халҡы эсенә ҡом кеүек һибелә. Үкенесле, шул рәүешле төрки тамырҙарын да онота.

Әйткәндәй, 90-сы йылдар аҙағында ҡыпсаҡтар Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып (башлап йөрөүселәре Рәшит Аҡкилдин менән эшҡыуар Фирғәт Әхмәтов) ырыуыбыҙ йыйынын ойошторғайны. Ул Күгәрсен районындағы ғәжәйеп төйәгебеҙ, ҡыпсаҡтар күпләп йәшәгән Әйек йылғаһы буйындағы Мораҙым мәмерйәһе итәгендә уҙғарылды. Рухи күтәренкелек солғап алғайны беҙҙе. Рәшит Аҡкилдинды ырыуыбыҙ бейе тип һайланыҡ. Әммә матур йолаға әүерелергә тейешле был сара артабан һүнеп ҡалды. Хәтеремдә, Венгрияға сәфәр ҡылып ҡайтҡандан һуң тәьҫораттары менән радио аша уртаҡлашҡан арҙаҡлы ғалимәбеҙ Фирҙәүес Хисаметдинова унда йыл һайын беҙҙәге һабантуй кеүек йыйындар уҙғарылыуы, шул йыйында ҡыпсаҡтарҙың үҙ тарихы хаҡында һөйләүҙәре тураһында әйткәйне. Ҡыпсаҡ тарихын унда көтөүсенән алып ғалимға тиклем яҡшы белә, тигәйне ул. Был мине ныҡ тетрәндерҙе. Ә беҙ...

Бер йылды миңә ул саҡтағы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралар министры Зөфәр Тимербулатов, шағир Ҡәҙим Аралбайға юлдаш булып Самара (мин уны боронғо Сәмәрә исеме менән шулай тип атау яғында, Һамар тип түгел), Һарытау яҡтарында булырға тура килде. Ҡаҙағстан далалары менән Аҙау диңгеҙе аралығын тоташтырыусы Һырт, ҡыпсаҡтарҙың күсенеш юлы аша үтеү мине шул тиклем тулҡынландырҙы. Берсә алһыу ләләләр сәскә атҡан, берсә ҡылған сәскәһенән күк төҫкә ингән был Һырттан көньяҡҡа табан китеп барыусы ҡандаштарымдың көймәләрендә ниндәй һылыуҙар, эйәр өҫтәрендә ниндәй батырҙар тирбәлде

икән? Улар араһында миңә ғүмер бирәсәк берәү ҙә булғандыр бит... Һуңынан ике быуат буйы әлеге Рәсәй территорияһының Көньяҡ һәм Көнсығыш сиктәрен һаҡлап ғүмер кисеүсе ҡыпсаҡ ҡағанаты, татар-монгол сиреүенә ҡаршы ике тиҫтә самаһы йыл ҡаршы тороп, яһаҡ түләү шарты менән Килешеү төҙөгәндән һуң ныҡ ҡырылыуы, физик һәм рухи яҡтан ҡаҡшауы арҡаһында тарҡала башланымы икән?

Һәр хәлдә, XIII быуаттарҙа ул көсһөҙләнә һәм кемдер — христиан, кемдер католик диндәрен ҡабул итә. Мин иһә ислам динен яҡын күреүселәр нәҫеленән. Зат-ырыуым бөгөн Әйек, Наҡаҫ буйҙарында йәшәй. Ҡары ҡыпсаҡтар беҙ. Боронғолар. Ҡара сәсле, йәшел йә зәңгәр күҙле һылыу кешеләр. Бөрйән районына сәфәр ҡылғанымда Бошман бейҙең ҡәбер ташына зыярат ҡылғайным. Бер йылды Ишембай районында Ноғман Мусин ағайҙың тыуған ауылы Ҡолғонала йәшәүсе ырыуҙаштарымда ҡунаҡта булып кинәнес кисереп ҡайттым. Ярты донъяға һибелеп йәшәгән ырыуҙаштарымды танымау мөмкин түгел. Төрки телле халыҡтарҙың “Туғанлыҡ” фестивалендә хакас ҡыпсаҡтары менән аралашыу ҙа онотолмай әле.

“Ҡыпсаҡтар” поэмаһында мин Юғары аңдың: “Һин үҙең кем, ҡатын?” — тигән һорауына: “Мин — ҡыпсаҡ”, — тип яуап биргәйнем. Һәм, әлбиттә, ниндәйҙер төпкө аңымдағы державасылыҡ “сире” менән сирләһәм дә, мин башҡорт ҡыпсағы.

Донъялыр был... Уның ҡатмарлы ла, ябай ҙа төшөнсәләрен аңғарып та, аңлап та бөтөүе еңел түгел...

## Нимә ул бәхет?

*Бәхет һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ,*
*Килеп инә табын таралғас.*
*Тик көтәһең уны ғүмерең буйы,*
*Бәхет өсөн генә яралғас.*

*Рәми Ғарипов*

Бәхетме? Уға ынтылмаған, бәхет ҡошоноң ҡанатына тағылырға яҫҡынмаған кеше буламы икән? Бәхеттең критерийҙары нимәнән ғибәрәт һуң? Ни өсөн кемдәрҙер бәхетте бер нәмә лә эшләмәй генә “алма беш — ауыҙыма төш” тигән мәғәнәлә аңлай? Бәхетле кешеләр генә ысын һәм ҡабатланмаҫ мөхәббәткә дусар була, бәхетле кешеләр генә тиктомалдан уңыштарға тарый, бәхетле кешеләр генә ауырымай, тик улар ғына ҡаршылыҡтарһыҙ прогресҡа өлгәшә, тип уйлаусылар күп. Мин, нимә генә эшләп ҡарамайым, ниндәй генә физик һәм рухи көс менән тырышмайым, уңыш минән ҡаса, бәхет йөҙөн бора тип төшөнкөлөккә, шул сәбәптән эскелеккә бирелгәндәр һәм хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар ҙа етерлек. Бәхет... Ул кеше яҙмышындағы, мөхәббәттән ҡала, иң ҙур һәм һирәк бойомға аша торған төшөнсәлер, моғайын. Мөхәббәт аңлашыла, ул берәүҙе лә урап үтмәй. Уның бәхетле, бәхетһеҙ булыуы ихтимал. Әммә Хоҙай Тәғәлә ергә килтергән бер генә кешеһен дә мөхәббәт тигән бүләктән мәхрүм иткәне юҡ.

Нимә һуң ул бәхет?

Реинкарнацияға ышаныусылар бәхетте кешенең үҙенең ергә яңынан килерҙән алдағы ғүмер итеү формаһы һәм уның нәҫеленең Бар Ҡылыусы алдындағы ғәмәлдәре өсөн бүләк ителгән яҙмышы, тип баһалай. Мин кеше йәненең Хоҙай Тәғәлә тарафынан йыһан эволюцияһы ҡатнашсыһы ителеүенә ышанам, йәндең милләттең, ырыуҙың конкрет яҙмышына ҡатнашсы, йоғонто яһау бурысын да аңлайым һәм ҡабул итәм, сөнки кеше үҙе ерҙән үткәс тә балаларының тамырында, аҙаҡ уларҙың балаларына күсеп йәшәүен дауам итәсәк. Юйылмай торған генетик һәм тарихи хәтерҙең сифаттары мине тетрәндерерлек халәттә һоҡландыра. Кеше йәне камиллыҡҡа ынтылыш юлында ерҙә үткән һынауҙар һәм тәжрибә аша артабан да хеҙмәт итергә бурысландырыла, күрәһең.

Шуныһы ҡыҙыҡ, христиан дине йәнде ҡотҡарыу менән мәшғүл. Христиан динле кеше гонаһ ҡылһа, сиркәү руханийы алдында асылып (исповедь) тәүбәгә килергә тейеш, ә рухани уның гонаһтарын ярлыҡау хоҡуғына эйә. Ә ислам динендә гонаһтарҙан аралаусы юҡ, гонаһ ҡылмаҫҡа ҡушыла. Гонаһлының урыны — тамуҡ, гонаһһыҙҙыҡы — ожмах. Гонаһҡа ҡарата бындай ҡаты талап, минеңсә, урынлы. Тик шуныһы ғына аптырата: бына нисә мең йылдар христиандар “Библия”ны , мосолмандар “Ҡөрьән Кәрим”де уҡый һәм Бар Ҡылыусының илаһи бөйөклөгөнән тетрәнеп илай. Тик... дин талаптарынса йәшәп, бәхеткә өлгәшергә теләмәй. Дини ҡанундарҙың камиллығына ышанмай, үҙ ҡағиҙәләре аша бәхет яуларға тырыша. Бының нилектән булыуы миңә ҡараңғы һәм аңлашылмай...

Бәхет... Нишләп кешеләр бәхет, бәхет, бәхет тип хыяллана? Хыяллана тинемме? Эйе шул... Ә хыял үҙе нимә һуң? Дөрөҫ, алдыңа сығыры йә ихтимал, йә һис мөмкин булмаған алыҫтағы өмөт түгелме ни? Ә өмөт ниндәй булмаҫ? Өмөтләнәһең, ә хыял ысынбарлыҡҡа әйләнмәй ҙә әйләнмәй. Эйе, уға барып еткән осраҡтар була ул. Ундай бәхет бөтә кешегә лә тәтейме? Лотерея билетына бөтә кеше лә машина ота алмай бит. Тимәк...

Тимәк, бәхет, ожмах кеүек үк, шартлы төшөнсә. Уға аҡса түләп өлгәшеп булмай. Минең уйымса, ул кешенең күңел торошона, инаныстарына бәйле. Бигерәк тә бәхет тигән хыялдың аныҡ параметрҙарын белмәһәң. Әгәр бәхет, һинең аңлауыңса, түшәмгә төкөрөп ятҡан килеш тә бай булыу икән, уны ҡулыңа төшөрөр өсөн аяғүрә баҫырға, эшкә егелергә, эшләгең килмәһә, кешене рәнйетеү, хаҡына инеү иҫәбенә үҙең өсөн хыялыңдағы бәхеткә барып етергә мөмкин. Ул һеҙгә кәрәкме? Кәрәкһә — рәхим итегеҙ.

Бәхеттең төп нигеҙе — намыҫ. Намыҫығыҙ ҡушһа йәки ныҡ теләһә... эйәрегеҙ...

Кем өсөндөр бәхет — уртаҡ мөхәббәт. Ул хаҡта мин алдараҡ һөйләгәйнем инде. Мөхәббәт — хыял да, бәхет тә түгел ул. Мөхәббәт — Аллаһ ҡөҙрәте. Уны фетишҡа әйләндереү — хайуани уйһыҙлыҡ. Кеше ергә ҡосаҡлашып, үбешеп йәшәр өсөн тыуҙырылмай. Мөхәббәт — ләззәт кенә түгел. Аллаһтың йыһани бурысы беҙ, ер мәхлүктәре проблемаларынан күпкә, күпкә, күпкә глобалерәк!

Бер осор, кемлегемде аңларға тырышҡан мәлдә, үҙем ғүмер иткән әҙәби даирә тарафынан ҡабул ителеп бөтмәүемдән йонсоған һәм төшөнкөлөккә бирелеп китеүемдән, даирә ҡағиҙәләренең минекенә тап килмәүенең сәбәптәрен эҙләп тә таба алмай яфаланғанымда, мин “бәхет” тигән төшөнсәгә барып төкәлгәйнем. Үҙемде йәлләүҙәнме, яҡларға, уңышһыҙлыҡтарымды аҡларға тырышыуҙанмы, яҙмышымдағы бөтә фажиғәләрҙе бәхетһеҙлегемдән күрә

башланым. Нишләп һуң, тип уйланым мин, әйтәйек, исем-дәрәжәле ҡайһы бер ир-ат үҙе эскесе, бисәһе бешергәнде ашай, ул йыуған кейемде кейеп, әллә кем булып йөрөй, икмәктең ни хаҡ тороуына битараф, ә миңә керҙе лә, иҙәнде лә үҙемә йыуырға тура килә, киләһе эш хаҡына тиклем аҡсаны нисек еткереү хаҡында ла баш ватам, аҡса табыу ҙа минең өҫтә, унан ары теге дәрәжәле кешеләрҙең эшмәкәрлегенән түбәнерәк булмаған әҙәби продукция етештерергә лә бурыслымын, шул бурыстарҙы һаулыҡ, эмоциялар иҫәбенә башҡарһам да ... тормоштан ҡәнәғәтлек, бәхет тойғоһо алыҫлаша ла алыҫлаша? Нишләп бәхет ҡошоноң ҡанаттарын хеҙмәт, инанғанлыҡ, фиҙакәрлек, хатта дәрәжәлеләрҙән кәм булмаған сифаттар менән дә эләктереп булмай?!

Кешенең бәхетен уның регалиялар, матди етешлек эсендә йәшәү даирәһе үлсәмдәре менән үлсәү — мәғәнәһеҙлек. Мин быны ваҡыт үткәс кенә аңланым. Үҙем етешһеҙлектә йәшәгәс, өҫтөнлөк тип һанаған муллыҡта ғүмер итеүселәр бәхетлелер, тип уйлай торғайным. Ә бит “Байҙар ҙа илай” икән дә... Анау урлап йыйған булһа ла аҡсалы, етешлектә йәшәгән Борис Березовский тигән миллиардерға нишләп тормоштан ваз кисергә ине? Күңел бөтөнлөгөн юғалтҡандыр ул, китеп барған юлы сиккә алып барып терәткәндер. Ә бына беҙҙең Искәндәр Мәскәүҙә полиграфия университетының иҡтисад бүлегендә уҡып йөрөй. Әсәһе ярайһы етди дәүләт хеҙмәтендә. Бәхет түгелме ни!?

Элек мин, ғүмер юлымда яҡшы кешеләр осрау сәбәпле, бәхетле инем. Әммә, ғүмерҙәр үтеп, яҙмышымды тик үҙ көсөмә генә таянып донъя ҡороу һәм тормошто ойоштороу ваҡыты еткәс, бер-бер артлы ябырылған ҡыйралыштарҙы анализлауҙан килгән һығымталарҙан аңланым: үтә бәхетһеҙ үк түгелмен. Сөнки кеше өлөшөнә инмәнем, хәләл булмаған ҡаҙылыҡ һоғонманым, берәүгә лә үҙ мәнфәғәтем хаҡына аяҡ салманым, берәүҙең дә башын ашаманым. Урра! Мин — б ә х е т л е!

Ә асылда... Бәхетле кешеләр шиғыр яҙмай. Бәхеттәренән ләззәт кисереп ғүмер итә түгелме? Ә, бәлки, ғүмеремдең ҡаршылыҡтар һәм юғалтыуҙарҙан тороуы — яҙмыштыр?

Яҙмыш... Был һүҙҙең тамыры юҡҡа ғына яҙыу һүҙенә бәйле түгелдер. Ә тормошта килеп тыуған көтөлмәгәнлектәр ҙә яҙмышмы икән? Ундай көтөлмәгәнлектең логикаһы барҙыр бит?

Мин юғары белемде педагогия институтында алдым. Был уҡыу йортоноң филология факультетында мин уҡыған осорҙа педагогика, психология фәндәре ярайһы төплө, философия, эстетика менән этика ярҙамсыл фәндәр кеүек уҡытылды. Ҡыҙыҡһыныусан хәсиәтле булыуым сәбәпле, китапхананан “Логика” тигән китапты алып, уны үҙ аллы үҙләштереп маташтым. Китаптың тәүге бүлегендә үк “Логика и случайность” тигән төшөнсәләргә бирелгән аңлатма хәтеремдә ҡалған. Кеше яҙмышындағы хәрәкәттең, ҡылыҡтарҙың логикаһы һәм мотивацияһы булған кеүек, кешене көтөлмәгәнлек (случайность) осраҡтары ла һағалауы ихтимал икән. Был һин дә мин урамдан китеп барған кешенең башына ҡапыл боҙбармаҡ ҡубып төшөп, кешенең тиктомалдан һәләк булыуы менән аңлатылғайны.

Һуңғы осор ғалимдары былдай хәлде көтөлмәгәнлек (случайность) тип аңлауҙы инҡар итә. Билдәле булыуынса, Ньютон да тормошто детерминизм, йәғни объектив закондар менән ваҡиғалар килтереп тыуҙырған шарттарҙың берҙәмлеге, ул берҙәмлектең Хоҙай ихтыярында булыуы менән аңлата.

Минең уйлауымса, кеше шулай ҙа яҙмышына йоғонто яһарға һәләтле. Дөрөҫөрәге, былдай һәләт айырым кешеләргә хас. Яҙмыштың ғилми тел бифрукация тип атаған

нөктәгә, йәғни һайлау талап иткән сатҡа барып терәлгән саҡтары булыу берәүгә лә сер түгел. Тимәк, яҙмыш кешене ниндәйҙер һайлап алыу нөктәһенә килтереп төкәтеүсән. Һәм беҙ эске интуициябыҙ, һәләтебеҙгә күрә, зиһенебеҙҙә формалашҡан логикаға таянып, теге йәки был юлды һайлап алабыҙ. Был юлдың ниндәй эҙемтәләргә килтеререн баһалау — иң ҡыйыны. Уңырға ла, туңырға ла мөмкин. Ә бит арабыҙҙа шундай кешеләр ҙә бар: һәр аҙымы, һәр ҡабул иткән ҡарары тик уңышҡа ғына алып килә. Былар — “везунчик”тар. Мин тормошта “везение — невезение” тигән төшөнсәләр барлығына ныҡ инанам. Атайым әйтмешләй, “баҙарҙа аҡ ҡаластың булмаған сағы” ла етерлек, булған сағы ла бар.

Ә тормош барыбер төшөнөүе ауыр булған логика һәм ҡанундарға буйһона. Был ҡанундарҙы нисек абайларға, логикаһына һәм системаһына нисек төшөнөргә һуң? Бигерәк тә ер ҡанундарының системаһы бер былай, бер тегеләй үҙгәреп торған шарттарҙа?

Хәйер, беҙ һәммәбеҙ ҙә шундай аҡылға өлгәшһәк, тормоштоң ҡыҙығы булыр инеме икән? Бөтә нәмә лә алдан һыҙылған, маршруты, туҡталыш пункттары, күрһәткестәр ҡуйылған саттар таныулы булһа, уйланырға, эҙләнергә, минең кеүек һөнәр кешеләренә ижад һәм фекер офоҡтарын киңәйтеү өсөн төндәр йоҡламай яҙаланырға, күңелең менән зиһенеңдең берҙәмлегенә өлгәшкәндә шатлыҡ кисерергә форсат та ҡалмаҫ ине.

Яҙмыш, күрәһең, юҡҡа ғына киләсәгебеҙҙе лә, күрәсәгебеҙҙе лә йәшереп тотмай. Принц Гамлет, мәҫәлән, шундай һығымтаға килә лә баһа: “ На свете, друг мой Горацио, есть много такого, что и не снилось нашим мудрецам”...

Ә теге үкенесле күренгән көтөлмәгәнлек, боҙбармаҡтың уйламаған ерҙән башҡа килеп төшөүенә килгәндә... Күрәһең, беҙҙең күҙлектән генә ғәҙелһеҙлектер ул. Аллаһ үҙенең барлығын ана шундай абсурд кеүек күренгән ваҡиғалар аша таныталыр. Бындай “ғәҙелһеҙлектәрҙең” беҙгә ҡараңғы, төшөнөп тә етмәҫ логикаһы һәм мәғәнәһе бар. Гомерҙың “Илиада”һын ғына алайыҡ. Ер өҫтөндә ҡот осҡос Троян һуғышы бара. Ә Олимптағы аллалар ҡырын ятып “һөйәк ташлаш” уйынын уйнай. Һуғышта ҡатнашыусыларҙың яҙмышы улар ҡулында. Йәшәү менән үлем дә улар ихтыярында. Алыштамы, тормоштамы кемдең еңергә, кемдең еңелергә тейешлеге, тимәк, юғарыла хәл ителә.

Үҙемдең ныҡ сирләгәндә наркоз тәьҫирендә Йыһан ҡаршыһында япа-яңғыҙ баҫып тороуым, ҡайҙа барып төртөләргә тейешлегемде аңлай алмай ҡурҡыу, сараһыҙлыҡ кисереүем, кемдеңдер ҡолағыма (русса) ҡаты ғына итеп “Иди!” тип әйтеүен дә иҫкә төшөрһәң...

Донъялыр был... Өҫтөнлөктәрҙең ҡиммәте бер баш түбән, бер аяғөҫтө баҫа һәм ҡиммәттәрҙең ҡиммәте лә үҙгәреш кисерә тора икән шул.

Тимәк, “бәхет” тигән алдандырғыс, албырғатҡыс төшөнсәме, хыялмы булған теләк тә, тәбиғәт, дини тәғлимәттәр, кешенең күҙаллауҙары кеүек — күп яҡлы. Ҡритерийҙары юҡ. Американдарҙың рустар үҙҙәренә әйләндереп алған лозунгыһы бар: “Хочешь быть счастливым — будь им!” Ул һайлау мөмкинлеге хаҡында. Бәхетте байлыҡта күрһәң, тырыш, бай бул; мөхәббәттә күрһәң — ярат; ижадта күрһәң — ижад ит; дин юлын һайлаһаң — рәхим ит һәм башҡалар. Тик бер нәмә хаҡында ғына онотма: намыҫлы бул, гонаһтан ҡурҡ, ояла бел һәм кешеләрҙе йәлләргә өйрән, ярат.

Бының бер ҡыйынлығы ла юҡ. Тик был шундай ауыр юл.

## “Донъядыр бу...“

*Ырымбурҙа мәсет күп,*
*Ҡарғалыла мулла күп.*
*Мин дә мулла булыр инем,*
*Ләкин минең ваҡыт юҡ.*

*Яҙғандарға һорау күп:*
*Нишләп минең ваҡыт юҡ?*

*Атайымдың йыры*

Наҡаҫтың ҡырсыны шундай йылы... Йылға ағышына ҡарап ултырыуы ла, уның үҙе генә белгән көйгә йырлауын тыңлау ҙа ялҡытмай. Ағын үҙе лә, әлеге һыуҙың көйө лә һинән бер нәмә лә талап итмәй, үҙ ыңғайына, үҙ юлы һәм үҙе генә белгән яҙмышын юллап хәрәкәт итә. Ә һин ошо йырлы хәрәкәттең асылын бик үк төшөнә алмаһаң да, ниндәйҙер арбау көсөнән айырыла алмай, яр буйындағы йылы таштар өҫтөндә ултырыуҙан ләззәт кисерәһең. Наҡаҫтың таштары эре түгел, ап-аҡ ҡыналар. Ҡайһы берҙәре аҡыҡты хәтерләтеп ҡуя. Бынауһына ла күҙең төшә, анауһына ла. Ялтырауыҡ таштарҙы йыйғы килеп китә. Иң матурҙары, шымаларынан яныңа бәләкәй генә күбә өйәһең дә, ниндәйҙер затлы хазинаның хужаһы кеүек кинәнес кисерәһең. Бынауы ап-аҡ ҡынаһын йөҙөк ҡашы итһәң, бигерәк шәп булыр ине. Ундай йөҙөк тик һиндә генә буласаҡ, сөнки бының кеүек матур таш бүтән ҡайһы ерҙә булһын ти ул... Рәхәтлектең эсенә сумғы килә. Наҡаҫ һай ул. Ләкин тәнеңәме, йәнеңәме һарылған ниндәйҙер шөбһә-арыу ғәләмәтен һыпырып алған кеүек йыуып алырға һәләтле. Һине борсоған нәмәләрҙе йылға ни рәүешле таҙарталыр, уныһы ҡараңғы, юғиһә шом-шөбһә, ҡайғы-хәсрәт менән ярҙа ултырыусылар, йәнен һәм тәнен сихәтләндереүселәр аҙ булған тиһеңме?

Наҡаҫтың түбәнгерәк яғынан төтөн еҫе сыға. Кем яҡты икән усаҡты? Барып күрергә кәрәк. Ә унда тиңдәштәр сыр-сыу килешә. Биби инәй төшкән икән Наҡаҫ буйына. Бына был ысынлап та күңелле ваҡиға. Усаҡ яҡҡан, ҡап-ҡара ҡылыслы ҡаҙанын ут өҫтөнә элгән. Тоҡҡа тултырылған ҡайын туҙын таҫмалап һыҙырып, Наҡаҫта йыуалар. Туҙҙы майы ҡыҙған ҡаҙанға һала бара Биби инәй, нәҙек кенә ағас көрәге менән ҡаҙанды болғата, тирә-яҡҡа тәмле еҫ тарала. Беҙҙең ике күҙебеҙ ҡаҙанда. Тиҙҙән уның эсендә ҡап-ҡара дегет кеүек матдә барлыҡҡа килә. Һағыҙ... Уны инәй һалҡын һыулы күнәккә ауҙара. Һыуынырға, ойошорға тейеш. Түҙеп булмай, ҡасан өлгөрөр икән? Ниһайәт, һағыҙҙы, ҡаймаҡты бешеп май сығарғандағы кеүек, йомарлай. Һәммәбеҙгә лә бер-ике сәйнәмлек өҙөп тоттора. Артабан бушлай таратмаясаҡ, тауары менән сауҙа итәсәк. Ҡиммәт тиһәң инде... Улай уҡ түгел. Бер йомортҡаға ике сәйнәм килә. Ә йомортҡа тауыҡтан тупылдап төшөп кенә тормай. Ҡырҙа эшләп йөрөгән атайҙарға бешереп ебәрергә кәрәк. Өйҙә лә нисәмә ауыҙ. Йәй оҙон. Ризыҡ ишелеп тормай.

Бибиямал инәй ауылдың осонда йәшәй. Улы Әхмәтғәриф бабай, килене Сәғиҙә инәй менән өсөһө генә. Өсөһө лә өлкәндәр. Бала-сағалары юҡ. Әхмәтғәриф бабай балта эшенә оҫта. Бала-сағалары булмағас, өйҙәренә ингән юҡ, етешһеҙ йәшәмәйҙәрҙер. Әхмәтғәриф бабай Сәғиҙә инәйҙе алты балалы ғаиләһен ташлап алған, тиҙәр. Ғаиләһе, киреһенсә, ауылдың түбәнге осонда Наҡаҫ буйында йәшәй. Ғәффә инәй беҙгә туған. Төҫкә һылыу ҡатын ине. Уларға барып йөрөйөм,

ауыр ғына донъя көтәләр. Аҙаққараҡ тормоштары арыуланды. Өлкән улдары Сәйфулла абзый егәрле, ауылдың абруйлы кешеһе булып, тыуған йортонда ишле балалар үҫтерҙе. Үҙ көсө менән намыҫлы йәшәне. Балалары килеп тороп һылыу, гармунға, йырға һәләтле.

Хәтеремдә, атайым әнейемдең ныҡ ҡына асыуын килтереп ҡуйғылай. Ыҙғыш-талашҡа бик үк барып етмәйҙәр. Беҙ, бала-саға, низағтарының ниҙән икәнен бик төшөнөп етмәйбеҙ, әммә аҙ һүҙле сабыр әнейемдең атайыма шулай тип әйткеләгәне хәтеремдә:

— Әхмәтшәриф, минең эйәрсән балаларым юҡ. Һәммәһе лә ҡәҙерле. Шуларҙы үҫтереү ҙә ауыр күренһә, ана балтаң, Әхмәтғәриф кеүек биленә ҡыҫтыр ҙа, үҙ көнөңдө генә күреп тик йәшә. Ҡарыныма һыйған дүрт балам ҡуйыныма һыйыр. Ғәффә бикәм бирешмәгәнде, мин бирешмәм.

Атайым тызырая бирә лә, тына. Сөнки әнейемдең ҡулынан эш килә торған ҡатын булыуы уға билдәле.

Ә теге ҡара һағыҙ иһә... Тәмле ине ул. Уны ауылдың барлыҡ ҡатын-ҡыҙы, бала-сағаһы сарт та сорт сәйнәй. Бүлешә. Бала-саға сәйнәп ята торғас, йоҡлап китһә, иртәнсәк тороуына сәсенә йәбешкән була, уны таҙалап алыу үҙе бер бәлә.

Ололар ҡыҙҙарҙы орошоп та ҡуя:

— Күпме сәйнәргә була шул һағыҙҙы? Ауыҙың шапайып ҡына ҡуя инде. Ҡейәү сыҡмай ултырырһың әле!

Их...
...Наҡаҫта йыуҙым битемде,
Һабын да кәрәкмәне.
Ғүмер буйы бында йәшәү
Яҙмышҡа эләкмәне...

Атайым, ауылдағы өйөбөҙҙөң тупһаһына ултырыр ҙа теге йәки был йырҙы тиктомалдан һуҙып ебәрер ине. Нишләптер уның күп йырҙары ла, йырҙарының һүҙҙәре лә йәш саҡта хәппәргә эленеп бөтмәгән. Эш күп ине беҙҙең, уф, эш күп ине. Картуф баҡсаһын ҡат-ҡат утау, күмеп сығыуҙар, йәшелсә баҡсаһын һуғарыу өсөн көйәнтәләп һыу ташыуҙар, утауҙар, көндәлек ашау-эсеү, өйҙө йыйыштырыу мәшәҡәттәре, мунса, көнкүреш өсөн көйәнтәләп һыу ташыуҙар, мал ҡарау, өй йылытыу өсөн утын хәстәрләү — ҡайҙа ти бөтә ошо мәшәҡәттәрҙең генераторы булған һәм арып-талып донъя көтөүҙән саҡ ҡына арынған саҡтарында йыр һуҙып ебәргән атайҙың күңел кисерештәренә ҡолаҡ һалыу! Ундай кисерештәрҙе аңларлыҡ аҡыл да, ваҡыт та юҡ ине. Бүтән өс туғаным — ике мырҙам, һылыуым өсөн әйтә алмайым, әммә мин, шәхсән атайымдың да, әнейемдең дә кисерештәрен аңлауҙан (аһ, үкенес) бик алыҫ инем...

Мәшәҡәттәрҙән арыған атайым, өйөбөҙ тупһаһына ултырған килеш йырлап бөтә лә, берәүгә лә төбәмәй генә әйтеп ҡуя: “Донъядыр бу...”

## Ләкин минең ваҡыт юҡ...

...Ваҡыт тигән аяуһыҙ шаһит заманалар үтеү менән ваҡытында һине ҡамаған алабарманлыҡ һәм инаныстарыңа хөкөмдар булып алдыңа баҫа икән ул. Юҡ, бөтә кешенең дә түгел, күңеленә намыҫ, яуаплылыҡ кеүек илаһи төшөнсәләр оялаған, ана шуларҙы йәшәү кредоһы тип ҡабул иткәндәрҙең, тигән уйҙа мин. Дөрөҫ, быҙндай нескәлектәрҙән азат йәшәһәң дә була. Мин ни бары үҙ кисерештәрем хаҡында яҙам, үҙ һыҙланыуҙарым, атайым менән әнейем хәсиәтен йәшлегемдә

баһалап бөтә алмауымдан, бөгөн килеп һыҙланыулы үкенескә тарыуҙарым хаҡында һүҙем. Ҡем белә, Фәһим мырҙам менән Фруза һылыуым, бәлки, минән дә былай рухиәтле кисерештәр һәм атай-әнейебеҙ алдындағы бурыстарын минән дә тәрәнерәк аңлауҙан һағыш һәм түләп тә бөтөрә алмаçлыҡ бурыс эсендә йәшәйҙер. Унығы — уларҙың күңел торошо. Ә мин үҙ халәтемде тәҡрәрләйем: ай-һай, ғәмһеҙ, битараф булғанмын! Һораманым бит, юҡ, һораманым: "Атай, нимәгә эсең боша? Әней, нишләп йыш ҡына оҙон, хәсрәтле йырҙар һуҙаһың?" Их, тормош тәгәрмәсен кире әйләндереп булһа икән ул! Их... Бөгөн һыҙланған, ауыртыныуҙар кисергән балағыҙ янына әллә ниндәй ҡөҙрәттәр менән килеп инһәгеҙме... Һеҙҙең йырҙарығыҙҙы, йәнтәслим тормош менән айҡашыуҙарығыҙҙы еңеләйтер, хәсрәттәрҙән аралар өсөн ғүмеремде лә йәлләмәç инем. Биллаһи! Йә, кем инде мин һеҙҙең менән сағыштырғанда? Булдыҡһыҙ бер замана йырсыһы!

"Донъядыр бу..." Ә нишләп "донъялыр был..." түгел? Беҙҙә был рәүешле һөйләшеү юҡ та баһа. Эйе, ваҡыттар үткәс кенә төшөнәм мин атайымдың һүҙҙәрен: мосолман ҡәүемендә ҡабул ителгән төрки матбуғат менән хәбәрҙар булған Ғәниевтар.

...Мин сирләп киттем... Бөтәһе лә ябай ғына башланған кеүек ине. Ҡомсомол урамында урынлашҡан "Панорама Башкортостана" журналының редакцияһына мин йәшәгән урамдан тура ғына барырлыҡ транспорт юҡ. Пенсия хаҡына ғына йәшәп булмау сәбәпле, үҙем яйға һалған, авторҙар туплаған, башҡорт шиғриәте һәм мәҙәниәте кимәленең асылы юғарылығын, намыçым ҡушыуынса, үҙ бурысым тип һанаған эш урынымдан киткәндән һуң рус телендә сыҡҡан журнал редакцияһына барып урынлашырға мәжбүр булғайным. Декабрь айы ине. Ҡышҡыһын беҙҙең ҡала катокка әүерелә. Маршрутканан килеп тә төштөм, тайып йығылып та киттем. Редакцияла көнө буйы ауыртынып ултырҙым ултырыуын. Иртәгәһенә түшәктән тороп булманы. Травмпунктҡа барһам, умрау һөйәгенең 12-се быуыны һынған булып сыҡты...

"Панорама Башкортостана" журналы коллективы ныҡ оҡшаны миңә. Эшлекле кешеләр йыйылған. Баш мөхәррир — Марат Муллаҡаев, Галина Салихова — уның урынбаçары. Тәрән йөкмәткеле был рус ҡатыны минең күңелдәшемә әүерелде. Белмәйем, башҡорт ауылында тыуып үçкән, башҡорт мөхитендә йәшәгән, башҡорт филологияһы факультетында уҡып диплом алған талантлы милләттәштәрем өсөн нисектер, ә мин рус телен тешем-тырнағым менән үҙләштерергә мәжбүр булдым. Сәбәбеме? Ижади фекерҙәремде рус телле башҡорттарға ла, рустарға ла еткергем килде. Мин яҙғандарҙың күбеһе менән башҡорттар башлыса үҙҙәре лә хәбәрҙар бит. Аудитория киңәйҙе. Русса яҙған мәҡәләләрем, алып барған көндәлектәремде рус телле матбуғатта баçтырыу арҡаһында, һис көтмәгәндә, бик күп рус кешеләренән рәхмәт һүҙҙәре, һоҡланыулы дифирамбтар ишеттем. Ләкин... Рустарҙың эстетик талаптарын, уларҙың художестволы фекерен һәм донъяны ҡабул итмешен ҡәнәғәтләндерер көсөм һәм һәләтем булмауын аңламай инемдер шул мин? Рус милләтенең художестволы фекере асылда ике мең йыллыҡ христиан дине ҡиммәттәренә нигеҙләнә. Ә мин? Эйе, мин, әлхәмдуллилаһи, тыумыштан бүтән төрлө ҡиммәттәр әйләнешендә үçеп формалашһам да, үҙемдең ҡыҙыҡһыныулы хәсиәтем арҡаһында донъя мәҙәниәте, конфессиялар, милләттәр ҡаҙанышы һәм уларҙың юғалтыуҙары хаҡындағы тарихи сығанаҡтар менән, дилетант кимәлендә булһа ла, барыбер танышырға йөрьәт иткәйнем дә ул, әммә... рустар мине, рус милли художестволы фекер потенциалынан мәхрүм "иноверец"ты, донъя мәҙәниәте һандығына иç киткес затлы ҡиммәттәр һалырға өлгөргән милләт булыуҙарына ҡарамаçтан, ижадсы тип танырға әҙер инеме ни?

Ярлы көнөм — ялыныс. Унан килеп, мин эшһеҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ун һигеҙем тулыр-тулмаҫтан хеҙмәт юлымды Өфөнөң ул саҡта Октябрь революцияһы урамында урынлашҡан 5-се һанлы мәктәбендә башланғыс мәктәп уҡытыусыһы сифатында башлап ебәргәйнем. Унышы ла бер авантюра: педагогия училищеһының башҡорт бүлеген тамамла ла баш ҡаланың рус мәктәбендә эш башларға йөрьәт итсе әле. Әйтергә кәрәк, ярайһы ныҡ ҡына көсәнергә тура килде. Рус телен үҙләштерергә ҡарар иткәндә мин телдән ысҡынасаҡ һәр һүҙҙе эсемдән ҡат-ҡат ҡабатлай инем. Өфөнөң Киров районына ҡараған 8 йыллыҡ мәктәп директоры Александр Михайлович Смирновты әле лә хөрмәт менән иҫкә алам. Утын менән яғылған был ике ҡатлы ғына мәктәп тулы энтузиастар эшләй ине буғай. Талымһыҙ уҡытыусылар ул заман кешеләренә хас ныҡышмалылыҡ, эшкә ҡарата булған яуаплылыҡ менән мәктәп саралары әҙерләй, уҡыуҙан тыш тәрбиә эштәрен алып бара ине. Бындай тынғыһыҙ тормош минең үҙемдә лә эшһөйәрлек сифаттары тәрбиәләмәй ҡалманы.

Ғөмүмән, милләттәштәрем ниндәй генә фекерҙә булмаһын, рус теле, уның әҙәбиәте һәм донъя мәҙәниәтенә мин ихтирам менән ҡарайым. Рус телен көсәнеп булһа ла үҙләштереүем арҡаһында мин донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән хәбәрҙарлыҡҡа өлгәштем. Ә улар иһә минең зиһен һәм күңел офоҡтарымды киңәйтте.

Донъялыр был... Уның мәғлүмәти киңлектәренә әсир булмау мөмкин түгел. Ул мәғлүмәтте күңелгә һәм зиһенгә һеңдереп бөтөрлөк һәләтем юҡлығын мин аңлайым, әммә төшөнгән тиклеме өсөн дә рәхмәтлемен.

## Ер өҫтөндә ожмах юҡ...

*...Күңел кителеүҙәр ҡтә бит ул —*
*Ваҡытлыса йәнең сабыртыу.*
*...Аңды томаларлыҡ көс бар ерҙә*
*Ғали Йәнәптәре — Ауыртыу.*

Эйе, ер өҫтөнә үҙ теләгең менән түгел, кемдеңдер ихтыярынан кил дә, бында хөкөм һөргән ҡағиҙәләрҙән, имештер, азат бул. Ә бында кемдәрҙер рәхәт эсендә йәшәй, минең кеүектәр (ышанам, бер үҙем түгелдер), донъяның әсеһенән дә, сөсөһөнән дә азат түгел. Хәҙер иһә эске аңыммы, үҙ-үҙемде яҡлау, аралау, аҡлауға ынтылыусы эгоислығыммы иңгә төшкән ҡайһы бер күңелһеҙ һынауҙарҙы Аллаһ ихтыяры тип түгел, ә мәкерле һәм көнсөл бәндәләрҙең аяуһыҙлығы тип аңларға этәрә. Минең сараһыҙлыҡҡа тарыуым гонаһ шомлоғо инеме икән ни? Аллаһи-биллаһи, алдаһам, ошо ерҙә ер йотһон, мин ғүмеремдә лә берәүгә лә аяҡ салманым, интригалар ҡорманым, ғауға ойошторманым, берәүҙең дә икмәген тартып алып ашаманым.

Йәшәү бит, сирләмәгән кеше булмай. Ғүмерем буйы сәләмәтһеҙ булдым мин. Ғүмерем буйы сирҙәрем менән алыштым. Дарыу ҡапмаған бер генә көнөм дә булманы тиерлек. Юҡ, кешегә белдермәнем, бахырланманым. Яраларын өңөнә ҡасып ялаған йәнлек кеүек, үҙ сирҙәрем менән шым ғына, кеше күрмәгәндә илай-илай үҙем айҡаштым. Кем ниндәй сиренә зарланмаһын, мин диагноз ҡуя белдем һәм нисек дауаланыу хаҡында кәңәштәремде әйттем. Яңылышҡаным булманы тиерлек. Сөнки ундай сирҙәрҙең һәммәһе менән дә айҡашҡан тәжрибәм етерлек ине. Яман сирҙән язаланып яҡты донъя менән хушлашыусылар ҙа бар. Уларҙың

ғазаптарын, ауыртыныу кимәлен хәҙер мин ныҡ аңлайым, тик бәндәләрен ихлас яратыусы Бар Ҡылыусыбыҙҙың бәғзеләрҙе, хатта гонаһһыҙ балаларҙы анауындай ғазаптарға дусар итеүен аңламайым!

Ауырыу, ауыртыныу тигәндән... Физик һыҙланыумы, күңел һыҙланыуы булһынмы, был төшөнсәләр донъя мәҙәниәтенән ситтә ҡалмаған бит. Әйтәйек, рәссам Гойяның “Теш врачы кабинетында” тигән картинаһында һынландырылған пациенттың һыҙланыуы һәм кеше сифатын юғалтыр дәрәжәләге ҡысҡырыуы. Рәссам Вильгельм Буштың “Ҡысҡырыусы” картинаһын күргәнегеҙ бармы? Ул... О, ул сараһыҙлыҡ! Үкереп илап ебәрерлек ғазап хаҡында бит! Перуандарҙың түҙеп торғоһоҙ һыҙланыуҙы сағылдырған кувшиндары, һауыт-һабаһы йә көл һауыттары? Уҙған быуат аҙағы скульпторы Олег Сулков картиналарының төп доминантаһы булған сараһыҙлыҡтан ҡысҡырыусы образдар. Донъя мәҙәниәтендә бындай миҫалдар етерлек. Әйтәйек, Михаил Шемякиндың һыҙланыу, ауыртыныуҙы сағылдырған майлы пастеле ҡайғы, хәсрәт, ауыртыныу градацияһы түгелме ни? Үҙем күргәндәрҙең йәнә бер нисәһен әйтәйемме? Рәхим итегеҙ. Скульптор Родендың “Христостың һыҙланыуҙан ҡысҡырыуы”, Пикассоның “Магдалинаның илауы”, уның уҡ “Түҙмәүҙән ҡысҡырыу” әҫәрендәге эмоциялар экспрессияһын, патологияға барып еткерелгән һыҙланыулы ҡысҡырыуҙың мәғәнәһен, тимәк, мин үҙ ауыртыныуҙарым һәм физик ғазаптарым аша аңларға тейеш булғанмындыр. Телгә алынған художестволы әҫәрҙәр сәләмәт кеше өсөн абстракт төшөнсә. Хатта ки эстетиканан алыҫ кисерештәр кеүек күренә.

Тимәк, минең әҙәбиәтем, шиғырҙарымдағы гармония, гуманлылыҡ, изгелектең юғала барыуы хаҡындағы һағыш тиҙ арала түгел, бәндә был төшөнсәләргә үҙ танауы йә аңы менән килеп төртөлгәс кенә аңлайышлы буласаҡ!? Шулай тип инанайым. Юғиһә ни өсөн йәшәнем һуң?..

Врачтар хаҡында төрлө фекерҙәр бар. Халыҡтың күбеһе уларға ышанмай. Ә мин ышана инем. Улар кешенең тәбиғәтен, анатомияһын алты-ете йыл тирәһе өйрәнә. Мин, мәҫәлән, тән төҙөлөшө анатомияһын, крәҫтиән булыуым сәбәпле, мал һуйып, уның эсенә инергә мәжбүрлегем арҡаһында ғына тоҫмаллайым. Мал — мал инде ул. Кеше аңлы һәм уйлы субъект бит. Кеше хәлен аңларға мединститутта өйрәтәләрҙер ҙә инде.

Врачтар ҡулына мин нык ауыртынып барып эләктем. Шул тиклем һыҙланам. Төндәрен түҙер әмәл ҡалмағанда, реанимация медсестраһын саҡыртып, прамидол һалдырып ҡарайҙар. Уның йоғонтоһо үтеү менән ғазаптар яңынан башлана. Ярай ҙа, Хоҙайҙың рәхмәте төшкөрө, Рөстәм Нәзир улы Гәрәев исемле палата хирургы мине ангиографияға ебәрергә ҡарар итте. Нисәмә йылдар яфалаған ауыртыныуҙарҙың сәбәбе асыҡланып, диагноз ҡуйылды һәм бик ҡатмарлы операцияның ҡотолғоһоҙ булыуы билдәләнде. Ҡан тамырҙарым томаланған икән.

Әммә операциянан һуң өҙлөгөүҙәр башланды һәм Өфөнөң 21-се клиник дауаханаһында операцияны ҡабатларға мәжбүр булдылар. З.М.Собханғолов менән М.И.Абдуллиндарҙың алтын ҡулы, сабырлыҡ менән дауалауҙары арҡаһында үлемдән ҡотолдом. Ярты йыл умрау һөйәген һындырып, ярты йыл операция кисереп түшәктә ятырға тура килде. Әхирәттәрем, ҡыҙым Неля, бигерәк тә Фруза һылыуым ярҙамдан ташламаны. Йәш шағир, шағирәләр, журналистар хәлемде белеп торҙо. Тотош шәбәйеп китмәм буғай. Шулай һиҙелә. Таяҡҡа таянмай йөрөп булмай әле.

# Система

*Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым алғыш:*
*Илем,*
*Телем,*
*Ерем...*
*Һәр өнөн*
*Йәнем эстәрендә сукенем дә*
*Күңелемдә бәпләп йөрөнөм...*

Эйе, беҙ башҡорттар. Төрки телле, ислам динле, сикләнгән булһа ла үҙ дәүләтселегe булған милләт. Донъя мәҙәниәте хазиналығына ингән әллә ни ҙур ҡаҙаныштар менән маҡтана алмаһаҡ та, үҙ милләтебеҙ һәм меңәр йылдар арауығында тыуҙырған менталитетыбыҙҙы, рухи талаптарыбыҙҙы ҡәнәғәтләндерерлек ҡиммәттәребеҙ ҙә аҙ түгел. Халҡыбыҙ яҙмышы Рәсәй мәҙәниәте, уның сәйәсәтенән айырылғыһыҙ. Тотош донъяға танылыу алған рус әҙәбиәте, уның юғары сәнғәтенең йоғонтоһонан тыш менталитетыбыҙҙы бөгөн күҙ алдына ла килтереп булмай. Был йоғонтоноң, дөрөҫ, кире яҡтары ла юҡ түгел. Беҙ сабырыраҡ, тотанаҡлыраҡ халыҡ, Европа мәҙәниәтенән айырылғыһыҙ рус культураһының ҡайһы бер йүнәлеше, йола-ғәҙәттәре беҙҙең өсөн ситен. Асылда рустар ҙа, беҙҙең кеүек, инаныс, дөрөҫлөк һәм өмөт кеүек төшөнсәләрҙе ярата. Үкенескә ҡаршы, Рәсәйҙең XX быуат аҙағы һәм XXI быуат башындағы сәйәси һәм иҡтисади ығы-зығы эсенән сыға алмай ыҙаланыуы уның рухи һәм мәҙәни донъяһын баш түбән әйләндереп ҡуйған кеүек булды. Рәсәйҙең аҡыллы кешеләре, ғалимдар ватаныбыҙҙың ҡайһы ҡиблаға йөҙ тотоуын баһалай алмай. Беҙ Европаның йәшәү ҡағиҙәләрен ҡабул итергә тейешме, Азияныҡынмы? Иң ҡыҙығы шунда: беҙгә уларҙың береһе лә оҡшамай. Дөрөҫөрәге, оҡшай ҙа ул, тегеләр беҙҙе бик үк ҡабул итеп бөтмәй. Әллә көнбайыш XX быуат буйы эске сәбәптәр һәм тышҡы агрессия арҡаһында миктәгән, мораль һәм матди юғалтыуҙар кисереп тә, дәүләтселеген һаҡлап ҡала алған илдең эске ныҡлығынан көнләшәме? Беҙҙекеләр, ярар ҙа, яҙмышыбыҙ икенсе төрлө, “у нас особый путь” тип, үсегеберәк позаға баҫа. “Особый путь, особая миссия” төшөнсәләренә килгәндә, был берәү өсөн дә ят түгел. Бөтә илдәр, һәр төр милләт халҡы үҙен уникаль мәҙәниәт һәм менталитетлы тип һанай ҙа. Шул иҫәптән беҙ, башҡорттар ҙа. Донъя беҙҙе таныймы-юҡмы — уныһы икенсе мәсьәлә. Әммә һәр бер уникаль милләт кеүек, беҙ ҙә, үҙебеҙҙең милли амбицияларҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн булһа ла, кемлегебеҙҙе бүтәндәргә танытырға тырышып ҡына торабыҙ. Был дөрөҫ йүнәлеш. Сөнки депрессияға бирелгән, үҙен булдыҡһыҙ тип таныуға ризалашҡан милләт юғалыуға дусар була. Беҙ ҙә үҙенсәлекле милләт, бүтән халыҡтарҙың XXI быуатҡа килеп еткәндә туплаған йәшәйеш тәжрибәһе, техник яҡтан үҫеше, иҡтисади бойондороҡһоҙлоғо беҙҙең өсөн буй етмәҫлек ҡаҙаныштар булып күренһә лә, уның ҡарауы, беҙҙең рухи ҡиммәттәребеҙ тәрәнерәк, тип йыуанабыҙ. Беҙ Европа һәм Азия араһындағы коридор хәлендә йәшәйбеҙ кеүек күренә миңә. Ә коридорҙа йәшәү бик үк уңайлы түгел бит инде ул. Рәсәй үҙе лә ана шул коридор кеүегерәк. Европа менән Азия араһындағы транзит юлды ла хәтерләтеп ҡуя.

Эш нимәлә һуң? Бер ҡараһаң, рустар ҙа, беҙ ҙә уйсан халыҡ. Ни өсөн мандый алмайбыҙ? Эш, минеңсә, беҙҙең милләттәр үҫеше һәм тарихында йәшәү нигеҙҙәренә анализ биреүсе, ҡаҙаныш һәм юғалтыуҙарҙың сәбәбен асыҡлап һығымталар яһаусы, артабан хәрәкәт итер өсөн йүнәлеш биреүсе фундаменталь

философтарыбыҙ булмауҙа. Донъя ҡоролошо һәм йәшәү принциптарын аңлау һәм ҡулланыуға ныҡлы нигеҙ һалырлыҡ аналитиканың юҡлығы беҙҙе бына нисә быуаттар инде тик халыҡтарыбыҙ барлыҡҡа килтергән ижад менән туҡланырға, халыҡ ижад иткән һәм йәшәйеш тәжрибәһе аша инанған ҡиммәттәргә генә нигеҙләнеп һәм таянып, гел артҡа әйләнеп ҡарай-ҡарай үҙебеҙҙе йыуатырға һәм илһамланырға мәжбүр итә. Беҙ, башҡорттар, халҡыбыҙҙың художестволы фекер юғарылығынан уңһаҡ, рус милләте, теоретик һәм аналитиктарҙан былай, әҙәбиәтселәренән генә уңды, тип әйтергә мөмкин. Толстой, Достоевский, Островский, Салтыков-Щедрин, Чехов, Гоголь, Грибоедов һәм башҡалар нисек кенә талантлы фекер эйәләре булмаһын, халыҡты үҙ артынан эйәртеүгә өлгәшә алманы. Беҙ ялҡау. Әҙәби образдарҙан фәһем алырға, һығымталар яһарға, үҙгәрергә, нимәнелер үҙгәртергә йыбанабыҙ. 90-сы йылдар башында беҙҙең бар мөлкәтебеҙҙе, тотош быуат буйы ҡан, тир түгеп туплаған малыбыҙҙы, хатта ки ҙур ватаныбыҙҙы ваучер тигән фантикка алдандырып тартып алғанда ла ана шул ялҡаулыҡ һәм күндәмлегебеҙ ауыҙыбыҙҙы асып ҡалырға мәжбүр итте. Приватизация, шәхси милексенең хоҡуҡтарын ғына нығытыуға йүнәлтелгән закондар сығарыусы парламенттарҙың бәйелһеҙлегенә лә ауыҙлыҡ кейҙерә алманыҡ. Халыҡ мәнфәғәтен яҡларға тейешле парламенттар депутаттары араһында тик чиновниктар, үҙ яғын ғына ҡайырыусы олигархтар, уҙа китһә, власть органдарының күстәнәсенә ымһынған ярамһаҡтар ғына булыуына, халыҡтың нужаһын, уның эске кисерештәрен туранан-тура белеүсе вәкилдәрҙең юҡлығына, Дәүләт думаһы ҡәнәфиҙәренә ришүәтселәрҙең һәм үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыусыларҙың ҡунаҡланыуына ла ҡул һелтәп ҡараныҡ. Ә хәҙер... 20—25 йыл эсендә халыҡтың тел-тешһеҙлеген яҡшы төшөнгән каста бығаса һис мөмкин булмаған, дәүләттекенә параллель яңы Система төҙөүгә өлгәште. Был система дәүләт ҡоролошо системаһы менән йәнәшә йәшәй, камиллаша, үрмәксе ауы кеүек нескә һәм тотороҡло. Бер урындағыһын йыртып ебәрһәң, күҙ асып йомған арала ул икенсе бер аулағыраҡ ерҙә сырмаҡланырға тотона. Уны рәсми телдә коррупция тип атайҙар.

Ә коррупцияның үрмәксе ауын бер өйөргә тупланған кландар сырмаҡлай. Ҡағиҙә ябай: һин йә өйөр кешеһе, йә юҡ. Өйөр эсендәге индивидтарҙың урыны төрлө булыуы мөмкин — ябай шөрөптән алып босҡа тиклем.

Дөрөҫ, кландарҙың ҡағиҙәләре ҡаты. Инициативалы булыу, шәхси азатлыҡҡа ынтылыу хыялынан һин азат булырға тейешһең. Уның ҡарауы, йылы йәки юғары вазифа, уңайлыҡтар, һәйбәт эш хаҡы, орден-миҙалдар, аҡсалы премиялар һәм юғары исемдәргә өмөт итә алаһың. Талантлы, булдыҡлы булыуың мөһим түгел. Тик енәйәтсел, амораль, цивилизация үҫешенә тормоз булған өйөрҙөң йәшәү ҡағиҙәләренә генә тоғро бул.

Бындай хәлдәрҙең мәғәнәһен аңлар өсөн системаның эсендә йөрөү мөһим түгел. Бындай ваҡиғалар ваҡыты-ваҡыты менән матбуғат биттәренә үҙе килеп инә. Ни өсөнмө? Бер-береһенең мәнфәғәтенә дәғүә итеү осраҡтары барлыҡҡа килә һәм ул ҡаршылыҡты клан ҡағиҙәләре буйынса хәл итеү мөмкин булмай башлаһа, конкуренттар бер-береһен рәсми закондарға ярашлы һәм “халыҡ нәфрәтенә таянып”, киң билдәлелек сараһы булған матбуғатҡа сығарып булһа ла юҡҡа сығарыуға өлгәшергә мәжбүр була. Ә көрәш алымдары күптән һыналған. Большевизмдың сәйәси һәм иҡтисади майҙанға ашҡынған осорҙағы көрәш ысулдары камиллаша барһа ла, төп принциптары шул уҡ. Улар армия уставындағы кеүек аныҡ һәм тайпылышһыҙ — власҡа һәм ҡаҙнаға хужа булыу. Ә былар, алдараҡ әйткәнемсә, дан, мал, нан талабын тәьмин итә. Ҡеше өсөн, ҡыҫҡа ғына ғүмерле йән эйәһе өсөн, тағы нимә кәрәк?..

Тамаҡ туҡлығы, дан-шөһрәт, кеҫә ҡалынайтыу мөмкинлегенә эйә булыу — бәғзеләрҙең йәшәү идеалы ана шундай матдилыҡтан ары китә алмай әле. Рухи ҡиблаларға ынтылыш күңел көсөн талап итә шул. Ул юл ауыр һәм оҙон.

Тик шуныһы... Үҙ фекерле, ижадсы булып ғүмер итеүгә ынтылған кешеләр ҙә етерлек. Уларына йәшәү еңел түгел. Уларҙы дәүләт системаһы ла, кландар системаһы ла ситләтә. Ҡылған эштәреңдең баһаһын күрмәмеш-белмәмешлеккә дусар итә.

Ҡайҙан һәм ни өсөн барлыҡҡа килде был үрмәксе ауҙары? Дөрөҫ, ундай тар мәнфәғәттәр төркөмдәренең тарихы оҙон. Йәмәғәт, феодаль, социализм формациялары ла уларҙан азат булманы. XX быуат аҙағы — XXI быуат башында ул технологияһы ныҡлы уйланған коррупцияға, тимәк, амораль һәм ҡотолғоһоҙ бәләгә әүерелде. Сәбәбе 90-сы йылдар реформаларының ғәҙелһеҙлегенә бәйле, әлбиттә. Рәсәй халҡы, нисек кенә булмаһын, дөрөҫлөк яҡлы. Ғәҙелһеҙлек күптәрҙе төшөнкөлөккә бирелдерҙе һәм мораль дефицит барлыҡҡа килтерҙе. Күптәребеҙ мөғәрәптең иң төбөнә ҡоланы, ә башы йомораҡ, уйсан һәм ижади фекерләүҙән мәхрүм булмағандар, 90-сы йылдарҙың законһыҙлығынан күрмәксе, альтернатив йәшәү рәүеше эҙләргә тотондо. Һөҙөмтә көттөрмәне...

“Кешегә бәхетле булыу өсөн күп кәрәкме инде?” тигән фекергә килгәндә... Асылда кешенең ғүмере бик ҡыҫҡа. Уны, минең инаныуымса, гел үҙ мәнфәғәтеңде генә ҡайырып, яуызлыҡ, мәкер, интригалар менән йәшәү формаһына ҡулайлаштырыуҙың, ваҡытында ләззәт тойғоһон татыу шатлығына юлыҡтырһа ла, һис мәғәнәһе юҡ. Дөрөҫ, һәр төрлө мөмкинлектәргә бай ер өҫтөндә асарбаҡланып, меҫкенләнеп, кешенекенә өңшәйеп йәшәү ҙә шәп түгел. Әммә кеше хаҡына инеү — торғаны бер гонаһ, минеңсә.

Бүлек башына “Өс иман” тип аталған шиғырымдан цитата ҡуйыуымдың мәғәнәһе шунда: беҙҙең халҡыбыҙ өсөн тотороҡло система нигеҙе Ил, Тел, Ер төшөнсәләренә ҡайтып ҡала. Дөрөҫөн әйткәндә, тәүге икәүһе бүтән милләттәр өсөн дә тәбиғи борсолоу тыуҙыра торған төшөнсәләр булһа ла, әллә ни ҙур ҡурҡыныс янамаған ҡиммәттәр. Башҡорттар өсөн бигерәк тә тел мәсьәләһе ҡырҡыу. Һуңғы егерме йылда ҙур ауырлыҡтар менән яйға һалына биреп ҡуйған мәсьәлә был арала йәнә килешкеһеҙ юғалтыуҙарға килтерә башланы. Башҡортостанда 2011—2013 йылдар эсендә генә лә байтаҡ ауыл мәктәптәренең ябылыуы, балаларҙың сит ергә йөрөп уҡырға мәжбүрлеге хаҡында ауыл халҡы, уҡытыусылар зарлана, БЮТ, гәзит-журналдар заң ҡаға, ә юғарыла ишетмәмеш тә күрмәмеш. Ә ер? Биләмәләребеҙ наҡыҫайғандан-наҡыҫая. Беҙҙең үҙ еребеҙгә булған хоҡуғыбыҙ тарайғандан-тарая. Бөгөн йәш ғаиләләр ҡалаларҙа йыһани дәүмәл хаҡындағы фатирҙы һатып ала алмай, ауылдарҙа йорт һалып инәйем тиһә, ер ҡиммәт, ата-бабаларың ҡан түгеп һаҡлаған, үҫтергән урмандарыңдан йорт һалыр өсөн ағас йығып ҡара! Утындың утынын мең мәшәҡәттәр аша юллап әҙерләргә, уны сығарып алыу өсөн йөҙ һыуыңды ҡоротоп техника эҙләргә кәрәк әле. Ҡырҡ мулла, илле алла менән нигеҙләндең дә, ти. Ә ҡайҙа эшләп ғаиләне аҫырарға һуң? Бына ниндәй мәғәнәһеҙлектәр, аҫтыртынлыҡҡа оҡшаған кәртәләр алдына ҡуйылғанбыҙ беҙ.

Милләттәрҙе матди һәм рухи ҡаҙанышынан яҙҙырыу, теге йәки был халыҡты реформаларға дусар итеү тәжрибәһенең үтә ҙур “уңыштарға” өлгәшеүе һөҙөмтәләрен беҙ донъя сәйәсәте үҙгәрештәре аша ла күҙәтеп торабыҙ. Америка Ҡушма Штаттарында профессиональ революциялар әҙерләү мәктәбенең 60 йыллыҡ тарихы бар. Был мәктәпкә йыл һайын 50 миллион доллар аҡса бүленә. Уны тамамлаусыларҙың төп имтиханы —

теге йәки был илдә революция яһау йәки үҙенә ҡулай булмаған реформалар эшләүгә этәреү. Быны беҙҙең илебеҙ “Шок терапия”һы, “500 көнлөк иҡтисад программаһы”, ил халҡын ваучерлаштырыу аша дөйөм дәүләт мөлкәтенән яҙҙырыу кеүек халҡыбыҙҙы бөлгөнлөккә төшөргән реформалар аша елкәһендә татыны. СССР бомбаларһыҙ ғына яуланғас, социалистик лагерға ингән бүтән дәүләттәрҙе һәм республикаларҙы яулау башланды. Был революциялар бер үк сценарий менән алып барыла.

Ғөмүмән... Ҡешелек нишләптер ваҡыты-ваҡыты менән ярайһы ҙур ауырлыҡтар, ҡыйралыштар, хатта һуғыш-бәрелештәр аша яңылыҡҡа, йәшәп килгән системаны үҙгәртеп ҡорорға яҫҡына. Торғонлоҡ тип нарыҡланған, шулай ҙа ниндәйҙер именлек, алдағы көнгә ышаныс тыуҙырған совет системаһын үҙгәртергә тырышыусы идеологтар 90-сы йылдарҙа нимәне һәм нисек үҙгәртергә йыйыныуын аңлап бөттөмө икән? Реформалар ни рәүешле һәм ниндәй маҡсатҡа йүнәлтелергә тейеш ине? Сәйәси һәм социаль мәсьәләләрҙең нигеҙен тәшкил итеүсе пландар халыҡ өсөн ҡараңғы ине.

Реформалар зарурлығын 1985 йылда КПСС-тың Генераль секретары М.С.Горбачев башлап ебәрҙе. Дөрөҫ, ул осорҙоң йәмәғәт системаһында торғонлоҡҡа ҡалыплашҡан, ҡулайлашҡан бюрократия менән берлектә әхлаҡи яҡтан өлгөргән, ил, ватан, намыҫлылыҡ, милләт рухы кеүек төшөнсәләргә тоғро интеллектуалдар һәм интеллигенция ла формалашҡайны. Горбачев, күрәһең, нәҡ ана шул интеллектуалдарҙың уның идеяларын күтәреп алырына инанғандыр.

Ул, Европа илдәренең тәжрибәһенә таянып, илдә мәғлүмәти асыҡлыҡҡа, сәйәсәттең демократик формаһына һәм баҙар иҡтисадына йөҙ борҙо. Уның был ниәтен Көнбайыш илдәре хуплап ҡабул итте. Сит илдәр менән оҙаҡ йылдар дауам иткән “Һалҡын һуғыш” СССР-ҙы кәртәләү эсенә ҡыуалап индергәйне. Беҙ матбуғатта “һүҙ азатлығы”, “үҙгәртеп ҡороу” тип тәржемәләп йөрөткән “гласность”, ”перестройка” һүҙҙәре сит ил милләттәр теленә шул көйө “perestroika”, ”glasnost” булып барып инде. Горбачев ана шул демократия шаршауын аса биреп, быға саҡлы тыйылған мәғлүмәттәрҙе халыҡ алдына сығарҙы. Әммә Михаил Сергеевич принцип һәм идеалдары тар бюрократия вәкилдәренең сәйәси көсөн баһалай алмаған булып сыҡты. Нәҡ ошо күрәғараулығы уны көрсөккә алып барып терәтте лә инде. Ҡөйләнгән ҡағиҙәләр яҡлы бюрократия Генераль секретарҙың реформаларына ҡаршы оппозицияға баҫты. 1991 йылда ойошторолған ГКЧП ана шул ҡаршылыҡтың апофеозы ине. Икенсе яҡтан, тиҙ генә күлдәген һәм флагын алыштыра һалырға өлгөргән төркөм ойошоп алды. Уныһы бюрократиянан да хәйләкәрерәк булып сыҡты. Горбачев “туҙғытып” ебәргән иңкеш күсе сәйәси һәм иҡтисади көрсөккә терәлгән илде рухи, мәҙәни, иҡтисади һәм сәйәси катастрофаға килтерҙе. Ил байлығын талау, ришүәтселек, халыҡ мәнфәғәтенә ҡарата аяуһыҙ, вайымһыҙ мөнәсәбәт системаһы “үҫеш” поезының иң арттағы вагонына беркетелде. Был паровоз бына өс тиҫтәнән ашыу фырылдаған була, әммә состав, инде генә ҡуҙғалып, ташбаҡа юлын үтеүе була, уны һыналған саралар менән шып туҡтатып ҡуйыу юлдары табылып ҡына тора.

Рәсәй донъя цивилизацияһына ерегеп китерме? Ҡылынған хаталарына баһа бирергә көс тапһа, әлбиттә. Тарих һабағы бер ваҡытта ла еңел булмай. Тарих һабағына кешелек юғалтыуҙар аша ирешә. Үкенесле, йыш ҡына фәһем алмай...

Борис Ельцинды Мәскәү ҡалаһы партия комитетының беренсе секретары вазифаһынан демократик ҡараштары өсөн түгел, ә ҡул аҫтындағылар менән иҫәпләшмәгәне, үҙен текә тотоуы, эште илке-һалҡы ойошторғаны, булдыҡһыҙ

етәкселегә өсөн төшөргәйнеләр. Әммә Ельцин һәм уның тирәһендәгеләр сәйәсәт баҫҡысынан тиҙ арала яңынан үргә күтәрелеү юлдарын шәйләй һалып алды һәм власть өсөн мәкерле, аяуһыҙ яуға ташланды. Шәхси мәнфәғәттәренең мөмкинлектәре бүҫкәреүгә юл ҡуйырға теләмәй ине Ельциндың ярандары.

Олигархтарҙан тупланған һәм аныҡ, уйланылған план буйынса ил мөлкәтен ҡулына төшөрөргә яҫҡынған нәфселе төркөм теләһә ниндәй юлдар менән үҙ планын тормошҡа ашырырға тотондо. Власть яратыусы Ельцин өсөн сәйәси танылыу табыуҙың берҙән-бер юлы КПСС идеологияһын юҡҡа сығарыу булды.

КПСС идеологияһын реформалау, минеңсә, зарури, заман талабы ине. Сөнки техник, мәҙәни эволюция тар бүлмәлә, хәбәрҙарһыҙлыҡ шарттарында алға бара алмай. Үҫешкән илдәр менән интеграцияға инмәй тороп йәшәү талабы булған технологик үҫешкә өлгәшеп булмай. Ҡешелек тарихы тәжрибә уртаҡлашыу, аралашсылыҡ, алыш-биреш һәм йәшәүҙең алыштырғыһыҙ шөғөлө — сауҙа аша яңылыҡ эстәү, асыштарға юлығыу һәм шуларҙы көнитмештә ҡулланыу тарихы бит инде. Дөрөҫ, ул тарихта бүтәндәр ҡаҙанышын көслөк менән яулап алыу, күршене көрсөккә терәтеп, үҙ мәнфәғәттәрең өсөн юлдар асыу күренештәре лә етерлек.

Иҫегеҙҙәлер, Ельцин донъя иҡтисады күҙлегенән 3 триллион доллар самаһы хаҡҡа баһаланған СССР уранын 11 миллиардҡа һатып ебәргәйне. Шул хаҡта тауыш күтәреп маташҡан генерал Рохлинды нишләттеләр? Үлтерҙеләр ҙә ташланылар. Ҡитте тауыш, китте ғауға. Ҡиң мәғлүмәт саралары шау-гөр килә. Аңға һыймаҫлыҡ һығымта — имештер, уны ҡатыны атып үлтерә була. Генерал чинындағы ирҙең аҡсаһына йәшәп өйрәнгән ҡатын шундай етешлектән үҙ теләге менән баш тартырға иҫәрме ни?

2014 йылдың февраль, март, апрель айҙарын Рәсәй халҡы телевизорға текләп уҙғарғандыр. Берҙән, Сочи ҡалаһында барған Олимпиада уйындарының арбағыс көсөргәнеше күңелдәрҙе яулаған булһа, икенсенән, Ҡиевтың Евромайҙанында барған көрәштең ҡыҙғандан-ҡыҙа, ҡотолғоһоҙ ҡапма-ҡаршылыҡтар бәрелешенә дусар ителә барыуы хәүефкә һалды. Бандера идеяһы яҡлы кешеләр, Украинаның Евросоюзға ағза булып инеүен талап итеү маҡсатынан, халыҡты майҙанға алып сыҡты. Митингылағылар Молотов рецебы менән тултырылған яғыулыҡлы шешәләрҙе, урамға түшәлгән таштарҙы ҡулланып, Хөкүмәт биналарына, уларҙы һаҡлаусы “Бөркөт” подразделениеларына һөжүм итте. Тиҫтәләгән кеше вафат булды. Башлыса рус милләтле кешеләр йәшәгән Харьков, Севастополь, Симферополь, Донецк ҡалалары, Ҡырым ярымутрауында урынлашҡан Ҡырым автономиялы республикаһы, майҙанға йыйылыусылар тарафынан төҙөлгән яңы власть кешеләренә буйһонмаясаҡтарын белдереп, урамдарға сыҡты. Ҡурҡыныс, бик ҡурҡыныс ине был сыуалыштар. Ғәҙәттәгесә, Көнбайыш бөтә был бәләләрҙе Рәсәйҙән күрмәксе булып маташҡайны ла, Рәсәй сабырлыҡ менән ваҡиғалар сиселешен көттө.

АҠШ-тың Үҙәк разведкаһы идаралығының аҡса янсығы — миллиардер Сорос бер осор Рәсәй киңлектәрендә үҙ ранчоһындағылай йөрөп ятты. Өфөлә лә ниндәйҙер “Ғаиләне планлаштырыу”, “Саентологтар мәктәбе”, “Иегов христиандары“ кеүек йәмғиәттәр эшләп алып китте. Әйткәндәй, полиграфик яҡтан бик матур биҙәлгән, саф татар теленә тәржемә ителгән китап тотҡан ике ханым минең ишекте лә ҡаҡҡайны. Башҡортса өндәшкәйнем, мине Иегов христианы булырға татарса өгөтләй башланылар. Ошондай секталар һәм башҡа ойошмалар, йәмғиәттәр өсөн Сорос әфәнде аҡса йәлләмәне. Рәсәйҙә бөгөн 140 миллион кеше йәшәй. Ә бит 60 миллион тирәһе кеше йәшәһә лә етер ине, тиген

пландың барлығы хаҡында әсенеп ҡыңғырау ҡағыусылар бушты һөйләмәй. Тимәк, ғаиләләргә күп бала табыуҙың һис мохтажлығы юҡ, тигән пропаганда алып барыусы эшмәкәрлектең булыуы ла ялған түгел. Улар ғаиләне планлаштырыу, хатта бала булмаһын өсөн һаҡланыу сараларын өйрәтте, үҙең өсөн йәшәү, тормоштан ләззәт алыу, аҡса табыу юлдарын эҙләргә өйрәтеүсе курстар, уҡыуҙар ойошторолдо. Шундай идеяны таратыусыларға, яңы йәшәү формаһын өйрәтеүселәрҙең адепттарына ҙур-ҙур гранттар бирелде. Туй үткәс — дөмбәрә, байтаҡ зарар килтерергә өлгөргән был ойошмаларҙың һуңғы ваҡытта сит ил агенттары тип теркәлеүен талап итә торған закон сыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, илдәрҙе, милләттәрҙе ҡоллоҡҡа батырырға яҫҡынған аҫтыртын эшмәкәрлек — глобаль “Алтын миллиард” Системаһы менән сағыштырғанда, дәүләттәр һәм кландар системаһы әллә ни ҡурҡыныс та түгел кеүек, әммә һаҡ, әҙерлекле булырға кәрәклек көн кеүек асыҡ.

Бындай уйланылған, технологиялары һыналған системаларға ҡаршы торорлоҡ сара — рухи ҡәрҙәшлек идеяһына таяныуҙыр, моғайын. Рухи ҡәрҙәшлек эсенә милли үҙаң, ватансылыҡ һәм, әлбиттә, дин уртаҡлығы кеүек төшөнсәләрҙе индерергә була. Нәҡ ошо быуаттар буйы һыналған ҡиблаларға йөҙ тотоу арҡаһында беҙ барбыҙ, XXI быуаттың милләттәр реестрында иҫәптәбеҙ. Шулай ҙа мине бер һирәк күренеш һағайтып ҡуя. Ислам динле бәғзе бер егеттәрҙең бер ҡатлы һәм белемһеҙ булыуы. 2013 йылда Мәскәүҙә Дәүләтбаев фамилиялы башҡорт егетен ҡулға алдылар. Имештер, ҡорал йыйған, террор әҙерләгән. Ысын булһа, йүнһеҙлек бит был. Һаҡал үҫтергән булып, ислам исеменән тиктомалдан бер нисә кешене шартлатып ҡына донъя системаһын үҙгәртеп була тиме ни?! Динле булыу өсөн, берҙән, тышҡы ҡиәфәт кенә күрһәткес була алмай, икенсенән, кешенең ғүмере бәндәләр ихтыярында түгел, ә Аллаһ ихтыярында.

Ҡешене дин фанатына әүерелдереү рухиәт өсөн көрәшкә нигеҙләнмәй бөгөн. Бөгөн дә, беҙҙән алда йәшәгән йәмғиәттәрҙең дә төп проблемаһы — мал бүлешеү. Нәфсене ҡандырыу. Мал, күрәһең, еңел генә ҡотола торған кумир түгел. Сәйәсәт тә шулай.

Ул, Аристотель билдәләүенсә, сәйәсәтселәрҙең халыҡ мәнфәғәтен яҡлап йәмғиәт менән мөнәсәбәткә инеүе. Тар ҡатламдарҙың мәнфәғәтен ҡайғыртыуға ғына йөҙ тотһа, дәүләт көсһөҙләнә.

Владимир Владимирович Путин бына өсөнсө мөҙҙәт инде илебеҙ Президенты вазифаһын үтәй. Был йылдарҙың сәйәсәте лә, иҡтисады ла әллә ни ырап киткәне юҡ әле. Дөрөҫ, илебеҙҙә бер ни тиклем дәүләт мәнфәғәтен ҡайғыртҡан эре монополиялар барлыҡҡа килде. Уларға хөкүмәт чиновниктары етәкселек итә. Был тәбиғи күренеш. 90-сы йылдарҙың йәш олигархтары илдең ҡеүәтен үҙ кеҫәңә индереү өсөн кәртәләр юҡ, тигән лозунг менән йәшәне. Дәүләт Думаһы уларҙы яҡлаған закондар ҡабул итте. Шул арҡала лоббист депутаттарға ла дөйөм бәлештән өлөш сығарыла торҙо.

БыҒаса Рәсәй сәйәсәтендә күҙгә салынмаған Владимир Путинды кландар кеҫәһендә тота аласағына икеләнмәгәндер. Әммә элекке разведчик “ҡаты сәтләүек” булып сыҡты һәм олигархтар закондарынан миктәгән илде хоҡуҡи рельстарға индерергә тотондо. Беҙҙең Башҡортостан өсөн был реформалар драматик күренеш алды, сөнки байтаҡ бәхәстәр һәм сәйәси көрәш аша яуланған суверенитет төшөнсәһе юҡҡа сығарылды, республиканың тапҡан малы федераль бюджет ҡарамағына күсерелеп, унан республикаға ни бары 30—29 процент күләмендә генә өлөш сығарыла башланы.

Элек, 70—78 проценты кеҫәбеҙҙә ҡалған осорҙа ла беҙ, халыҡ, уның мәнфәғәтен әллә ни күрмәһәк тә, юлдар һалыу, газ үткәреү, мәктәптәр төҙөү кеүек эштәр йәнгә барыбер ҡәнәғәтлек тойғолары һала ине. Путин Рәсәй Конституцияһының тотош ил өсөн берҙән-бер хоҡуҡи ҡануниәт булырға тейешлеген талап итте. Һәм моратына иреште лә.

Бынан һуң Рәсәй Президенты олигарх кландарҙы Рәсәй сәйәсәтенә йоғонто яһауҙан ситләштерергә тотондо. Кремлгә тотҡарлыҡһыҙ инеп йөрөгән буржуйҙарҙың юлын ҡыҫҡартты, шул уҡ кешеләрҙең ҡулында рупор булған байтаҡ мәғлүмәт һәм матбуғат сараларына, шул иҫәптән телевидение каналдарына ауыҙлыҡ кейҙерҙе. Потанин, Гусинский, Березовский кеүек Ельцин ғаиләһе янында ҡанат нығытҡан һәм халыҡтың хәйерселеккә төшөүе иҫәбенә кеҫә ҡалынайтҡан бәндәләр илдан сығып һыҙыу яғын ҡараны. Рәсәй эсендә айырым дәүләт кеүек хөкөм һөргән ЮКОС компанияһының хужаһы Ходорковский бюджетҡа һалым түләмәгәне өсөн төрмәгә ултыртылды.

Айҙар, йылдар буйы эш хаҡы, пенсия ала алмай интеккән Рәсәй халҡына тамсылап булһа ла ҡулаҡса эләгә башланы. Дөрөҫ, халыҡ төшөнкөлөккә бирелергә өлгөргәйне инде. Бушлай эшләгеһе килмәгәндән эшһеҙлектә көн күреүгә һалышҡан байтаҡ репродуктив йәштәге кешеләр эскелеккә, депрессияға бирелгәйне. Рәсәйҙә тыуымдың үлемдән аҙыраҡ булыуы демографик проблема алдына килтереп баҫтырҙы.

Власть — ҡатмарлы институт. Эске рухы һәм ихтыяры көслө кешегә ул йәнә лә нығыраҡ көс өҫтәй, һайыраҡтарҙың мәхлүклеген көсәйтеп ебәрә. Путин бөгөн Рәсәйҙең донъя сәйәсәте һәм иҡтисадынан айырылғыһыҙ булыуын, беҙҙең менән иҫәпләшергә тура киләсәген талап итеүсе ҙур сәйәсмәнгә һәм стратегҡа әүерелде. Уның юғары халыҡ-ара форумдарҙағы киҫкен сығыштарын Европа, АҠШ йәмәғәтселеге ауыр ҡабул итте, ләкин Путин үҙенең хаҡлы булыуын аныҡ миҫалдар менән дәлилләр булды.

Рәсәйҙә күп партиялылыҡҡа юлдар асылды. Мин, әлбиттә, бик аңлап бөтмәйем: күп партия нимәгә кәрәк икән ул? Кешеләрҙе теге йәки был партия ағзаһы булырға ниндәй идеялар әйҙәй һәм ниндәй мәнфәғәттәр берләштерә? Беҙ белгән совет осоро күҙлегенән ҡараһаң, партиялы булыу карьераға юл аса ине. Был, күренеүенсә, әле лә шулай. Власть партияһы булған “Берҙәм Рәсәй” янында программалары бер-береһенән айырылмаған оппозициялағы партиялар бар. Власть партияһын халыҡ әллә ни яратмай. Сөнки Президенттың идара итеү осорондағы уңыштары янында социаль яҡлауҙарҙан мәхрүм кешеләрҙең аһ-зары ла өйөлөп ята. Оппозиция ана шуны лозунг итеп күтәрә лә инде. Тик шуныһы... Был етешһеҙлектәрҙе берәү ҙә бушҡа башҡарырға теләмәй. Сәйәсәттең нигеҙе — аҡсала. Ә уны ҡайҙан алырға? Олигархтар бүлешергә теләмәй, сөнки сәйәсәттән ситләштерелде. Ҡумирҙар сәйәсәт майҙанынан ҡыуылып сыҡмаһын өсөн һуңғы тинен бирерҙәй фанатиктар күренмәй. Рәсәйҙә тик ағзалыҡ иғәнәһенә генә таянып көн күргән партия юҡ. Власть партияһы ҡулында, билдәле, ил бюджеты һандығының асҡысы бар. Ә ҡалғандар?

Беҙ мәктәптә уҡығанда Свердлов, Сергей Лазо, Красин һәм башҡа революционерҙарҙың батырлығына, баррикада алыштарында, яу майҙанында еңеүҙәргә өлгәшеүсе француз революцияһының — Марат, Робеспьер, Куба революцияһының Фидель Кастро, Че Гевара кеүек батырҙары ҡылғандарын уҡып, революция романтикаһына һоҡланып ҡарай инек. Ә шул революциялар ваҡытында ҡаршы яҡтан да, революционерҙар яғынан да иҫәпһеҙ юғалтыуҙар, ҡан ағыуы хаҡында уйланмағанбыҙ.

Оппозиция романтиктарҙы әле лә майҙандарға саҡыра. Үҙенең ике күҙе сит илдәрҙә. Рәсәйҙең сеймал ресурстар сығанағы булыуҙан арына барыуынан риза булмаған Вашингтон, Лондон үҙҙәренең глобаль ниәттәрен тормошҡа ашырыу маҡсатына Евросоюз тоҙағына инергә теләмәгән илдәрҙең боласылары өсөн аҡса йәлләмәй. Донъя эсендә барған революцияларҙың ҡыңғырауы ҡайҙан яңғырағаны хаҡында алдараҡ телгә алғайным инде. Был, һис һүҙһеҙ, табыш килтерә торған тәбиғи ресурстар өсөн көрәш. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй оппозицияһының Президент, Хөкүмәт алдына ҡуйған һорауҙары ла урынлы бит. Ни өсөн тәбиғи ресурстарға бай илебеҙ халҡы уртаса кимәлдән дә хәйерсерәк көн итә? Ни өсөн беҙҙең телевидение хәрби көсөбөҙҙөң ни самала булыуын демонстрациялай, кем һуғыш асырға йыйына һуң?

Ошо һәм бүтән бик күп һорауҙарға яуап биреүҙе һәр граждан талап итергә хоҡуҡлы. Сөнки беҙ һәммәбеҙ ҙә дәүләт ҡаҙнаһы өсөн һалым түләйбеҙ. Тимәк, дәүләт беҙҙең именлегебеҙ, социаль көнкүрешебеҙ һағында торорға, уны тәьмин итергә лә тейешле бит.

Ер өҫтөндә йәшәгән халыҡтың яртыһы техник прогресҡа өлгәшкән XXI быуатта ла ас-яланғас көн күрә. Телевизорҙан күреп йәнем әсегәне иҫемдә: тире лә һөйәк кенә булған Сомали балалары һыуһауҙың, асығыуҙың сигенә еткән. Күҙҙәрендә хәсрәт. Улар күпләп ҡырыла. Ҡеше ғүмеренең бер ниндәй ҡәҙере юҡ. Ә улар менән бер кем дә мал бүлешергә йыйынмай. Ҡиреһенсә, көс һалып үҫтерелгән ризыҡты тонналап-тонналап бульдозерҙар ярҙамында юҡ итеү бара...

Донъя ошондай шарттарға ҡуйылған осорҙа Рәсәй Президенты хеҙмәтен башҡарған Владимир Путинды яратырға ла, яратмаҫҡа ла мөмкин. Эйе, коррупцияны ауыҙлыҡлау саралары табылмауы, бюрократик капитализмдың сәскә атыуы, медицина хеҙмәтенең түбән булыуы, байҙар менән ярлылар араһындағы айырмалыҡтың ғәрләндергес ҙур, эшләп-эшләп тә фатир һатып алыуға аҡса еткереп булмағаны өсөн уға ризаһыҙлыҡ белдермәү мөмин түгел.

Ләкин... күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: иртәнсәк тороуға коррупция юҡҡа сыҡты, ти. Ни булырын күҙ алдына килтерәһегеҙме? Уның юҡҡа сығыуы тотош системаның да юҡҡа сығыуын аңлата түгелме? Илебеҙҙәге коррупция хәҙер дәүләт ҡаҙнаһын үҙ-ара бүлешеүҙең механизмы кимәленә еткерелгән, бер урындан һүтеп ебәрһәң, икенсе ерҙән бөҫөлеп китергә генә тора. Дәүләт бюджет сфераһында хеҙмәт итеүселәрҙең ниндәй ауыр шарттарҙа йәшәүен яҡшы беләөь. Шуға ла медицина, хоҡуҡи органдарға көнө төшкән кешеләр, ҡулын бешерә-бешерә, кеҫәһенә тығыла һәм, сараһыҙҙан, кәмһетелеүле эш хаҡына эшләүселәргә түләнергә мәжбүр була. Сөнки шунһыҙ тегеләр һиңә битараф. Дауаханаларҙа, мәҫәлән, түләнә алмаһаң да ярҙам итәсәктәр, әммә палатала йәнәш ятҡан кешеләрҙең кем кеҫәһенә күпме төшөргәнен ишетеп ятаһың, кеҫәң һай булыуҙан төшөнкөләккә биреләһең һәм үҙеңде ауыр эш башҡарған врачтар алдында ғәйепле тоя башлайһың. Бындай бахырлыҡ комплексы психологик торошто ҡаҡшата, сәләмәтлекте яҡшырыуға булышлыҡ итмәй. Тимәк, коррупциянан ҡотолоу — илеңдәге һәммә хеҙмәт кешеһенә ғәҙел мөнәсәбәттә булыу кимәленә күтәрелеү менән бәрәбәр. Был мөмкинме? Дәүләт — тыйыусы, буйһондороусы институт. Дәүләттең һинең күңелең, рухи талаптарың менән ҡыҙыҡһынырға форсаты юҡ. Дәүләт халҡын аҙмы-күпме туҡ йәшәтергә, енәйәтселекте ауыҙлыҡларға, хоҡуҡ боҙоуҙарға юл ҡуймаҫҡа, илдең матди потенциалын үҫтерергә һәм оборона һәләтен юғары кимәлдә тоторға ғына бурыслы. Ә ҡалғаны үҙебеҙгә бәйле.

Әлеге лә баяғы үҙәккә үткән ришүәтселек, коррупция хаҡында уйланһаң, Эзоптың кинәйәһе иҫкә төшә. Имештер, Эзоп ғүмер иткән Самоста бер ҡараҡ енәйәтсене хөкөм итәләр. Эзоп шул судта сығыш яһай.

“Йылға аша йөҙөп сығып барған бер төлкө ярға еткәс, ҡомороҡҡа эләгеп, оҙаҡ айҡаша. Тәнен талпандар һырып ала. Яр ситенән йүгереп үтеп барған терпе төлкөнөң ыҙаланғанын күреп йәлләй һәм талпандарҙы һурып алырға тәҡдим итә.

— Кәрәкмәй, — ти төлкө. — Былары минең ҡанды оҙаҡ һурҙы. Һурып алһаң, тәнемә яңылары, асыҡҡандары килеп ҡаҙалыр. Был үлем менән бер.

Шуның кеүек, ти философ, был кеше хәҙер инде туҡ, байлығы етерлек, уны язаға тарттырһаҡ, урынына яңы талпан килеп ҡаҙаласаҡ”.

Сағыштырыу, бәлки, урынһыҙҙыр ҙа, әммә бында ниндәйҙер дәрәжәлә дөрөҫлөк тә бар кеүек.

Шул уҡ ваҡытта тотош XX быуат буйы һуғыштар, сикләнгәнлектәр солғанышында серәшеп йәшәгән, 90-сы йылдарҙағы сәйәси түңкәрелеш ҡорбаны булған, хәйерселеккә төшөрөлгән, тырым-тырағай таланған ил халҡына иркен тын алыу форсаты тейгәне юҡ әле. Ни бары ҡыҫҡа ғына ете йыл эсендә Рәсәй иҡтисады өс тапҡыр көрсөккә барып терәлде.

2008—2009 йылдарҙа нефткә хаҡтарҙың ҡырҡа кәмеүе, донъяның кредит баҙары юҡҡа сығыуы Рәсәйҙе генә түгел, донъяның байтаҡ башҡа дәүләттәренең тормош-көнкүрешен дер һелкетә башланы. Был көрсөк Рәсәйҙе бүтән илдәргә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡомға илтеп терәне. Эске вал продукты (ВВП) 8 процентҡа кәмене, аҙыҡ-түлеккә, сәнәғәт тауарҙарына хаҡтар юғарыға һикерҙе. Ғаиләләрҙең ниндәйҙер мөһим әйбер һатып алырға тип серәшеп йыйған аҡсаһы йәнә осһоҙланды. Ярай ҙа был көрсөк, ныҡ ҡына төп башына ултыртһа ла, бик оҙаҡҡа барманы, нефткә хаҡтар күтәрелде һәм кредит баҙары яңынан хәрәкәткә килде.

2010—2011 йылдарҙа иҡтисад үҫеше уртаса 5 процент тирәһе тәшкил итә ине. Тотороҡлолоҡҡа өмөтләнеүсе халыҡ йәнә кредиттар ала башланы, банктар кредиторҙар иҫәбенә нығыныуға йөҙ тотто. Был, әлбиттә, банктар өсөн иң еңел килем формаһы. Ә кредиттарҙы түләү бик күп ғаиләләр өсөн — кабалаға, ваҡытында түләмәгән өсөн өҫтәлгән проценттар муйынға кейҙерелгән элмәккә әүерелде. Етмәһә, эш хаҡының бер урында тапаныуы, эшләп йөрөп тә муллыҡҡа өлгәшә алмауҙан төшөнкөлөккә бирелеү бәғзеләрҙе ысынлап та үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиклем алып барып еткерҙе. Бер ҡараһаң, хөкүмәт илдәге 90-сы йылдар ыҙаһы һәм законһыҙлыҡ шарттарында кәмеүгә дусар ителгән халыҡ иҫәбен арттырыуға йөҙ борһа, икенсе яҡтан, тормош шарттарының көндән-көн насарая барыуы, медицина хеҙмәтенең сифатһыҙлығы, депрессия, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренең көсәйеүе халыҡтың күпләп ҡырылыуына килтерҙе. Продуктив йәштәге егет-ҡыҙҙар, баш әйләндергес хаҡлы торлаҡҡа эйә булыу мөмкинлеге юҡлыҡтан, ғаилә ҡороуға йөрьәт итә алмай ҡаңғырҙы. Ә инде барлыҡҡа килгән ғаилә башлыҡтары, ғаиләне тәьмин итерлек эш булмағанлыҡтан, Мәскәү төҙөлөштәренә, Себер тарафтарына китеп аҡса эшләргә мәжбүр булды. Атайҙар ситтә йөрөгәндә, ауылдарҙағы донъя мәшәҡәте ҡатын-ҡыҙ елкәһенә ятты. Балалар гастролерға оҡшаған гастарбайтер атайҙарҙың тәрбиәүи йоғонтоһонан мәхрүм ине.

Саҡ ҡына баш-күҙ алабыҙ икән тигәндә, Украина болаһы килеп ябырылды. 2014 йылдың урталарында донъя баҙары йәнә энергоресурстарға хаҡты төшөрөп ебәрҙе. Украина, Ҡырым ваҡиғалары арҡаһында Рәсәй санкциялар тоҙағына барып ҡапты һәм доллар, евро кеүек сит ил валюталары курсы ике тапҡырға тиерлек күтәрелде. 12—15 процентҡа еткән инфляция шарттарында бюджет хеҙмәткәрҙәренең (ә уларҙың һаны ил халҡының 20 процентын тәшкил итә) эш

хаҡы элеккесә ҡалды. Торлаҡ хужалығы, газ, электр энергияһына хаҡтарҙы күтәрергә монополистар онотманы. Мин сауҙа үҙәге янында йәшәйем. Икмәккә, һөткә сыҡҡанымда ғына ла еләк-емеш, йәшелсә хаҡтарына күҙ һалғылайым. Яҡын да барырлыҡ түгел. Ит тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Пенсия (халыҡтың 15 проценты пенсионер) күләмен индексациялау инфляцияның яртыһын да ҡаплай алмай. Аптека прилавкалары янына барыу һәм хаҡтарға күҙ төшөрөү генә лә ил хеҙмәтендә сәләмәтлеген юғалтҡан ҡарт-ҡороно инфаркт йә инсультҡа еткереүе ихтимал... Ҡарт-ҡороно ғынамы? Ғөмүмән, нишләп ауыр тормоштан сыға алмайбыҙ һуң? Ниңә беҙ власть органдары алдында законлы талаптар ҡуйырға тартынабыҙ? Минеңсә, халыҡтың аңы менән оҫта идара итеүсе йәмғиәттә йәшәйбеҙ шикелле. Ауыр көнкүреш кисергән халыҡҡа ниндәйҙер сәйер психотерапия уҙғарыла кеүек. Йәмәғәтселектең эшһеҙлек, хәйерселек кеүек ауырыуҙарын — "Беҙ бөйөк милләт!", иҡтисадтың санкциялар йөгөнән билен һындырыуын "Уның ҡарауы, беҙҙән ҡурҡалар!" тигән "дарыуҙар" менән дауалап маташалар. Донъя реестрындағы йәшәү кимәлебеҙ Гватемала менән Лаос араһындағы 91-се урында тороуы ҡурҡыныс түгел, тиҙәр беҙгә. Имеш, Рәсәйҙең саралары һәм тәғәйенләнеше бүтән! Ниндәй айырым юл һуң? Нишләп ул халыҡ мәнфәғәттәрен яҡшыртыуға йүнәлтелмәгән? Беҙ илебеҙ именлеге, уның етешлеге өсөн ғүмеребеҙ буйы бил бөгәбеҙ ҙә баһа. Ә ауырып китһәң? Аллам һаҡлаһын! Ауыр сирҙәрҙе сит илдә генә дауалай беләләр, ҡайһы бер осраҡта кешене мир буйлап кәпәс тотоп йөрөп, аҡса йыйып ҡотҡарып ҡалғылайбыҙ. Мирҙың да бит кеҫәһе иләк кеүек. Арлы-бирле аҡса ишараты килеп инеү була, күҙ асып йомған арала ҡойолоп төшөп тә бөтә.

Һуңғы йылдарҙа миллиард доллар хаҡлы яхталар, балаларын сит илдәрҙә уҡытҡан байҙар, зиннәтле шәхси һарайҙар халыҡтың иҫен бик үк китермәй башланы. Сөнки XX быуат аҙағы, — XXI быуат башын үҙ эсенә алған өс тиҫтәгә яҡын арауыҡ эсендә беҙгә кешеләрҙең төрлө сорттарға бүленеүен, күпселек халыҡтың икенсе сортлы булыуын ярайһы әҙмә-әҙлекле төшөндөрҙөләр һәм күнергә өйрәттеләр.

Етмәһә, дини конфессиялар үҙҙәренә ҙур иғтибар талап итергә тотондо. Хәйер, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе биреү сараларынан азат демократик йәмғиәт халыҡтың рухи ҡиммәттәрҙән алыҫлаша барыуының йәмғиәт өсөн ярайһы ҙур проблема булыуын төшөндө инде һәм был тәрбиә бурысын сиркәү, мәсеттәргә тапшырып ҡына ҡотолмаҡсы була, күрәһең. Юҡ, мин диндәргә ҡаршы түгел. Тик диндәрҙең дәүләт ҡоролошона үтә ҙур йоғонтоһо ғына урынһыҙ, тигән фекерҙә. Дин — һәр бәндәнең шәхси эше лә баһа. Халыҡты күндәм, буйһоноусан итеп тәрбиәләүҙә православиеның да өлөшө етерлек. Бында йәнә әҙәбиәт менән сәнғәттең дә ролен телгә алмау мөмкин түгел. Ҡәмһенеүле йәшәү насариҙар өсөн мәртәбә һанала. "Старотерпец", "мученик", "страдалец" кеүек төшөнсәләр рус әҙәбиәте һәм сәнғәтенең төп мотивтары. Ниндәйҙер уйлап табылған гонаһтар өсөн ебәрелгән ғазаптарҙы буйһонғанлыҡ һәм күндәмлек менән күтәрергә тейешбеҙ йәнәһе лә. Ә күпме сабыр итергә була һуң? Ғүмер һәр кем өсөн дә берәү һәм ғәзиз! Иң ғәжәбе шунда: һөҙөмтә юҡ! Ҡәмһенеүле шарттарға дусар ителеү йәмғиәт эсендә агрессив көсөргәнеш тыуҙыра. Аяуһыҙ мөнәсәбәттәр, һуғыш, үлтереш, уйнаш, эскелек — илебеҙ көнкүрешендә тулып ятҡан тәржемәи хәл...

2015 йылдың 16 апрелендә тура эфир аша һорауҙарға яуап биреүсе Рәсәй президенты "нефть хаҡтарына бәйле булыуыбыҙҙан арына барыуыбыҙ", ил иҡтисадының сәләмәтләнәсәге, санкцияларҙың, ауыр йөк булыуҙан бигерәк, үҙебеҙҙең ауыл хужалығы продукцияларын етештереүгә юл асыуы һәм милли иҡтисад үҫешенә ыңғай йоғонто яһаласағы хаҡындағы оптимистик фекерҙәрен әйтте. Әммә... Йыл прогнозындағы бюджет һандары икенсе турала һөйләп тора бит.

* * *

Владимир Путин власҡа килгәнгә тиклем Рәсәй сәйәсәтендәге ете банкир өҫтөнлөгө (“семибанкирщина”), дәүләткә дөйөм Рәсәй байлығын кеҫәһенә һалған олигархтарҙың идара итеүе, нәҡ уларҙың һөмһөҙлөгө һәм нәфсеһе арҡаһында халыҡ-ара аренала Рәсәйҙең суверен дәүләт булараҡ позицияларын юғалтыуы Ил, Ватан, державасылыҡ, патриотлыҡ кеүек төшөнсәләрҙән баш тартырға теләмәгән Рәсәй халҡы өсөн туҙға яҙылмаған, ҡолаҡҡа һәм менталитетыбыҙға яҡмаған ғәрлек һәм бәхетһеҙлек ине. “Олигарх”, “семибанкирщина” терминдары 1996 йылда әйләнешкә инеп китте. 1996 йылдың мартында Борис Ельцинға уның президент һайлауҙарын ойоштороуҙы һәм еңеүен тәьмин итеүҙе вәғәҙә иткән бай финансистар, промышленниктар һәм банкирҙар уға ярҙам итеү ниәтен белдерә. Улар Рәсәйҙең иҡтисад һәм социаль реформаларын үҙ ҡулдарына алырға теләүҙәрен дә йәшермәйҙәр. Апрель айында улар власть органдарына тәғәйенләп, “Көрсөктән сығыу” (“Выйти из тупика”) тип исемләнгән хат яҙа. Хаттың инициаторҙары Борис Березовский, Михаил Ходорковский, Михаил Фридман, Александр Смоленский, Петр Авен, Владимир Гусинский, Владимир Потанин була. Тиҙҙән эре банктар араһында килешеү төҙөлә. Артабан Владимир Потанин Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры вазифаһына тәғәйенләнә. Нәҡ шул осорҙа “Хөкүмәт органдарында бай кешеләр эшләргә тейеш, улар урлашыуға бармаясаҡтар” тигән лозунг формалаша. Илдең бюджет аҡсаһы, инвестициялар каналдары, үҙәк телеканалдарҙың финанс ресурстары нәҡ ошо олигархтар кланы контроллегендә тормошҡа ашырыла. Президент вазифаһын һаҡлап ҡалған Борис Ельцин, әллә аңғармаҫтан, әллә аңғарып та, интервьюларының береһендә ил иҡтисадының 50 проценты ошо етәүҙең ҡулында булыуы һәм Рәсәйҙең эске сәйәсәтенә лә нәҡ уларҙың йоғонто яһауы хаҡында әйтеп ысҡындырҙы. Исемдәрен дә атаны. Ил менән идара итеүҙәге был реформаны яҡлап сығырлыҡ берәр классик та кәрәк булды, күрәһең. 1996 йылдың ноябрендә Александр Солженицын үҙенең сығышында Ельцин сәйәсәтенә “олигархтар сәйәсәте” тигән баһа бирҙе. Термин ул осор ыңғай мәғәнәлә йөрөнө. Тап шул заман Рәсәйҙең иң бахыр осоролор ул. Ваучеризацияға һылтанып, халҡыбыҙ көсө менән барлыҡҡа килгән предприятиелар, нефть табыу, эшкәртеү тармаҡтары арзан ғына хаҡҡа әрһеҙ өлгөрҙәр ҡулына төштө.

Унан чечен һуғышы башланды. Бер ниндәй ғәйепһеҙ халыҡ террорсылар тип иғлан ителеп, ауыл-ҡалалар бомбаға тотолдо, йәш кенә егеттәребеҙ шул һис мәғәнәһеҙ һәм кәрәкмәгән һуғышта башын һалды.

АҠШ, Европа илдәренең йылғыр консультанттары Рәсәйҙе иркенләп ҡыҙырҙы, халыҡты капиталист булырға өйрәтте, ас, яланғас халыҡ өсөн гуманитар ярҙам йөҙөнән ваҡыт яраҡлылығы сыҡҡан ризыҡ, секонд-хенд тауарҙары килтереп индерелде. Улары ла бушлай таратылманы, арзаныраҡ хаҡҡа булһа ла һатыу ойошторолдо.

Ауыл хужалығының тамырҙарына балта сабылды, эшһеҙ ҡалған ауыл кешеләре эскелеккә бирелде. Алдағы көнгә ышанысын юғалтҡан ғаиләләр бала табырға йөрьәт итмәне.

Ельцин осоронда социалистик илдәрҙәге ғәскәрҙәребеҙ ашығыс-бошоғос Рәсәйгә ҡайтарылды һәм бер ниндәй шарттар булмаған урындарҙа дислокацияланды. Ә ҡайһы бер юғары чиндағы офицерҙар ҡайтыр алдынан хәрби ҡорамалдарҙы, ҡоралдарҙы һатып, табышын кеҫәһенә һалды.

Ельцин, тотош донъя ҡаршыһында ГДР-ҙан Рәсәйгә оҙатылған армия менән хушлашҡанда уйнап торған хәрби оркестрға дирижерлыҡ итеп, ғәм халыҡты көлдөрҙө. Ә намыҫлы офицерҙарҙың күҙенән йәштәр субырланы.

Путин иһә илебеҙҙе кәмһетелеүгә дусар иткән иң мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе үҙ өҫтөнә алды, был власть өсөн генә көрәш түгел, тыуған илгә булған мөнәсәбәттәр бәрелешендәге еңеү һәм егетлек тә ине. Ә әлегә ил эсендә тулып ятҡан проблемаларға килгәндә, философ Владимир Соловьев әйтмешләй, “Дәүләттең бурысы илдә ожмах булдырыуҙа түгел, дәүләт ерҙә тамуҡ башланмаһын өсөн көрәшергә тейеш”.

Телгә оҫта, коммуникабель, айныҡ Президенттың аҙымдары социаль йүнәлешле дәүләт системаһы төҙөүгә йүнәлтелгән кеүек ине. Сит ил дәүләттәре лидерҙары араһында Рәсәй менән иҫәпләшеүҙе талап иткән Путин халыҡтарҙа ил, дәүләт, милли ғорурлыҡ кеүек төшөнсәләргә битараф булмауы арҡаһында ниндәйҙер ышаныс тыуҙырҙы. Әммә социаль хәл яҡшырманы, эшһеҙлек, хәйерселек артҡа сигенергә уйламаны ла.

Етешлек ҡайҙан килһен ти? 2015 йылда Европа илдәре берләшмәһе, АҠШ Рәсәйгә санкциялар иғлан итте һәм илебеҙҙең сауҙа-иҡтисад эшмәкәрлеген сикләне. Әммә ауыл хужалығы продукттарын Рәсәй сауҙа баҙарына тәғәйенләп көйләгән фермерҙар етештергән продукцияһын, законһыҙ юлдар менән булһа ла, күнегелгән баҙарға сығарыу юлдарын эҙләргә тотондо. Таможняларҙа уларға арест һалынып, телевизор аша халыҡтың күҙ алдында шул санкция исемлегенә индерелгән ризыҡты бульдозерҙарҙан тапата, мейестәрҙә яндырырға тотондолар. Маҡсаты — Рәсәй халҡын үҙе өсөн үҙенә ризыҡ етештерергә өйрәтеү. Өйрәттең ти! Тауыҡ үрсетергә лә йыбанып, осһоҙ “окорочка”ға алданып йәшәргә өйрәтел дә, биленде бөгөп ергә эйел, имеш.

XX быуат буйы репрессиялар солғанышында йәшәргә мәжбүр булған халыҡтың характеры ла күндәм булырға өйрәтелгәйне шул. Дәүләт сәйәсәтенә ҡыҫылыуҙың фәтүәһе юҡлыҡты төшөнгән совет кешеһе матди етешлек тип әллә ни тәгәрәп барманы, барынан яҙҙырмаһалар ҙа хуп әле. Ҡабул ителгән норманан сығыу теләге менән дә янманы. Эйе, йәшерәк саҡта романтикаға бирелеп тә китәһең ул. Ләкин ғаилә ҡороп донъя көтә башлау менән хыялдар артҡа сигенгәндән-сигенә барҙы. Хөкөм һөргән шарттарға яраҡлашырға, ҡулайлашырға, система ҡағиҙәләренә буйһонорға тура килде.

90-сы йылдар халыҡтың төпкө аңын, йылдар буйы эсенә йыйылған ҡәнәғәтһеҙлеген уятып ебәргәйне лә, яңылыҡҡа ынтылыш өмөттәре йәнә аҡланманы. Һөнәри һәләттең, талантлы кешеләрҙең демократик шарттарҙа хәжәте булмауы йәмғәтселек алдына йылғыр лидерҙарҙы сығарып баҫтырҙы, улары иһә замандаштарының яҙмышын йәнә бульдозер аҫтына ташларға, төшөнкөлөккә бирелдереп ғәҙеллек хыялынан ваз кистерергә тотондо. Рухи һәм матди көрсөк һағалауҙан туҡтаманы.

Етмәһә, Украинала барған мәғәнәһеҙ һуғыш, шул арҡала килеп тыуған халыҡ-ара аңлашылмаусанлыҡтар Рәсәй халҡының муйынына таш булып бауланды, аяғын тышауланы.

XX быуаттың икенсе яртыһында формалашҡан ҡапма-ҡаршылыҡлы сәйәси системаларҙың көс структуралары һаналған Варшава Килешеүе юҡҡа сығарылғайны, ә НАТО тарҡалырға уйламау ғына түгел, йоғонтолоғон Рәсәйҙең сигенә үк килтереп терәтте. Балтика буйы илдәре, Евросоюз улар өсөн ҡапҡаларын шар асып ебәрҙе.

Ошондай шарттарҙа берләшеүгә йөҙ тотҡан ШОС, БРИКС ойошмалары ултырышы 2015 йылдың июлендә Өфөлә үтте. Ҡаланы ярайһы килешле итеп матурланылар, ҡунаҡханалар төҙөлдө, юлдарҙы ремонтланылар. Унының һәйбәт булды. БРИКС-ты Евросоюз менән сағыштырырлыҡ түгел, әлбиттә. БРИКС ярайһы киң масштаблы иҡтисад клубы булһа кәрәк. Уның сиктәрендә ойошмаға

ингән дәүләттәрҙең халыҡ-ара финанс, иҡтисад мәсьәләләре хәл ителергә тейеш. ШОС иһә — етди ойошма. Унда инеүсе илдәрҙең етәкселәре, Хөкүмәт башлыҡтары, хәрби көстәр, сит ил эштәре министрҙары, террорға ҡаршы көрәш үҙәктәре етәкселәре даими осрашыуҙар, берлектәге уҡыуҙар, хәрби учениелар уҙғара. Унда Һиндостан, Пакистан, Иран дәүләттәре лә ҡушылмаҡсы.

Хәлдәр ошолайыраҡ. Артабан ниҙәр көтә икән һуң?Хөкүмәт йәнә, коммунизм төҙөүселәрҙе алдандырған кеүек, түҙегеҙ, тиҙҙән яҡшы буласаҡ, тигән вәғәҙәләр менән илһамландыра ла бит...

...Эйе, донъя эсендә барған нәфсе аҙғынлығы һәм иҡтисад уйындары, күрәләтә ойошторолған кризистар технологияһын аңлау һәләтебеҙ булһа ла, йоғонто яһарлыҡ көсөбөҙ беҙҙең әлегә юҡ. Дәүләттәрҙең рәсми системаһын да, кландарҙың криминаль системаһын да тик аҡыл һәм белемлелек, иҡтисади етешлек, рух ныҡлығы, аумаҡайланмау ихтыяры менән генә еңеп булалыр ул. Беҙгә байлыҡты һәм гламур тормошто, кәйеф-сафа, уйын менән мауығыуҙы йәшәүҙең төп маҡсаты тип һанаған нәфселе һәм мәкерле кешеләр менән ярышырға ярамай. Уларға күҙебеҙ ҡыҙмаһын. Маҡтаулы капитализм ҡоролошо барлыҡҡа килтергән туйып һикереүҙең тарихы һәм тәжрибәһе ҙур. Ҡәм тигәндә, ике-өс быуат самаһы. Быларҙы хәҙер йүгереп ҡыуып етеп, йоҙроҡ күрһәтеп тыйып булмаясаҡ. Беҙҙең өсөн шуныһы ғына ҡурҡыныс: быңдай ҡотороноуҙарҙың аҙағы хәйерле булмай торған. Күк кәнсәләре түҙә-түҙә лә, берәр афәт ебәреп ҡуйғылай бит. Ер йөҙөндәге беҙгә тиклемге нисәмә-нисә цивилизацияның юҡ ителеүе хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Хоҙай Тәғәлә үҙе генә аралаһын...

Ҡибланы юғалтмау, тормош майҙанынан төшөп ҡалмау өсөн беҙгә, башҡорттарға, берҙәмлек кәрәк. Ҡыҙғаныс, әммә башҡорт теленең ҡулланышы сикләнде, мәктәптәрҙә телде уҡытыу кәметелде. Республикала меңәрләгән мәктәптәр, сәләмәтлек пункттары, дауаханалар ябылды. Беҙгә Урта Азия кешеләре килеп тулды, вьетнамдар йыбырлашып йөрөй. Үҙебеҙҙекеләр, биштәр артмаҡлап, тамаҡ хаҡына Себергә эркелде.

Беҙ тарҡау. Ойошҡанлыҡ юҡ. Башҡортостанда бынамын тигән Яҡташтар ойошмалары бар. Әммә уларҙың да эшмәкәрлеге унда-һанда йыйылышыуға, байрамдар ойоштороуға ғына ҡайтып ҡала. Быңдай яҡташлыҡтар изге ниәтле системаға һалынһын ине. Рухи ҡиммәттәрҙән тыш, бөгөн матди ҡиммәттәр даирәһе лә барлығын, уның өҫтөбөҙгә ҡара яуҙан былай ябырылып килеүен дә онотмаҫҡа кәрәк. Ҡемебеҙҙең ниндәй нужаһы бар, ҡайһы яҡташыбыҙҙың ҡаҙаныштары республика кимәлендә баһа алырға хаҡлы? Нишләптер ойошмалар быңдай хәстәрлекте үҙ өҫтөнә алмай. Ә бит кеше үҙен-үҙе маҡтап йә йәлләтеп йөрөй алмай. Ике йыл самаһы ныҡ һәм етди сирҙәр менән айҡашҡанда, мин быңдай битарафлыҡты үҙ елкәмдә татыным инде. Ул ауыр көндәремдә рухташлыҡ ҡанундарына тоғро кешеләр ташламаны. Дауаханаға, өйгә килеп йә шылтыратып, борсолоуҙарын белдерер булдылар. Ҡөйөргәҙе районы хакимиәте мине иғтибарҙан ташламаны. Яҡташ хирургтар Зиннур Собханғолов менән Әхтәм Фәйзуллин, врачтар Ләлә Хәлилова, Марат Сәйетовтар таяныс булды. Һәммә-һәммә рухташтарыма рәхмәттәремде белдерәм. Әйтәләр бит: ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ. Ә бүтәнсә нишләргә һуң? Бүтән системалар тик үҙ мәнфәғәте һәм үҙ ғаиләһенә хеҙмәт итә. Миңә йәнә үҙем лозунг итеп ҡабул иткән дүрт төшөнсә һынмаҫҡа көс бирә: намыҫҡа таяныу, ояла белеү, гонаһтан ҡурҡыу һәм кешеләргә мөхәббәт.

Бәндәнең төп таяныстарының береһе — ғаилә. Тимәк, был төп арҡаланыр ҡәлғәгә, ғаилә институтына ныҡ етди ҡарарға кәрәк. Ғаиләләге тәртип йоҙроҡ менән түгел, яҡшылыҡ менән урынлаштырыла. Етем балалар милләттең өлгөргәнлек аттестаты юҡлығы, һай аҡыл һәм ярлы күңеллелеге күрһәткесе ул.

Мин ҙур сәйәсәтсе һәм иҡтисад белгесе түгел. Ни бары халҡыбыҙҙың йәшәйеш ҡанундарын һәм уның булмышын яҡлаусы ҡиммәттәрҙең асылын бер ни тиклем тоҫмаллаған ижадсы ғына. Әммә шуныһы ла хаҡ: донъя яралмышынан уҡ барған яуызлыҡ һәм изгелек көрәше гел генә яуызлыҡ еңеүе менән тамамланмай. Сабыр булыуҙан, үҙ ҡиблаларыбыҙға тоғро ҡалыуҙан башҡа юл юҡ. Минең фекеремсә, беҙҙең милләтебеҙ өсөн төп Система — мәҡәләнең башына ҡуйылған өс тағанға ғына таянып йәшәү хоҡуғы.

## Ышана инем...

*Ғәниева тигән шағир кем тип*
*Белешмәнән эҙләп маташһалар,*
*Иҫкәртәйем:*
*Түрә-ғара мине*
*"Һ.Б." тип йөрөтә —*
*Һәм Башҡалар.*

Мин донъяла ғәҙеллек барлығына ышанған һәм инанған бәндә булыуыма ҡарамаҫтан, ул тиклем бер ҡатлы түгел. Дөрөҫ, мине ырғаңдаҡ (выскочка), үҙенең бүтәндәрсә фекер йөрөтмәгәнлеге арҡаһында ниндәйҙер мораль, хатта матди дивидендтар яуларға ынтылыусы кеше тип ҡабул итеүсе коллегаларым күп булды. Мин, әлеге лә баяғы тәбиғи ихласлығым арҡаһында, ҡәләмдәштәремдең миңә ҡарата мөнәсәбәтен оҙаҡ аңлай алманым. Юҡ, ундай күңел ҡыйралыштарым хаҡында берәүгә лә белдермәҫкә тырыштым. Сөнки халҡыбыҙҙың шағиры булыуға йөрьәт иткәс, мин үҙ хәсрәттәремдән бикәр, милләттәштәремдең яҡлаусыһы булып йәшәргә тейеш инем. Һәм шулай йәшәргә тырыштым да. Уйландым: замана уңайлы тип һанаған ҡанундарға нисек ҡулайлашырға һуң? Аңлаһындар, үҙем ғүмер кисергән даирә вәкилдәре ҡабул итһен өсөн ниндәй булырға? Зиһенем һәм күңелем ысын тип инанған ҡиммәттәрҙән нисек баш тартырға, уй-кисерештәремдең был заманаға ятҡыһыҙлығына нисек күнергә ине һуң миңә? Бөтә бәләм дә шунда ине шул: мин дөйөм принципһыҙлыҡ ҡағиҙәләрен аңлай ҙа, үҙләштерә лә алмай интектем, һыҙландым. Замана ҡағиҙәләрен ҡабул итеүгә һәләтле һәм шул арҡала танылыу яулаған ҡәләмдәштәрем тарафынан минең үҙенсәлектәремдең ҡабул ителеүенә, һис юғы, мыҫҡылға дусар ителмәүенә өмөтләндем. Эстән генә. Эйе, кешегә кемлегең хаҡында һөйләп аңлатмайһың бит инде ул, эштәреңдән, ҡылыҡ-фиғелеңдән беләләрҙер әле, тип уйлайһың. Мин дә шулай. Яҙғандарымды уҡыған кеше (уҡыһалар), кемлегемде һынайҙыр бит. Кемлегемде тәфсирләп аңлатып йөрөргә ваҡыт яғы ла наҡыҫыраҡ булды, көндәлек эш, шәхси мәшәҡәттәр ҙә иңемде баҫып бара ине. Мәшәҡәтле йәшәүсе бер мин генәме ни? Ләкин... Мин, шулай ҙа, шағир инем дә баһа. Һин — шағир, ә мин бына ҡорос ҡойоусы, тиер кемдер, әммә шағирҙар арабыҙҙа тулып йөрөмәй ҙә баһа.Тимәк...

Мин 12 йыл буйы, тик әҙәбиәткә ғашиҡлығым арҡаһында, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының шиғриәт секцияһы рәйесе сифатында түләүһеҙ эштәр эшләнем. Ул осор эсендә бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең мәртәбәһен тәшкил итеүсе Тамара Искәндәриә, Хисмәтулла Юлдашев, Рәмил Ҡол-Дәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла, Әхмәр Үтәбай, Салауат Әбүзәр, Ғилман Ишкинин, Марат Ҡәбиров, Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллина, Гөлназ Ҡотоева, Айһылыу Ғәрифуллина, Азамат Юлдашбаев, бер аҙ донъя мәшәҡәттәренә бирелеберәк китһә лә, ижад идеалдарына хыянат итмәгән Ғәлиә Ҡәлимуллина, Лена Сирусина кеүек әҙиптәргә, "Ағиҙел" журналында эшләгән осоромда уларҙан йәшерәк Фәнил Бүләков, Ринат Сөләймәнов, Мөнир

Иҡсанов, Рәшит Зәйнуллиндарға ҡанат нығытырға булыштым. Ә рус һәм башҡорт телдәрендә нисәмә мәҡәлә, докладтар яҙылды. Поэмаларым, китаптарым баҫылып сыҡты. Республика, Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә танылыу тапҡан “Тамарис” трагедияһы сәхнәлә уңыш ҡаҙанды... Арҙаҡлы яҙыусыларыбыҙ Баязит Бикбай, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишеваларҙың вафатынан һуң, юбилейҙары айҡанлы, ижадтары хаҡында русса ла, башҡортса ла мәҡәләләр яҙған кеше башлыса мин генә инем. Рәхмәт яуғыры, үҙ райондаштарым, көйөргәҙеләр Баязит Бикбай исемендәге премия менән бүләкләп, күңелемде үҫтереп ебәрҙе. Уның ярты аҡсаһын ауылым Ҡинйәбайҙың мәктәп баҡсаһына алмағастар ултыртыуға бирҙем. Алла бирһә, ҡәҙерен белеп, һаҡлап үҫтерһәләр, үҫеп китерҙәр, бала-саға өсөн бер йыуаныс булып, алма бирерҙәр. Тупылдап ергә ҡойолғандарын ашап рәхәтләнерҙәр. Бәлки мин был донъянан киткәс тә иҫтәлегем булып сәскә атып ултырырҙар.

Шунылһын да әйтәйем: беҙ ауылдашым Ғәлим Хисамов менән Баязит Бикбайҙың тормошо һәм ижады хаҡында альбом-китап әҙерләп сығарҙыҡ. Ул районыбыҙ өсөн дә, Башҡортостан өсөн дә матур бүләк булды.

Хәтерегеҙҙә булһа, яҙмаларҙы мин “Бәхетле булғанмын икән дә” тип башлағайным, уның шулай икәнен йөрәгем, зиһенемде формалаштырған принциптар нигеҙендә дәлилләгәйнем. Әммә, йылдар үткәс, “Донъялыр был...” тигән һығымтаға килеүемдең сәбәптәрен, тайпылышһыҙ хәҡиҡәт эсендә йәшәргә мәжбүрлек арҡаһында, донъялыҡ ярайһы аяуһыҙ, тигән һығымтаға килеүҙең төшөнкөлөккә бирелеү тигәнде аңлатмауын да аңланым шикелле. Төшөнкөлөккә бирелеү — иң еңел юл. Әммә йәшәү асылы бәхет эсендә ирәүәнләү генә түгел шул. Йәшәү, ғүмерем эсендә кисереүҙәремсә, бәхеттән генә ғибәрәт түгел, унда йән көсөңдө һалып күтәрергә мәжбүр а у ы р т ы у ҙ ар, һ а ғ ы ш, ю ғ а л т ы у ҙ а р, х ы я н а т, м ә к е р, а л д а ҡ бар. Әммә Аллаһы Тәғәләнең иң ҡөҙрәтле һәм түләп бөтөргөһөҙ бүләге — ғүмерҙең үҙелер.

Ҡайғы-хәсрәтле, ауыртыныуҙары, ғазаптары тулып ятҡан, бәхет кисерештәре, мөхәббәт тойғоһо кеүек ләззәт менән бүләкләгән ерҙәге ғүмер итмеш — ожмах түгел. Ерҙәге аңлайышлы һәм аңлайышһыҙ, үтмеш-китмешкә дусар мәшәҡәттәр байтаҡ кәрҙе, електе һура икән дә... Әммә был минең генә яҙмыш һәләкәттәре, минең ғүмеремдең генә айышһыҙлығы түгелдер ул. Атайым әйтмешләй, донъялыр был...

Әммә йәшәй-йәшәй шуға ла инандым: кемдеңдер һинең яҙмышыңа кире йоғонто яһарға яҫҡыныуын үтә ҙур фажиға тип ҡабул итергә ярамай. Кешенең тәбиғәте шундай — кемдеңдер амбициялары бойомға ашһын, тормошо иркенәйһен, тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булһын өсөн мотлаҡ бүтән берәүҙәрҙең күҙгә төртөлөп тормауы, һин генә ымһынған бәлештән өлөш өмөт итмәүе кәрәк. Ә шул “ҡаршылыҡтарҙы” тик бүтәндәр иҫәбенә үҙ мәнфәғәте өсөн “көрәш” юлы менән генә хәл итеүселәр бар. Уларҙың ҡайһы береһе шул тиклем оҫта стратег, юлында ҡамасау булғандарҙы аҫтыртын, мәкерле алымдар менән юҡ итергә тырыша. Әгәр кешелек ғәҙеллек, намыҫ, гонаһтан ҡурҡыу, әхлаҡи оят кисереү кеүек төшөнсәләргә таянып йәшәһә, Ер өҫтөндә әллә ҡасан уҡ хөрриәт хөкөм һөрөр ине. Әммә беҙҙең булмышыбыҙ, хатта йыһан әйләнеше аҡ менән ҡараның, көн менән төндөң, яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың, плюс-минус зарядтарының бәрелешенән тора. Цивилизациялар технологияһы нисек кенә үҫешмәһен, илдәр менән илдәр, диндәр, милләттәр бер-береһен айырға, йәлләргә, хәленә инергә өйрәнә алмай әле. Кешелектең зиһен даирәһе, мәғлүмәттәр киңлеге ғилми асыштар нигеҙендә камиллаша бара. Ә күңел, йөрәк кисерештәре даирәһе, батҡаҡ юлда буксовкаға тарыған автомобиль кеүек, эволюциянан артта ҡала килә. Йөрәкһеҙлек кешелекте рухи кризистарға килтерә.

Барып етмәй Аҡыл ҡайҙа ғына...
Уҡ нимә ул? Нурҙан етеҙерәк.
Уй-хыялы менән ғаләмдәрҙе
Арҡыры-буй гиҙмәҫ кеше һирәк.

Ҡеше аҡылы ниҙәр уйлап тапмаҫ:
Бәйләнештә донъя сиге менән.
О, эврика!
Ер бәләкәй икән
Уй-фекерле ҡөҙрәт күҙлегенән.

Йыһан ҡапҡаларын ҡаға Аҡыл,
Эҙләй, таба мөғжизәләр серен.
Ижад итә ниндәй яйланмалар,
Байҡай күкте,
Айҡай торған ерен.
...Аҡылыбыҙ үҫә. Йөрәгебеҙ
Урынында һаман. Ник тапана?
Кәре юҡмы? Ығыш, ялҡау микән?
Ойой мәллә?
Ә уй..
Ҡанатлана!

Йөрәгебеҙ нишләп ҡата бара?
Йәлләү, һөйөү, хыял дефициты.
Аҡыл менән йөрәк аймылышта —
Нишләп икән улай килеп сыҡты?

Һеҙ ҡауышмай тороп икәү-ара,
Бүҫкәрә бит йыһан камиллығы.
Мәрхәмәткә сарсай Ер ҡуйыны —
Бәндәләргә төшә ауырлығы.

Аҡыл ҡанатлана. Йөрәк аҡһай.
Йөрәкһеҙлек үрсей. Бармы сара?
Шуға ахыры, Юғары Ғәм алыҫ.
Моңһоҙлоҡҡа ара ҡыҫҡара.

Кем ғәйепле һәм нимә эшләргә кәрәк һуң? Минең уйымса, йәшәүҙең ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тороуын балаларға йәштән үк аңлатырға кәрәк. Бөгөнгө әҙәбиәттең үҙенә лә кешелек яҙмышындағы ана шундай килешкеһеҙ төшөнсәләрҙең булыуын күҙҙән ысҡындырмау зарур. Асылда конфликт, коллизияларға нигеҙләнгән фабула һәм сюжетҡа ҡоролған әҙәбиәттең яңы замандағы төп бурысы, минеңсә, кешенең алдараҡ телгә алынған намыҫ, мөхәббәт, гонаһ, оят тигән һынауҙар алдындағы холоҡ-фиғеле даирәһенә йүнәлтелгән булыуында. Бындай гуманизмлы “эльдорадо” тиҙ барып етә торған урын түгелдер. Әммә ана шуға ынтылыу һәм ғәҙелһеҙлек, намыҫһыҙлыҡ менән күҙмә-күҙ осрашыуға әҙер булыу кешенең ғүмерен бәхетлерәк, мәғәнәлерәк итәсәктер. Юғиһә XXI быуат башына аяҡ баҫыусылар араһында күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүселәр күбәйҙе. Мин дә улар араһында инем. Яңыраҡ аңланым: бер нәмәне лә үҙгәртә алмаҫыңды танырға һәм күнергә, үҙ-үҙең, рухташтарың һине хөрмәт иткән, һин хөрмәт иткән кешеләр менән тәбиғи гармонияла ғүмер итеү юлына баҫырға кәрәк.

## Ҡеше

(Дилетант яҙмалары)

*Ҡешеләргә ҡарап ҡайғым арта,*
*Наҡыҫайҙы әҙәп, самалар.*
*Олимп тауына көтөү ебәргәндәр,*
*Зыяратта бесән сабалар.*

*Мостай Кәрим*

...Ҡеше яҡты донъяға ни өсөн килә? Уға тыуған сағында ниндәйҙер маҡсат йөкмәтеләме? Үҙенең ерҙәге бурысын бәндә нисек төшөнә һәм яҙмышын ни рәүешле билдәләргә кәрәклекте ҡайҙан белергә тейеш?

Был иртәме-һуңмы һәр кемдең алдына баҫа торған һорауҙар. Тыуыу менән үлем араһы — шул тиклем ҡыҫҡа. Бер ҡараһаң, Ер өҫтөн бүтән бер ҙә күрмәҫ өсөн ҡалдырып китеүгә дусар бәндә тәҡдире ҡотолғоһоҙ фажиғә, мәғәнәһеҙлек кеүек күренергә һәм кеше күңел төшөнкөлөгөнә, сараһыҙлыҡ хәсрәтенә бирелергә тейеш кеүек. Миллиардлаған йылдар тереклек иткән кешелек цивилизацияһы һаман булһа йәшәүҙең төп мәғәнәһен аныҡ ҡына аңлата алмай әле.

Ә шулай ҙа... Донъялағы иң серле һәм, әйтер инем, иң аңлайышһыҙ субстанция — ул кешенең үҙе. Уй-зиһендән мәхрүм түгел, күрер күҙгә бер-береһенән әллә ни айырылмаған кешеләр солғанышында йәшәйбеҙ беҙ. Бер үк төрлө шарттарҙа формалашабыҙ. Ейгән ризығыбыҙ, кейгән кейемебеҙ оҡшаш. Бер үк мәктәптәрҙә, бер үк программаны үҙләштерәбеҙ. Замандаш булыуыбыҙ сәбәпле, бер үк идеология һәм инаныстар эсендә йәшәйбеҙ. Тик... Нишләп һуң бер-беребеҙҙән бигерәк тә ныҡ айырылабыҙ? Ни өсөн бер-беребеҙҙе аңлай алмауҙан интегәбеҙ, хатта фажиғәләр, һағыш кисереүҙәргә тиклем барып етәбеҙ? Ни өсөн беҙҙең класташтар араһында фиҙакәр хеҙмәте өсөн миҙал, орден таҡҡандар, фәндә асыштар яһағандар, әҙәби ижадта, сәнғәттә уңыш яулағандар, композитор, рәссамдар, иген игеүселәр, балалар уҡытыусылар, кешеләрҙе дауалаусылар, малсылар булған кеүек, ҡараҡтар, енәйәтселәр, кеше үлтереүселәр, педофилдар барлыҡҡа килә һуң? Мин ярайһы өлкән йәшкә еткән, ғүмер эсендә байтаҡ кешеләр менән аралашҡан, тормош тәжрибәһе туплаған, хатта ки үҙ инаныс-кисерештәрем хаҡында китаптар яҙып, күптәрҙең фекерҙәремде ҡабул итеүенә өлгәшкән кешемен, әммә әле булһа ҡайһы бер яҡшы беләм тип уйлаған кешеләремдең яңынан-яңы йә ыңғай, йә кире сифаттары асылыуынан аптырашҡа ҡалғаным бар. Күп аралашҡан таныш-белеш, дуҫтар ғына түгел, туғандарыңдың холоҡ-фиғеле лә төрлө-төрлө була, ҡайһы саҡта ошондай аңлашылмаусанлыҡ килешкеһеҙ ситуациялар тыуҙыра. Күп ярҙам күрһәтеп, яуабына ниндәйҙер дәғүәләр ишетеү рәнйетә. Һин төшөнкөлөккә биреләһең. Ҡыҙым Неля бер шундай рәнйешем хаҡында уртаҡлашҡанда аңлатҡайны: “Беләһеңме, әсәй, кемдәндер изгелек күргән кеше был хаҡта онотмай ул. Кешенән күргән изгелек төпкө аңда һаҡлана. Әммә изгелекте ҡабул иткән кеше изгелек күрһәтеүсе алдындағы бурысын бер ваҡытта ла ҡайтара алмауын аңлауы сәбәпле, изгелек күрһәткән кешеһенә ҡарата агрессив ҡарашлы була башлай. Был уның, асылда, үҙ бурысынан үҙенең оялыуын танырға көсө етмәүгә бәйле”. Бәй, ысынға оҡшаған бит быңдай һығымта. Тимәк, кеше зиһене генә түгел, төптәге аңы аша ла идара ителәһәм шул төптәге аң ваҡыты-ваҡыты менән, моғайын, кешенең үҙ иркенән тыштыр ҙа әле, барлығын, ябай төшөнсә түгеллеген белдереп-белдереп ҡуя. Ғөмүмән,

күрәһең, кешенең йәмғиәт талаптарына яраҡлашҡан тышҡы тәртибенән былай, эске аңындағы булмышы — асылы — кешенең ысын сифаты булып сыға. Шуға ла бит эскән кешенең, мейеһе томаланыу сәбәпле, төпкө аңды контролдә тотоу һәләте юғалғандан-юғала бара һәм эскесе ысынында кемлеген йәшерә алмай башлай.

Мин оҙаҡ йылдар бер ҡатын менән дуҫ булдым. Уның хаҡында мәҡәләләр яҙҙым, ғаиләһенең, балаларының проблемаларын белә, ҡулымдан килгәнсә ярҙам итә инем. Ауыр сиргә тарығас (яман сиргә түгел), ҡайһы бер дуҫтарым күтәреп тигәндәй дауаханаларға йөрөттө, ярҙам итте. Әхирәтемдең шылтыратыуын көттөм. Үҙем шылтыратһам, хәлем хаҡында һөйләргә тура килер ҙә, ул мәшәҡәтләнер, ярҙамға ташланыр, тип йәлләп, тыйыла торҙом. Бер йыл үткәс, бер аҙ кеше була төшкәс кенә, шылтыраттым. Күрешкем килеүен, уны һағыныуымды белдерҙем. Яуабы: ”Ишеттем мин һинең ауырығаныңды, шылтыратмағас, аңлағанһыңдыр тигәйнем, сирле кеше янына барырға теләгем булманы...” Шаңҡып киттем. Бына һиңә утыҙ йыллыҡ әшнәлек һөҙөмтәһе. Дуҫлығыбыҙ хаҡына ҡылған яҡшылыҡтарым, шулай була тороп та, төп башына ултыртылыуым һәм асыҡ ауыҙлығым өсөн үҙемде йәлләү тойғоһо иптәшемдең ҡылыҡтарын барлағанда, уның йыш осраҡта эгоист булыуын “иҫбатларға” тотондо. Улары барланып бөткәс, үҙ-үҙемдән “дуҫыма” адвокат эҙләргә тотондом.

Драматургияла төп ҡанундарҙың береһе булған герой ҡылығындағы мотивты, уны тегеләй йә былай булырға этәреүсе сәбәпте табырға һәм дуҫымдың ҡылығын аҡларға кәрәк ине миңә. Оҙаҡ табылманы. Ә мин эске аңымда ҡаҙындым да ҡаҙындым: барҙыр, тап, булмауы мөмкин түгел. Эҙләгән кешегә табыла. Табылды.

Эскесе иренән айырылып, икенсе кеше менән яңы тормош башлаған икән. Өр-яңы тормош. Етешлектә. Тимәк мин, уның оҙаҡ йылдар ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен белеүсе шаһит, был тормошонда күҙле бөкән буласаҡмын. Быны ғәфү итергә мөмкин. Дөрөҫ, мин үҙем ундай юлға бара алмаҫ инем дә...

Кеше... Ай-һай, ҡатмарлы йән эйәһе шулай ҙа. Уның булмышына ҡан хәтере лә, тарихи хәтер ҙә, милли үҙаң да, йәшәгән замана ла йоғонто яһай. Бәрелештәр, конфликттар тиктомалдан килеп сыҡмай шул. Һәр бер аңлашылмаусанлыҡтың үҙ сәбәбе бар. Алдараҡ телгә алынған һәм унан башҡа бик күп үҙенсәлектәр кешене формалаштыра, әммә форма үҙе, билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында (һәр хәлдә мин аңлай алмаған сәбәптәр), донъяны, бүтән кешеләрҙе тик үҙенсә генә ҡабул итергә мәжбүр итә. Әммә мин шундай һығымтаға килдем: кеше, кемгәлер яманлыҡ ҡылайым әле тип, яман юлға баҫмай. Уны эске аңы, үҙенең хаҡлы булыуына инаныуы (убежденность), ышаныуы теге йәки был юлға, һығымталарға, ҡарарға, аҙаҡ килеп, ҡылыҡҡа этәрә шикелле ул.

Кешенең холҡона уның милли үҙаңы ныҡ йоғонто яһай. Кеше әсә ҡарынында уҡ йә атаһының, йә әсәһенең генә ҡанын ҡабул итә икән. Баҡһаң, бер кешенең ҡаны икенсенеке менән аралашмай. Бала, ата-әсәһе бер милләттән булһа ла, ҡатнаш милләттеке булһа ла, тик береһенең генә ҡанын алып, артабан йәшәүен дауам итә. Әйткәндәй, баланың холҡо ата-әсәнең икеһенә лә оҡшарға мөмкин, ә интеллект балаға тик Әсәнән (!) генә күсә, тип иҫбатлай генетектар. Инә ятҡылығындағы 91 көнлөк балаға ҡан аша йән инә һәм Аллаһ тарафынан иңдерелгән шул йән буласаҡ кешенең раса энергетикаһын, милләтенең генетик энергетикаһын да ҡабул итә. Ғөмүмән, йән төшөнсәһенә әле булһа ғалимдар аныҡ ҡына аңлатма бирә алмай. Ислам дине йәндең барлығын инҡар итмәй, уның кеше үткәндән һуң Хаҡ Тәғәләбеҙ ҡаршыһында яуап бирәсәген иҫкәртә.

Христиан дине лә йәндең барлығын инҡар итмәй, ләкин улар “спасение души” тигән төшөнсәгә ныҡ инана. Ҡемдән һәм нимәнән ҡотҡарырға кәрәк һуң уны? Күрәһең, беҙҙең кеүек үк, гонаһтан ҡотҡарырға теләйҙәрҙер. Будда берҙән-бер Раббы барлығын танымай. Буддистар йән менән тәндең нирвана аша камиллашыуы, берҙәмлеккә өлгәшеүе өсөн тырыша. Шундай дәрәжәгә еткән Итигелов тигән бер ламаларын ергә күмелгән еренән ҡаҙып алғайнылар, ул хәҙер, тере кеше кеүек, уның хаҡына ҡоролған ҡорамда ултыра. Врачтар ҙа аптыраша. Был ни хәл? Ниндәй рухи көскә эйә булды икән ул Итигелов? Тимәк, рухи юғарылыҡҡа өлгәшеү юлдары күп. Ислам дине ҡушҡан ҡанундар, христиан дине ҡағиҙәләре һәм башҡа конфессиялар күрһәтмәләре миф түгел. Тимәк, кешегә инаныс, ышаныстарҙан тыш йәшәргә ярамай. Ләкин йәшәү дауамында кешенең, матдимы, рухимы ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирә башлауы арҡаһында, юғарынан йөкмәтелгән бурыстарҙан тайпылыуы ла ихтимал. Аллаһ бәндәгә матди ҡиммәттәрҙән тотош азат булыу талабын ҡуймай, әммә кеше булмышының 90 процентын рухиәткә, 10 процентын матдилыҡҡа йүнәлтергә тейеш, шул талаптарҙың дисбалансы шәхес-ара, ғаиләләр, хатта илдәр араһындағы килешмәүсәнлеккә, конфликтҡа юлыҡтыра. Ләкин ғәжәп, меңәр йылдар кешегә хеҙмәт иткән дини тәғлимәттәр, кешелек тәжрибәһе, тарихи ҡыйралыштар ҙа кешене матди нәфсенән тыя алмай. Ә бит бәндә йәненең рухи кимәлен камиллаштырыу маҡсатында ергә ебәрелә. Ни өсөн көслө был матдилыҡ инстинкты? Иленә, теленә, милләтенә, диненә, ата-әсәһенә тиклем хыянат итеүгә барып еткән, йәнен иблискә һатып булһа ла байлыҡ артынан ҡыуыусылар бар. Миңә аңлашылмай... Был хәлдәргә мин, нисек кенә гуманист булмайым, үҙ-үҙемдән адвокат таба алғаным юҡ әле.

Ҡан таҙалығы, милли хәтер тигәндән....

## Ҡан һәм нан

*Тау өйгән ул ҡыпсаҡ баштарынан*
*Меңле зәцер-затлы Сыңғыҙхан,*
*Тамырыбыҙ һулыр сиккә етеп,*
*Йылға булып аҡҡан беҙҙең ҡан.*

Кеше, кешенең килеп сығышы, булмышы хаҡында һуңғы йылдарҙа хәбәрҙәр, бәхәстәр йыш ҡуйыра. Берәүҙәр кешене Раббыбыҙ барлыҡҡа килтергән, ирҙәрҙе балсыҡтан әүәләп, усаҡта ҡыҙҙырған, шуға ҡайһы берәүҙәр ҡарараҡ, икенселәр аҡһылыраҡ килеп сыҡҡан, тип тә ебәрә. Шул балсыҡ кешеләргә Раббы йән өргән, уларға күңелһеҙ була башлағас, йоҡлатып, ҡабырғаһын һурып алған да ҡатын-ҡыҙ ижад иткән, ти. Икенселәр, юҡсы, Раббы беҙҙе үҙенә оҡшатып яралтҡан (“сотворил себе подобными”) тигән фекерҙә. Ә нишләп улайһа славян, негр, бүтән төрлө расалар бар һәм беҙ төҫкә бер-беребеҙгә ныҡ оҡшамағанбыҙ? Әлбиттә, Аллаһ беҙгә, төрлө төҫтәге кешеләрҙең һәммәһенә, тигеҙ ҡарай һәм тигеҙ хоҡуҡтар биргән.

Бәғзеләр ер йөҙөндә әлеге көндә йәшәгән кешеләр — бишенсе раса, уларҙы Раббыбыҙ славян һәм арийҙар сүрәтендә әҙер көйө икенсе планетанан килтереп төшөргән, улар парлы-парлы булған, үрсеп китеп, халыҡ барлыҡҡа килгән, тип иҫбатлай. Был ике раса кешеләре бер-береһе менән дә ҡатнашып киткән, шундай берҙәмлектән милләттәр яралған, ти был теория яҡлылар. Әйткәндәй, яңыраҡ генетиктар рустарҙың, быҒаса ҡабул ителгәнсә, славян түгеллеген, фин-уғыр

сығышлы булыуын асыҡланы. (Ҡанды генетик яҡтан тикшереү ысулы менән). Беҙ, башҡорттар, арий сығышлы һәм бик аҙ ғына үҙгәреш кисергән бик боронғо халыҡ икәнбеҙ.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр, эзотериктар (Блаватская, Рерих, мәҫәлән) кешелек тәүҙә бөгөнгө кеүек ҡаты матдәнән тормаған, үтә күренмәле шыйыҡсамы, шуға оҡшашмы матдә сүрәтендә булған, тәбиғи шарттар үҙгәреүгә яраҡлаша-яраҡлаша бөгөнгө хәленә килеп еткән, ти. Миңә теория һәм фараздарҙың бөтәһе лә оҡшай. Булыуы ихтимал. Минең өсөн кешенең беҙ йәшәгән ерҙә нисек барлыҡҡа килеүе түгел, ә ниндәй маҡсат менән Мәңгелеккә китеп барыуы ҡыҙығыраҡ. Бигерәк тә теге 10/90 процент рухиәтлек менән матдилыҡ талабы ауыр һәм изге ниәт бит. Тимәк, беҙҙе Бар Ҡылыусы өсөн был мөһим. Кеше үҙе, уның йәне дөйөм Ғаләмдең именлеге, мәңгелек әйләнеше эсендәге ябай шөрөп түгел, уға үтә ҙур бурыс йөкмәтелгән һәм өмөт бағлана. Тимәк, ара-тирә булып торған тәбиғәт катастрофаларында кешелектең дә ғәйебе етерлек. Кешеләрҙең ер өҫтөндә йәшәгәндә үк ҡылған ғәмәлдәре арҡаһында барлыҡҡа килгән һәм ерҙән үткәндән һуң күккә олғашҡан йәндәренең камиллыҡҡа өлгәшә алмағандары һәм өлгәшкәндәренең дөйөм Ғаләм әйләнешенә барып тоташыуҙан яралған яҡшылыҡ менән яуызлыҡ дисбалансы этәрә түгелме бындай ҡыйралыштарға?..

Һуңғы арала мин кеше тамырҙарындағы ҡандың ни тиклем юғары субстанция булыуына ышанғандан-ышана барам.

Кеше ҡанының төрлө-төрлө булыуы йөҙ йыл самаһы элек Австрия ғалимы Карл Ландштейнер тарафынан өйрәнелеп асыҡлана. Ғалим һәр кемдең ҡанында бүтән кешенеке менән ҡатнашырға теләмәгән антиген булыуын иҫбатлай. Теге йәки был төркөмгә ҡараған ҡанлы кешеләрҙең холҡо ла, йәшәү рәүеше лә үҙенсәлекле икәнен асыҡлай.

Ҡан инфекцияларға, вирустарға, микробтарға, бактерияларға ҡаршы көрәшеү һәләтенә эйә. Был һәләт меңәр йылдар буйы формалашҡан һәм йәшәп килгән шарттарға яраҡлаша ала икән.

Ғалимдар неандерталдәр (Германияның Неандерталь үҙәне исеменән, 20—35 мең йыл тирәһе элек йәшәгән был цивилизация ҡалдыҡтары Европала ла, Африка һәм Азияла ла табыла, беҙ улар тоҡомонан) менән кромоньондарҙың ҡаны беренсе ҡан төркөмөнә ҡарай, тип бара. Уларҙың ашҡаҙан-эсәк системаһы ит ризыҡтары аҡһымын үҙләштереүгә көйләнгән булған. Һыйыр, һарыҡ ите ашағандар. Вариҫтары, бөгөнгө беренсе төркөмлө ҡанлы кешеләр, әле лә матдәләр әйләнеше яҡшы эшләһен өсөн, күберәк аҡһымлы аҙыҡ менән туҡланырға мәжбүр. Был төркөм кешеләре өсөн бөртөклөләрҙән әҙерләнгән ризыҡ килешмәй, генетик яҡтан тәбиғәттәре был төр ризыҡҡа көйләнмәгән. Бөртөклөләр составындағы лектин матдәләр әйләнешенә, ризыҡты үҙләштереүгә ҡамасаулай. Тимәк, кеше һимерә башлай. Был төр кешеләр ҡамыр аштарынан, ярма, борсаҡтан баш тартырға тейеш. Ә бына ит, балыҡты күпме теләһәң, шул саҡлым ҡулланырға мөмкин. Картуф, баклажан ашау артрит ауырыуына тарыта. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: минең йәштәштәрем, һуғыштан һуңғы йылдарҙа асылда картуф, икмәк тойзороборак үҫкән, шул ризыҡтар арҡаһында юғары белем алыуға өлгәшкәндәр араһында кәүҙәһе ҡалынаймаған, аяҡ-ҡулдары һыҙламағандар һирәк. Врачтар беҙгә кишер, кәбеҫтә ашарға ҡуша, сиребеҙҙә үҙебеҙҙе ғәйепләй. Башҡорттар боронғо милләт, күбеһенең ҡаны — беренсе төркөм... Беҙ кәбеҫтә менән кишер генә ашап йәшәй алмайбыҙ шул... Улай тиһәң, щи, борщтарға өҫтөнлөк биреүсе урыҫтар араһында ла 100 йәшкә етеүселәр һирәк.

Ҡандары икенсе төркөмгә ҡараған кешеләрҙе генетиктар беҙҙең эраға тиклемге 25—15 мең йылдарҙа формалашҡан йәшерәк халыҡ, тип иҫәпләй. Уларҙың организмы үҫентеләр менән туҡланыуға көйләнгән. Улар, киреһенсә, ит ашауҙан һимерә. Улар өсөн һыйыр, һарыҡ ите түгел, тауыҡ, күркә ите ҡулайлыраҡ. Ҡолбаса ла уларҙың аҙығы түгел, һөт ризыҡтары — ағыу менән бер. Уның ҡарауы, йәшелсә-емеште теләһә күпме ҡуллана бирһендәр!

Тамырҙарында өсөнсө төркөмгә ҡараған ҡан ағыусылар — күскенсе азиаттар. Улар халыҡ булараҡ беҙҙең эраға тиклемге 15—10 мең йылдар элек формалашҡан икән. Улар өсөн бойҙай — табу. Ә бына дөгө, арпа, һолоно улар еңел үҙләштерә. Һөт, йәшелсә менән туҡланыу ҙа файҙалы. Ит аҙыҡтары уларҙы көсһөҙләндерә, иммун системаһына зыян килтерә. Тауыҡ итенән дә баш тартыу зарур. Тауыҡ итен ҡулланыу инфарктҡа тиклем еткереүе ихтимал. Емеш-еләккә көс төшөрөргә тура килә. Хөрмә менән гранаттан ғына баш тартырға кәрәк.

Дүртенсе төркөмгә ҡараған кешеләр 1000 йыл элек кенә айырым халыҡ булып формалашҡан икән. Йәш әле улар. Ундай кешеләр беҙҙең арала күп түгел. Ер шарындағы кешеләрҙең 5 процентын ғына тәшкил итә.

Генетиктар хәҙер, ҡан төркөмөнә ҡарап, шәхестең холоҡ-фиғелен дә, психик темпераментын да билдәләй ала. Әйтәләр бит, Японияла эшкә алғанда, ғаилә ҡорғанда кешенең ҡан төркөмөнә ныҡ иғтибар итәләр икән. Япон гәзиттәрендә “шундай-шундай ҡан төркөмөнә ҡараған кешене урта звено етәксеһе итеп эшкә саҡырабыҙ”, “фәлән ҡан төркөмөнә ҡараған кеше менән етди енси мөнәсәбәткә инер инем”, тигән иғландар бар, ти.

Интернетта башҡорттарҙы булдыҡһыҙлыҡта ғәйепләгән, кәмһетергә тырышҡан уйҙырмалар йыш күренә. Шундай бер фекергә барып төртөлгәйнем: “Башҡортостанда трахома институты булған бит. Башҡорттарҙың кемлеген шул да күрһәтә инде...”

Минең быуын кешеләре хәтерләйҙер, 60-сы йылдар башында халыҡ трахома тигән күҙ сире менән ауырып алды. Уны тиҙ юҡҡа сығарҙылар. Мин данлыҡлы күҙ врачы Марат Аҙнабаевтан уның сәбәбен белешкәйнем:

— Нишләп сыуаштарҙан сыҡты ул трахома сире?

Ул миңә шулай аңлатты:

— Сыуаштар заманында хәрби походтарҙа әүҙем ҡатнашыусы милләт булған. Шундай яуҙарҙың береһендә ошо яман сирҙе йоҡторғандар.

— Әллә ҡасанғы сир ни...

— Ҡан хәтеренең уяныуы инде. Христиан динен ҡабул иткән сыуаштар бит байрамдарҙы эскелек менән билдәләй башлай. Нәҡ ана шул генетикалары эскелеккә көйләнмәгән өсөн дә вирус уянып китә лә инде.

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең милләттең дә, эскелеккә ҡарата иммунитеты булмаған шарттарҙа, урыҫ-сыуаштарҙан күрмәксе, ХХ быуатта эскелеккә йөҙ бороуы байтаҡ ҡына милләт фажиғәһенә килтермәнеме ни?

Ҡан хәтере, тимәк, таш хәтере кеүек, ваҡытҡа бирешмәй торған үтә даими субстанция икән дә! Йәнә шуныһы: кешелектең иң мөҡәддәс хыялдарының береһе — Мәңгелек төшөнсәһе, минеңсә, беҙҙең һәм беҙҙән һуң киләсәк быуындарға күскән һәм ҡан тип аталған субстанцияға бәйле. Бөтә нәмә үтә, серей, ә ҡан... ул быуаттар, мең йыллыҡтар буйы, быуындан быуынға күсеп аға ла аға... Үҙенә тарта, туғанлыҡ хистәрен, милләт үҙенсәлектәрен һәм ҡиммәттәрен оноттормай. Тулҡынландыра мине был хәл. Бигерәк тә ейәнем Искәндәргә ҡарағанда...

## “Мөхәббәткә генә ышанам”

*Аҡ сирендәр ергә сәскә ҡоя,*
*Йондоҙ буранына оҡшаған.*
*Күп нәмәлә мин дә икеләнәм,*
*Мөхәббәткә генә ышанам,*
*Мөхәббәткә генә ышанам...*

Минең “Мөхәббәткә генә ышанам” исемле шиғырҙар йыйынтығым бар. Ул 2006 йылда донъя күрҙе. Уны Яҙыусылар союзы идаралығы республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына тәҡдим итеп тә ҡараҒайны.

Китабымдың исемен “Мөхәббәткә генә ышанам” тип атағас, ысынлап та, мөхәббәт ҡоломо мин? Шул тойғонан башҡа инаныстарым юҡмы ни? Дөрөҫөн әйткәндә...

О, ул тойғо... Ул тойғонан мәхрүм булған, һине, бүтәндәр нисек ҡабул итеүгә ҡарамаҫтан, идеал, иң матур, иң аҡыллы, иң батыр итеп күреүсе, бығаса барлығын да белмәгән бер йәндең һиңә һоҡланыулы, хатта ки табыныулы кисерештәренән баш әйләнеү хәсиәтен кисермәгән кеше бармы икән? Ғашиҡлыҡтың төп принцибы, уны нисек кенә мөхәббәт хаҡына үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү тип аңлатмаһындар, шулай ҙа ғашиҡтарҙың бер-береһен: “Һин, тик һин, һин берәү һәм ҡабатланмаҫ”, — тиеп инандырыуҙары ул. Ә кемдең берҙән-бер булғыһы килмәһен. Мөхәббәт ғәләмәтенә тарыр алдынан кеше ярайһы ҡаршылыҡтарға, шәхсиәтен ҡабул итмәүгә, конфликттарға осрап өлгөргән була. Имештер, ата-әсәһе уны аңламай, дуҫтары, класташтары... Ә ул!.. Бөтә шул икеләнеүҙәрҙе, әйләнә-тирәләге “ғәҙелһеҙлек”, “баһалап бөтмәүсәнлектәрҙе” инҡар итеп, “һин, һин...” тип иҫбатлай һәм эсеңә йомолған, тышҡа сығарырға ҡыймаған амбицияларыңа ҡанат ҡуя. Һинең хаҡта шундай фекерҙә булған кешенән дә яҡшыраҡ әҙәмдең булыуы мөмкинме? Юҡ, әлбиттә. Һәм һин үҙең дә уны идеаллаштыра башлайһың.

О, ул мөхәббәт тигәнең... Һин яртыаҡыл, ярым иҫәр хәлдә, күҙеңә аҡ-ҡара күренмәҫлек томанға сорналғанһың. Психикаһы ныҡлап ултырып бөтмәгән ҡайһы бер ғашиҡтар, был кисерештәр һуңғы һәм ҡабатланмаҫ тойғолор, тип уйлауҙан, мөхәббәт яуапһыҙ булып сыҡһа, үҙ-үҙенә ҡул һалыуға барып етә. Их, яңылышалар! Ярамай! Түҙергә, кисерергә, айышына төшөнөргә кәрәк. Ваҡыт хәсрәтте лә, шатлыҡты ла, айышһыҙлыҡты ла урынына ҡуйыусы төп һәм алыштырғыһыҙ дауа ул. Ваҡыт аңды уята. Тимәк, мөхәббәттә йөрәк менән аҡылдың берҙәм булыуы зарур.

Кешенең төп инстинкты — бала тыуҙырыу. Ғашиҡтарҙың никахы, шулай ҙа, ғашиҡтар, тойғолар солғанышында нисек кенә бәхетле булмаһын, уларҙың тәҡәтһеҙ яратышыуының ихтыярынан былай, Раббы тарафынан ырыуҙың ғүмерен дауам итеү хаҡына эшләнә. Эйе, йәштәр үҙҙәренең бер-береһен табышыу бәхетенә ихлас күңелдән ышана һәм ләззәт кисерә, әммә кешенең төпкө аңы шулай ҙа ғашиҡтарға тик уларҙың союзынан ғына тыуасаҡ балалар хаҡындағы маҡсатты ҡуя. Нәҡ ана шул инстинкт кешене мөхәббәт тигән серле лә, ғазаплы ла, илаһи ҙа тойғолар эсенә әйҙәй. Шул инстинкт һәм мөғжизәле мөхәббәт кисерештәре йәшәүҙе мәңгеләштерәсәк киләсәк быуынға ғүмер бирә. Юҡ, әлбиттә, тәүге осорҙағы ҡайнар хистәр улай уҡ мәңгелек түгел, йылдар ул хистәрҙе һүрелдерә биреп тә ҡуя, әммә теге бер-береңә тартылыуға килтергән аңлайышһыҙ тәҡәт ғәләмәтен икенсе тойғолар — икәүләшеп “ижад” иткән балаларға булған яратыу, наҙ, ҡурсаларға, тәрбиә бирергә тырышыу хистәре алыштыра, шул

рәүешле ир менән ҡатын бер-береһенән айырылғыһыҙ бер бөтөнгә, ғаилә тип аталған берҙәмлеккә тарый. Хистәр һыуынғас айырылышыусы ғаиләләр ҙә бар. Быныһы XX—XXI быуаттың, әлеге лә баяғы рухиәткә ынтылыуҙан баш тартып, ләззәткә, матдилыҡҡа күсә барыуы кеүек мәғәнәһеҙ ғәҙәттәренең сәскә атыуы, үрсей барыуына бәйле, күрәһең. Бындай айырылышыуҙарҙың төп фажиғәһе — балаларҙың йәтимлеге.

Ғүмер буйы бер-береһен идеаллаштырған бәхетле никахтар күп булмай. Мөхәббәттән бәхетле булыусылар ҙа һирәк. Киреһенсә, дауылға оҡшаш хистәр өйөрмәһенә инеп баштарын юғалтып, ғазаптарҙан ҡотола алғандары өсөн ҡыуанып бөтә алмаған кешеләрҙе осратҡаным бар.

Әммә үҙ ғүмереңде киләсәк быуындарҙа дауам итергә ынтылыу теләге үлемһеҙ. Күргәнебеҙ бар бит, ғашиҡтар бер-береһенең күҙенә шундай мөкиббәнлек менән текләүсән. Юҡтан түгел бындай табыныуға оҡшаш бирелгәнлек, улар бер-береһенең күҙенән үлемһеҙлек эҙләй. Нәҡ ошондай үлемһеҙлек, күрәһең, беҙҙең ерҙәге ғүмеребеҙҙең асылын һәм мәғәнәһен тәшкил итәлер ҙә. Мөхәббәт, тимәк, эске аңдың йәшәүгә булған ихтыяры. Шул ихтыяр көсө ир менән ҡатынды ҡауыштыра, балалар тыуҙырыу кеүек изге ғәмәлгә әйҙәй, балалар, билдәле инде, беҙҙең ҡаныбыҙҙы мираҫҡа ала, ҡан аша милли, генетик, тарихи хәтер ҙә йәшәүен дауам итә. Үлемһеҙлек идеяһы солғанышындағы кешеләрҙе танымау мөмкин түгел. Улар, йәшәүҙе мәңгеләштереүҙең серенә төшөнгән ике заговорсы кеүек, шул серҙе, йәшәүҙең төп мәғәнәһен тормошҡа ашырыу маҡсатына табан ашыға һәм ошо үтә лә тәрән миссияны мөхәббәт тип атай. Миңә ҡалһа, иҫ киткес шәп “ҡармаҡ” был. Иҫ киткес шәп! Хатта ки Аллаһтың иң гениаль табышы һәм... хәйләһелер ҙә әле...

Кешене байтаҡ гонаһтарҙан, яман аҙымдарҙан ҡурсалауҙа төп таяныстарҙың береһе булған мөхәббәт кисерештәренән бәндәләрҙең баш тарта алғаны юҡ әле. Өҫтөнлөктәр, формациялар, йәшәү шарттары үҙгәрә, ер өҫтө лә, халайыҡтар ҙа афәткә, ғазаптарға, юғалтыуҙарға тарый, әммә йәшәүгә ихтыяр һәм уны мәңгеләштереү идеяһы юғалмай. Әйтергә кәрәк, иҫ киткес тәрән һәм даими, шул уҡ ваҡытта үтә юғары динамикаға көйләнгән идея был. Беҙ уға күндәмлек, бирелгәнлек, инанғанлыҡ менән буйһонабыҙ.

Ә шиғырҙарымдағы мөхәббәт темаһының өҫтөнлөгө лә тик мөхәббәт эҙләп кенә йәшәгәнем өсөн түгел, асылда Аллаһтың ана шул Мәңгелекте һуғарыуҙағы камил һәм ҡабатланмаҫ ҡөҙрәтенә һоҡланыуҙан, был ҡөҙрәттең тәрәнлеге һәм юғарылығына мөкиббән ғашиҡлыҡтан ул.

Кеше... Эйе, беҙ һәммәбеҙ ҙә әйләнә-тирәләге шарттар, милли мөхит, әкиәттәр һәм китаптар менән тәрбиәләнәбеҙ. Бындай тәрбиә, аңға һәм күңелгә һеңгән мәғлүмәт беҙҙе кеше итеп үҫтерә, холҡобоҙҙо, ышаныстарыбыҙҙы формалаштыра. Әкиәттәребеҙ, риүәйәт-легендалар, мифология асылда ҡурҡыу белмәҫ батырҙар, ҡыйыу йөрәкле геройҙар хаҡында, китаптарҙан да беҙ ана шундай шәхестәр хаҡында уҡыйбыҙ һәм ҡыҙҙар күңелендә кино геройҙарына, китаптыҡыларға оҡшаған йәр осратыу хаҡында хыял ярала. Әммә тормош бүтәнсәрәк ул. Геройҙар күп булмай. Рыцарҙар ҙа һирәк осрай. Шуға күрә, минеңсә, ҡыҙ баланы тормошҡа айыҡ күҙ менән ҡарарға өйрәтеү зарур. Күк атҡа атланған йәиһә ал елкәндәр таҡҡан карапҡа ултырған рыцарҙы көтөргә ярамай. Кешеләр ябай ул. Ир-ат та әллә ни ҙур ҡөҙрәткә эйә түгел. Ул ҡатын-ҡыҙҙан ни бары физик яҡтан көслөрәк булыуы менән генә айырыла. Психологик һәм мораль яҡтан беҙ бер-беребеҙҙән ҡалыш түгел. Ана шундай ысынбарлыҡты баһаларға, танырға өйрәнһәк, тормошта конфликттар, аңлашылмаусанлыҡ һәм дәғүәләр, ҡыйралған яҙмыш һәм ғаиләләр ҙә әҙерәк булыр ине.

Ҡыҙҙарға рыцарь эҙләмәҫкә кәрәклекте юҡҡа ғына әйтмәйем. Ғаилә ҡорғас, ир-атҡа өҫтөнлөк биргән шарттар солғанышында йәшәргә мәжбүр буласаҡһың. Бүтән юл әлегә юҡ.

Ә асылда ир-егеткә донъя көтөү ҡатын-ҡыҙға ҡарағандан да ауырыраҡ. Беҙ улдарыбыҙҙы, аталары хыялыбыҙҙан алыҫ булыу сәбәпле, идеалдарыбыҙҙы тормошҡа ашырырлыҡ итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ. “Һин малай ҙа инде, ебемә!” Ә ул малай беҙҙең ҡаныбыҙ һәм йәнебеҙҙән яралған. Ул ҡыҙҙарҙан тик физик көсө менән генә айырыла, рухи көстө Аллаһ һәммәбеҙ өсөн дә ғәҙел бүлә. Ә бит физик көс, бер уйлаһаң, тормошобоҙҙа ни тиклем кәрәкле һәм ҡөҙрәтле булмаһын, рухи көстән юғарыраҡ түгел. Шулай ҙа бөгөнгө цивилизацияның яҙмышы ир-ат таһыллығы һәм аҡылына, уның көсөнә бәйле. Үтә яуаплы миссия был.

Ир-егетте мин йәлләйем. Бигерәк тә мегаполистарҙың ҡатмарлы конструкцияларын күтәргән, цивилизацияның айырылғыһыҙ өлөшө булған коммуникациялар һәм инфраструктураны тәьмин иткән ҡара һәм ауыр эштәрҙе башҡарыусы ир-егеттәр эшмәкәрлеген күргәндә, эсем өҙөлә. Ҡеше, уның тәбиғәте, мөхәббәте, мәңгелек алдындағы бурысы хаҡында фәлсәфә ҡорорлоҡ шарттарҙы кем тыуҙыра һуң? Крандан эҫе, һыуыҡ һыу аға, газ плитәһе яна, быларҙың барыһын да кем тәьмин итә? Мин философ-шағирмы? Йәиһә бесән әҙерләп үрсетелгән мал итенән, ир көсө менән ер ҡаҙып үҫтерелгән йәшелсәнән оҫта итеп ризыҡ рәтләгән ҡатынымы?

Ир-егетте мин йәлләйем. Ил өсөн ҡанын ҡойған фронтовиктар, илде күтәрәм тип төҙөлөштәрҙә, сик һағында көсөргәнеүселәр хаҡындағы киноларҙы, документаль кадрҙары күргәндә илайым. Ир-атҡа ҡояш аҫтындағы урын, карьера өсөн дә көрәшергә, тәбиғәттән һалынған амбицияларын тормошҡа ашырыу өсөн абруй яулап айҡашырға ла тура килә. Күптәре булдыҡһыҙ тигән мөһөрҙән ҡурҡа. Дөрөҫ, көсәнеп йәшәй-йәшәй кендеген дә ҡаната ул.

Ә унан да бигерәк ҡатын-ҡыҙҙы йәлләйем. Идеалдары тормошҡа ашмаҫ шарттарҙа йәшәргә мәжбүр, әммә Мөхәббәт тигән усаҡ һүрелгәндән һуң да балаларын тәрбиәләүгә, иренә хеҙмәт итеүгә дусар, шуны бәхет тип танырға мәжбүр ҡатын-ҡыҙҙы әйтәм.

Эйе, ҡырағай тарпанды ҡулына эйәләштергәне бирле үҙенең көслө зат булыу хоҡуғын яулаған, ғаиләнең туҡлығы өсөн яуаплылыҡты үҙ теләге менән өҫтөнә алған ир-егеткә бөгөн үҙе килтереп сығарған ҡанундар эсендә йәшәү, булдыҡлылығын иҫбатлау еңел түгелдер. Улар, үкенескә ҡаршы, Аллаһ тарафынан ҡуйылған әхлаҡи талаптар көсөргәнешен тартып бөтә алмауҙары сәбәпле, бөгөн мораль ҡыйралышҡа ла тарып ҡуя.

Ә ҡатын-ҡыҙ... Ҡатын-ҡыҙҙы мин ихлас күңелемдән хөрмәт итәм, сөнки уларҙың хәсиәте миңә аңлайышлы... Уға баш мейеһе эшмәкәрлеген егеп, Бар Ҡылыусыбыҙҙың төп маҡсатты — Мәңгелек, Мөхәббәт, инанғанлыҡ, табыныу сигендәге бирелгәнлек, теләһә ниндәй шарттарҙа ла ана шул Бөйөк идеяны төпкө аң, йәнде һуғарыусы ҡан аша бойомға ашырыу мәжбүрилеге яҙған. Асылда мәжбүрилекте ҡатын-ҡыҙ яратмай. Тормош юлына баҫыр алдынан армия сафында хеҙмәт иткән, аҙаҡ ғүмере буйы субординатив буйһоноуҙы тәбиғи тип иҫәпләргә өйрәтелгән ир-аттан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте баҫҡыслы буйһоноусанлыҡты яратмаһа ла, баштараҡ “һин, һин” тигән йәренең торараҡ “мин,мин!” тигән талаптарына күнеүгә риза була. Риза булмаһа — ул алйот. Иренең ихтыярын яҙмышы тип һанамаған, үҙен уның идеалдары хаҡына ҡорбан итмәгән ҡатын йүләр һанала. Ә был ысынында ла шулай, сөнки бөгөнгө беҙ йәшәгән цивилизация ирҙәр ҡанундары, уларҙың психологияһы, аҡыл һәм физик

көсөнә яраҡлаштырылған. Бөгөн ғаилә мөнәсәбәттәренең бүтән формаһы юҡ тиерлек. Ә был, асығын әйткәндә, дөрөҫ түгел. Ни өсөнмө?

Ирҙәр донъя тотҡаһы тип яратылмаған да баһа.

Бала тапҡан, аш бешергән, именлек тип йәнен фиҙа ҡылған ҡатын-ҡыҙҙың һәр теләген, ымын еренә еткереп башҡарырға вазифаландырылған зат ул ир-ат. Ирҙәр донъяны ҡороуға, уның йәшәйеш ҡанундарын ижад итергә һәләтһеҙ. Сөнки улар тәбиғәте буйынса — тик башҡарыусы, русса әйткәндә — “исполнитель”. Ирҙәр тамаҡ туйҙырыу, именлек һағында тороуға бурысландырылған енес. Ирҙәргә донъя әҙәбиәте лә, дин дә үтәй алмаҫлыҡ бурыстар ҡуя: Рыцарь бул, ҡатыныңдан өҫтөн бул, сөнки һин — табыусы-туйындырыусы. Ә уға физик өҫтөнлөктәрен йышыраҡ үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыу оят түгелме икән? Бала табыу, усаҡты тере тотоу, ризыҡландырыу, рухи тәрбиә биреү, мамонттымы, тарпандымы атып йығыуҙан еңелерәк түгел шикелле. Диндәрҙе, аңлашыла ки, ирҙәр формалаштырған һәм өҫтөнлөктәрҙе лә үҙ файҙаһына көйләгән булып сыға. Дөрөҫмө был юл? Йәмғиәт ни өсөн бәхетле кешеләрҙән генә тормай? Ҡешеләрҙең дин тотоуына, диндәрҙең барлыҡҡа килеү тарихына меңәр-меңәр йылдар ҙа баһа...

Ярай әле, ҡатын-ҡыҙҙы бөгөн бик үк көсһөҙ зат тип атап булмай. Был дөрөҫ йүнәлеш. Донъяны туҡтауһыҙ матди һәм рухи көрсөккә терәтеүсе ир-ат теләгенә ярашлы донъяла беҙ нисә мең йыл йәшәнек? Ҡем бәхетле булды? Әсәйебеҙме? Өләсәйебеҙме? Ҡупме ҡорбан килтерергә мөмкин йәшәүҙе ойошторорға һәләтһеҙ ирҙәр хаҡына? Белем, таһыллыҡ, рухи яҡтан ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ярайһы ҙур үҙгәрештәр кисерә. Улар ҙа хәҙер мал табыуға, идара итеү һәләтенә эйә була бара. Нисек булыр, был ниндәйҙер өҫтөнлөктәр үҙгәрешенә этәрерме? Үҙгәрештәр конфликттар аша яуланырмы, әллә яҡтарҙы компромислы килешеүҙәргә килтерерме? Уныһы — киләсәк ҡулында. Әммә кешелек, минең тоҫмаллауымса, ғаилә институты, мөхәббәт емеше булған балаларҙы донъяға табыу кеүек изге миссияны үтәүҙән баш тартыуға уҡ барып етмәйәсәк. Һәр хәлдә, Юғары Аң бындай яман уйҙан аралау ысулы һәм юлдарын табышасаҡ.

Ҡеше... Йыһан эсендәге хәсрәткә-һағышҡа, һыҙланыуҙарға, юғалтыуҙарға, бәхет, шатлыҡҡа дусар, Мөхәббәт тигән серле мөғжизәне татыу бәхетенә эйә, ижади асыштар яһарға, ҡыйралыштарҙы кисерергә һәләтле Ҡешелеккә рәхмәтлемен. Тотош серҙәрҙе, һеҙ уйлап тапҡан тәғлиматтәрҙе үҙләштерерлек һәләтем булмаһа ла, һеҙҙең табыштар менән туҡланырға, бер аҙ булһа ла үҙемсә һығымталарға килә алырлыҡ мәғлүмәт тупларға өйрәткәнегеҙ, мөмкинлектәр асҡанығыҙ өсөн рәхмәтлемен!

Беҙ эволюцияға бирелеүсән йән эйәләре. Эволюция, күрәһең, үҙе лә сикһеҙ түгел. Байтаҡ фәнни табыштар, тормошобоҙҙо еңеләйтеүсе ғилми һәм техник асыштар менән файҙаланып ғүмер итәбеҙ беҙ бөгөн. Ә артабан?... Минеңсә, беҙ әлегә бер аҙ депрессияға бирелеберәк, киләсәкте тоҫмаллау юлдарын эҙләгән осорҙа йәшәйбеҙ. Әммә кешелек потенциалы тамамланмаған. Ҡайҙа табан йүнәлеш алырбыҙ? Ниндәй илаһи идеялар мауыҡтырыр, идеалдар маяғыбыҙ булыр? Билдәһеҙ.

Билдәле булһа, күңелһеҙ булыр, ижади ойоштороуға талап булмаһа, йәшәү үҙе лә мәғәнәһеҙлеккә дусар булыр ине. Ә бит йәшәүҙең төп мәғәнәһе — ҡыҙыҡһыныулы ижади ғүмер, танып белеүгә ынтылыш ул. Үҙ-ара ҡатмарлы, хатта ки аңлап бөтөүе бик үк еңел булмаған мөнәсәбәттәр арһындағы иң ҙур һәм илаһи тойғо — Мөхәббәттең иң төп таянысыбыҙ булыуына һоҡланырға ғына ҡала.

* * *

Бер ҡатлыраҡмы икән инде был фекерҙәрем...

Ә, бәлки, һеҙ бүтәнсәрәк уйлайһығыҙҙыр? Ә шулай ҙа... теге номинацияһы 10/90 процентҡа йүнәлтелгән матдилыҡ һәм рухиәткә килгәндә...

Дөрөҫмө икән был теорема? Ҡешелек яҙмышы, тарихи ваҡиғаларҙы күҙ алдынан үткәрһәң, цивилизацияның үҫеше, алға тәгәрәүе, уның ниндәйҙер эволюцион үрҙәргә өлгәшеүенең нигеҙендә рухи ҡиммәттәргә, дини талаптарға тоғролоҡ ятмай бит. Галилео Галилей, Микеланджело, Эйнштейн — атеистар. Ә беҙ, шул дини ҡалыптарҙы инҡар итеүселәрҙең асыштарын рәхәтләнеп ҡабул итеүсе һәм шуларҙан файҙаланыусылар, дини тәғлимәттәр талабынса, тик доға уҡып йәки суҡынып, ғүмеребеҙҙе рухи юғарылыҡҡа өлгәшеүгә генә бағышларға тейеш булып сығабыҙмы? Ә беҙ ергә үҙ теләгебеҙ менән киләбеҙме ни? Ярар, килдек тә ти. Хоҙай Тәғәлә аксиома тип һанаған рухиәт талабында беҙҙең ни ҡыҫылышыбыҙ бар? Нишләп ундай бурыс йөкмәтелә беҙгә? Ә бит, бая әйткәнемсә, ер өҫтөндәге интригалар тик матди талаптар арҡаһында эшләнә. Һәр бер һуғыш, ил баҫыуҙар ни бары матди етешһеҙлек, күршеләрҙең байлығын үҙләштереү йәки бүлешеү теләгенән атҡарыла. Тимәк, кешелек яҙмышы һәм тарихы матдилыҡ һәм рухиәт араһындағы көрәш ул. Ә рухиәт менән генә тамаҡ туямы? Юҡ, әлбиттә. Шулай булғас, ғәҙелме был талаптар? Юҡ, тигән фекерҙәмен. Әммә матдилыҡ идеалының да нигеҙһеҙлеге, тарих биттәренән күренеүенсә, ысынбарлыҡ.

Фажиғәме? Әлбиттә. Тимәк, йыһан дәүмәле һәм берәү ҙә айышына төшөнә алмаған Бар Ҡылыусы идеялары — ҡотолғоһоҙ, анализға бирелмәгән, кеше аҡылы аңлап бөтмәҫлек мөхит. Уйлана китһәң — фажиғә. Динле булырғамы, атеисмы? Үҙегеҙ һайлағыҙ. Әммә онотмайыҡ, аҙға ғына бирелгән ғүмеребеҙ эсендә тормошҡа ижади мөнәсәбәттән башҡа сарабыҙ бармы? Мин, күпме генә уйланһам да, таба алманым.

Артабан, минең аңлауымса, Сократ, Платон, Диоген, Пифагор, уларҙан һуң донъяны танып белергә яҫҡынған Ницше, Шопенгауер кеүек философтарҙың, Гендель, Моцарт, Чайковский, Рахманиновтарҙың шул уҡ донъяны аңларға һәм аңлатырға тырышыуындағы ижади фекерҙәре, Ғүмәр Хәйәм, Гёте, Байрон, Толстой, Достоевский, Островский, Чехов, Тургенев, Салтыков-Щедрин, Лермонтов, хатта Есенин менән Анна Ахматова кеүек әҙиптәр, Адам Смит, Ильин кеүек иҡтисадсылар, Леонардо да Винчи, Ньютон, Эйнштейн, Циалковский, Королёв кеүек физиктар, кешелек яҙмышына ниндәй генә тетрәндергес йоғонто яһамаһындар, һәр береһе кешенең ерҙәге ғүмеренең сараһыҙ һәм аяуһыҙ юҡҡа сығышлыҡ ҡанунына дусар икәнлеген тәкрәрләй. Тимәк, беҙ — ер кешеләре — ни бары кемдеңдер ҡулындағы марионеткалар. Оҡшаймы был һеҙгә? Миңә — юҡ. Ә нишләргә? Билдәле ки, ас, ярлы кеше рухиәт хаҡында уйлана алмай, уға балаларын үҫтерергә, уларҙы ашатырға, уҡытырға кәрәк. Белемһеҙ булһаң, Мәңгелек талабынаса түгел, ерҙәге меңәр-меңәр йылдар барышында барлыҡҡа килгән ҡанундарға күрә ( ә уларҙы кем дөрөҫ түгел тип инҡар итә ала?), ҡара һарыҡ буласаҡһың. Дөрөҫ, ялҡауың килһә, үҙеңде ҡара эшкә лә, аҡыл эшенә лә егергә теләмәһәң, ҡара һарыҡ булып ғүмер итергә лә мөмкин. Шул тормошоң үҙеңә оҡшаһа инде. Мәйелең. Хоҙай Тәғәлә ауыр һәм ҡаты талаптар ҡуйған кеүек, һайлау иркенлеген дә рөхсәт итә. Ярлы, ҡол булғың киләме? Бул әйҙә. Иркеңдә. Бәлки, ергә ебәрелешеңдең бурысы шулдыр. Ә тырышып ҡараһаң? Бүтәндәрҙән кәм булмаҫ өсөн, "Ҡапитал" хеҙмәтенең авторы Карл Маркс әйтмешләй, ерҙә йәшәгән кеше тәүҙә базис булдырырға тейеш, шул базис өҫтөнә генә рухиәткә йөҙ тотоусы "надстройка" һалырға мөмкин. Парадокс аксиома ла шунда: кеше-

лек тәжрибәһе шулай ҙа беҙҙе руханиҙар ҡушҡанса түҙемле, күндәм булырға ғына түгел, тормошобоҙҙағы етешлекте хәләл көсөбөҙ менән булдырырға өндәй. Хаҡ Тәғәлә лә әйтә бит: "Сәбәп ҡыл, сәбәп ҡылһаң, бирермен!" Беҙгә, ергә ебәрелгән һуңғы бәйғәмбәр Мөхәммәттең ислам тәғлиматенә инаныусыларға, Хоҙай бар булырға, бай булырға ҡуша. Әммә байлыҡты кеше хаҡына инеп туплауҙы гонаһҡа иҫәпләй, тереклек итер өсөн ергә тиребеҙ тамыуын хуплай. Ауыр талапмы? Ауыр, әлбиттә. Һеҙгә оҡшаймы? Миңә лә оҡшамай. Ә беҙҙең сарабыҙ бармы? Бар. Ошо күңелһеҙ һәм ауыр талаптарға буйһоноп, уларҙан тайпылмай, ижади файҙаланып етешлек һәм рухи камиллыҡҡа йөҙ тотоу. Был күңелһеҙ ысынбарлыҡ. Ләкин — аксиома.

## Замана

*Заманалар иҙеп имгәткәндән,*
*Тыумаҫ тимә ирҙәр илдәрҙә.*
*Төштәрендә әйәр-йүгән күреп,*
*Мышнай малай ап-аҡ мендәрҙә.*

Һуңғы осорҙа әҙәби ижад менән элекке кеүек көсөргәнештә шөғөлләнеү теләге һүрелеберәк китте. Гәзит-журналдар уҡыйым, телевизор ҡарайым.

Үҙәк телевидениены ҡарап барам. Башлыса мәғлүмәт биреүсе тапшырыуҙарҙы эҙләйем, сөнки минең йәштәге кеше өсөн күңел астырғыс шау-шыу ҡыҙыҡ түгел. Андрей Малахов исемле журналистың "Пусть говорят" тапшырыуын ҡарарға тырышам. Илебеҙ Рәсәй киңлектәрендә тулып ятҡан ғибрәтле күренештәрҙе күңелем һәм зиһенем аша кисереп тетрәнәм. Бер осор балаһын кемдән тапҡанын да белмәгән ҡатын-ҡыҙ, енси бәйләнешкә ингән ир-егеттәрҙе йыйҙырып, уларҙың ДНК-һы аша балаһының атаһы булыу-булмауын тотош ил алдына сығып тикшертеүгә барып етте. Абау, ниндәй мәғәнәһеҙ, гонаһлы бәйелһеҙлек. Унан тыш та күңелһеҙ күренештәр тулып ята. Эскелек, уйнаш, бала-сағаға булған аяуһыҙ мөнәсәбәт, мал сифатына еткән йүнһеҙлек, аҡыл, дини принциптар менән түгел, инстинкттарға таянып ғүмер итеү шул тиклем үрсеп бара, йәнә бер ун-ун биш йылдан Рәсәй тик ашау-эсеү, уйын-көлкө, сепрәк-сапраҡ өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай һәм теләһә ниндәй ысул менән дә идара ителеүгә риза ҡолдар иленә әүерелеүе ихтимал.

Минең замандаштарымдың байтаҡ ғүмере үҙгәртеп ҡороу, демократтар идеологияһының килделе-киттеле сәйәсәте шарттарында йәшәүгә дусар ителде. Эйе, заманаы беҙ һайламаныҡ, уның беҙ ҡабул итә алмаҫлыҡ үҙгәрештәренә йоғонто яһарлыҡ көсөбөҙ булмауҙан шаңҡып ҡалдыҡ. Алйот булғаныбыҙ өсөн түгел, күңелебеҙ һәм хәсиәтебеҙҙең хәйләгә, алдаҡҡа көйләнмәгәнлегенән. Бер ҡатлы инекме? Эйе... Дөрөҫ, бәғзеләр, тиҙ генә тунын әйләндерә һалып кейеп, халыҡ мәнфәғәттәре ихтыярына йөҙ тотмаған системаға "әсирлеккә" төштө һәм үҙ именлеге, кеҫәһе хаҡына демагогик һүҙ бутҡаһы бешерергә, дифирамблы поэмалар, мәҙхиә шиғырҙар "ижад" итергә тотондо. Билдәле инде, баһаһы — яҡшы вазифа һәм дәүләт премиялары, орден-миҙалдар.

Мин иһә халыҡ мәнфәғәтен һанға һуҡмаған, ул түләгән һалым иҫәбенә рәхәт йәшәгән яңы системаны хуп күрмәүем хаҡындағы фекеремде әйтә торҙом. Юҡ, мине ҡулға алып, төрмәгә япманылар.

Ә нишләп хәсрәтләнәһең, башҡорттар һине барыбер хөрмәт итә лә баһа, тиерһегеҙ. Эш шунда — мәктәп дәреслектәре өсөн программалар, хрестоматия-

лар яҙғанда, методистар мотлаҡ яҙыусының регалияларына таяна. Әле, үҙем тере саҡта уҡ, мәктәп уҡытыусылары ижадымдың мәктәп дәреслектәрендә булмауына зарлана. Әҙәбиәттең ниндәй булырға тейешлеген аңлаған уҡытыусыларҙы әйтәм.

Шундай бер мәғлүмәт тә тетрәндерҙе әле. Етди фекерле, ғилми дәрәжәле кешеләр һөйләй (шоу-бизнес вәкилдәре, экстрасенстар түгел): йөҙәр йыллыҡ тарихы һәм тәжрибәһе, үҙ ҡанундары, кодексы, катахезисы булған йәшерен орден (ойошма) миф түгел, ысынбарлыҡ икән ул. Улар үҙҙәрен "Донъя идаралығы" ("Мировое правительство") тип һанай. Дөрөҫөрәге, һанай ғына түгел, донъя менән идара итеү улар ҡулында. 300 ғаиләнән торған был йәшерен хөкүмәт "Алтын миллиард" тип аталған тәғлимәт һәм идеалдың ижадсылары һәм пропагандалаусылары ла. Ер йөҙөндәге бөтөн илдәр һәм дәүләттәр ошо миллиардерҙар ҡаҙнаһын тулыландырыуға көс һала икән, уларҙың төп ниәте — бөгөн донъя йөҙөндә йәшәгән 7 миллиард кешене 1 миллиардҡа ғына ҡалдырыу һәм, бөтә ресурстарҙы үҙҙәренә буйһондороп, теге 1 миллиард кешенән ҡолдар яһау. Уның өсөн был төркөм аҡса йәлләмәй. Яҡын Көнсығыштағы болалар улар аҡсаһына ҡубарыла. Күрҙек бит инде, халҡы өсөн ни саҡлым изгелек эшләгән Ҡаддафиҙы нишләттеләр. Туҡмап үлтерҙеләр ҙә ҡуйҙылар. Ә ул, ғаиләләрҙә бала тыуған һайын — 7 мең доллар, һәр ғаиләгә йыл һайын мең доллар күләмендә, бизнес асам тигән кешегә 20 мең доллар (ҡайтарыуһыҙ) ярҙам таратып, бушлай уҡытып, халҡын иркенлектә йәшәтеүгә өлгәшкәйне.

Әлеге идаралыҡтың емерткеслеккә аҡса һалыу даирәһенең йәнә бер өлкәһе — "секс революцияһы". Кешеләрҙе бер енесле ғаиләләр булдырыуға илһамландырыу. Ғаилә институтының изге ҡанундарын һанға һуҡмай, бәйелһеҙлеккә, тән ләззәтенә ынтылыуҙы хуплау — былар барыһы ла аҙғынлыҡ аша әхлаҡ принциптарынан баш тартыуға килтерә лә баһа.

Дәүләттәр ҡоролошон ҡаҡшатыусы теге йәки был төҫтәге сәйәси акциялар эшмәкәрлеге лә бит күп кенә сығым талап итә. Донъя халҡының өстән ике өлөшө ас-яланғаслыҡта йәшәүе уларҙы борсомай. "Енси аҙғынлыҡты әйтәм, был — туранан-тура миләттәр генофондының тамырҙарына балта сабыу, әлбиттә. Әҙәп-әхлаҡ тотҡаһы булаһы, балаларҙың киләсәге, уларҙың рухи үҫеше сифаты хаҡына күңелен сарыф итәһе урынға бөгөн байтаҡ ҡыҙ-ҡырҡын тәнен тауар итеү юлдарын эҙләүсе уйһыҙ йән эйәһе булып йәшәүҙән ҡурҡмай ҙа, оялмай ҙа.

Телегония тигән төшөнсә бар. Ул күп кеше менән енси мөнәсәбәткә ингән ата-әсәнән тыуған балаларҙың ата-әсәһенә түгел, бүтән кемгәлер оҡшап тыуыуы һәм шул билдәһеҙ кешенең холҡон ҡабул итеү мөмкинлеге барлыҡты аңлата.

Ә миллиардтар тауында ултырған килеш, донъя халыҡтары, дәүләттәрҙең бәкәленә һуғырҙай иҡтисад кризистары ойоштороп, тотош илдәрҙе көрсөккә терәтеү? Эйе, изгелек менән яуызлыҡ көрәше үтә хәйләкәр һәм аяуһыҙ төҫ ала бара. Бөтә был шашыныуҙарҙың глобаль фажиғә менән тамамланыу ихтималлығы хаҡындағы етди фекерҙәр ҙә тетрәндерә...

Әммә яуызлыҡ үрсегән ерҙә изгелек тә йоҡлап ятмай. Үҙаңы, зиһене камил кешеләр рухи ҡиммәттәребеҙҙе яҡлау, хәйриә юлы менән ярҙамға ашығыу кеүек яҡшы эштәр ҙә ҡыла. Кешелек яҙмышы һәр тарихи осорҙа ла ана шул аҡ менән ҡара бизмәненең балансына бәйле ул. Шунһыҙ цивилизациялар эволюцияға өлгәшә алмай. Унһын теге йәшерен хөкүмәт тә белмәй түгелдер, әммә матдилыҡ нәфсеһен аҙҙырған Рокфеллер, Ротшильд, Форд кландары, һыналған рухи ҡиммәттәрҙе инҡар итеп, аҡса культы өҫтөнлөгөн һәм матди байлыҡтың арбағыс

ләззәтен алға һөрә. Миңә аңлашылмай, ул тиклем аҡса нимәгә кәрәк икән дә, уны яуызлыҡҡа сарыф итеүҙең ниндәй ләззәте бар икән?

Халыҡты ана шундай ҡоротҡос йүнәлештән ҡайырып алыусы саралар бармы һуң? Минеңсә, был бурысты матурлыҡ, изгелеккә өйрәтеүсе, яуызлыҡҡа ҡарата нәфрәт уятыусы әҙәбиәт менән сәнғәт үтәй алыр ине. Рухи ҡиммәттәрҙән йөҙ бороу уҙған быуаттың 90-сы йылдарында башланды. Юҡ, властағылар илдең, милләттәрҙең рухи кимәлен юғалтмау, халыҡтың тарихи тәжрибәһен үҫтереү йүнәлешенә тоғро мәҙәниәтле, талантлы шәхестәрҙе репрессиялауҙы ойошторманы, әммә уларҙы күрмәмеш, ишетмәмеш булыу, власть органдары алдына ҡуйған һорауҙарына битарафлыҡ күҙгә төртөлөп торманымы ни? Яҙыусылар, халыҡтың бүтән талантлы вәкилдәре, сәнғәт, фән әһелдәре кәмһетелеүле хәйерселеккә дусар ителде. Яҙыусылыҡ — һөнәр ҙә баһа ул. Һәр һөнәр кеүек, уның хеҙмәте лә лайыҡлы баһаланырға тейеш түгелме ни? "Изге рух" менән генә туҡланып, йәмғиәттең үҙаңын яҡтыртырҙай продукция етештереп буламы? Ни өсөн теге "Йәшерен хөкүмәт" ҡоротҡослоҡ эшмәкәрлеге өсөн аҡса йәлләмәй, ә шуларға ҡаршы тороу бурысы матди мәхрүмлектә йәшәүсе яҙыусыларға йөкмәтелә һәм шуны бушлай эшләргә ҡушыла, ҡушылмаһа ла, өмөт ителә һуң? Бөгөнгө техник революция заманында ҡулыңдағы ҡәләмең һәм эшмәкәрлегеңдең төп ҡоралы булған күңелең, зиһенең менән генә нимә ҡыйратып була? Әҫәр ижад итеп була, уныһы хаҡ. Бөйөк Ватан һуғышында Мәскәү янындағы ҡаты һуғышта Доваторҙың танктарға ҡаршы һыбай яугирҙар менән ҡаршы тороп маташыуы кеүек була түгелме? Мәскәү янындағы ул һуғышта, һүҙ ыңғайында әйтеп китәйем, башлыса башҡорттарҙан торған ғәскәрҙең ике мең аты алты минут эсендә һәләк була...

Яҙыусылар халыҡты гуманлылыҡҡа, әхлаҡи камиллыҡҡа саҡыра. Әҫәрҙәрендәге драматик, трагик кисерештәр ҙә, матурлыҡ манзараһы, юмор ҙа — уҡыусы күңелендә йә илатып, йә һағышландырып, йә көлдөрөп, йә һоҡландырып катарсис тыуҙырырға йүнәлтелгән була. Ә катарсис кеше күңелен таҙарыныуға, яҡты хистәргә этәрә. Яҙыусы милләтенең адвокаты ла, судьяһы ла булыуы ихтимал. Тик халҡының ҡоло түгел, ә, киреһенсә, уның маяғы. Милләттең ер өҫтөндәге бурысы юғарынан билдәләнә икән. Халыҡ, дөрөҫөрәге, милләт — тере организм. Ул, тәбиғәт фазалары кеүек, үҙгәрештәр кисерә һәм төшөнкөлөккә, мәнһеҙлеккә бирелеүгә дусар ителгән кеүек, күтәрелешкә, яңырыу һәм ижади үҫешкә, ыңғай үҙгәрештәргә лә һәләтле. Уның шул һәләте талантлы балаларын алға әйҙәй. XX быуатта заманалар милләтебеҙ алдына ҡуйған бурыстарҙы Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Баязит Бикбай, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Ғайса Хөсәйенов,Ноғман Мусин, Рауил Бикбаев, Флорид Бүләков, Ҡәҙим Аралбай, Рәшит Шәкүр һәм башҡа яҙыусыларыбыҙ; Заһир Исмәғилов, Хөсәйен Әхмәтов, Әхмәт Лотфуллин кеүек сәнғәт эшмәкәрҙәребеҙ, фән өлкәһендә эшләүсе байтаҡ ғалимдар, Зәки Вәлиди, Мортаза Рәхимов кеүек сәйәсмәндәр, егәрле һәм талымһыҙ интеллигенция үҙ теләге менән үҙ өҫтөнә алды. Нәҡ ана шундай зыялылар беҙгә милләт булып йәшәргә, халҡыбыҙҙы, илебеҙҙе яратырға, ҡиблабыҙға тоғро булырға йүнәлеш бирҙе. Хәҙер иһә, йыһан ҡанундарына күрә, яңы этап һәм яңы һынауҙар көтә беҙҙе. Башҡортто ла, тотош донья халыҡтарын да урап үтмәйәсәк был яңы баҫҡысҡа күтәрелеш һынауҙарына көсөбөҙ етерме? Уны энтузиаст яҙыусылар ғына атҡара алырмы? Социаль йәмғиәт төҙөйбөҙ тип вәғәҙә биреүсе сәйәси лидерҙар ни ҡылыр? Хәйер, дөрөҫөн әйткәндә, власть ул халыҡты асығыуҙан, енәйәттән ҡурсалаусы, мәртәбәле йәшәү өсөн шарттар тыуҙырырға бурыслы институт ҡына. Халҡыбыҙға үҙенә уянырға, эскелектән баш тартып, ил, ғаилә,

милли аң кеүек төшөнсәләрҙе үҙ өҫтөнә алырға ваҡыт. Юҡһа, иллегә етер-етмәҫ, уҙа китһә, 60—65 йәштәрҙә тәгәрәшеп үлеп ятҡан ағай-энене беләбеҙ бит. Ундай хәлдәр халҡыбыҙҙың бәкәленә һуға, тамырҙарыбыҙҙы ҡаҡшата. Генетиктар әйтеүенсә, беҙҙең рухи энергиябыҙ, зиһен һәм күңел көсөбөҙ етерлек әле, халҡыбыҙҙың көнҡош кеүек сифаттарға эйә булыуы ла билдәле. Ҡамиллыҡҡа өлгәшкән һайын тәбиғи үҙгәрештәр кисерәсәгебеҙ бәхәсһеҙ, ул саҡта беҙ бөгөн яҙған китаптарҙағы рухи ҡиммәттәр һәм борсолоуҙар бер ҡатлы кеүек тә күренер, әммә әҙәм балаһы беренсе класта уҡымаған көйө, урта, юғары белемдәр, милли инанғанлыҡ мәктәбен үтмәй тороп, шәхес булып өлгөрә алмай. Шуға ла милләт яҙмышында һәр зыялы кешенең үҙ урыны һәм өлөшө булыу зарур.

Урыҫ интеллигенцияһы һәр саҡ власҡа ҡарата оппозицияла тора. XIX быуатта һәм XX быуат башында разночинецтар, дворян сословиеһынан сыҡҡан намыҫлы кешеләр, халыҡ араһында аңлатыу-ағартыу эштәре алып барыу маҡсатында төпкөл төбәктәргә китеп, врач, уҡытыусы булыу юлына баҫа. Улар халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙы үҙенең мөҡәддәс бурысы һәм намыҫ эше тип һанай һәм, әлбиттә, тәү сиратта үҙенең матди хәлен түгел, халыҡтың ауыр яҙмышын еңеләйтеү хеҙмәтенә егелә. Замана талабы ла шундай була. Ул осор башҡорт зыялылары, уҡымышлы кешеләр Башҡортостан буйлап ҡына түгел, Ҡаҙағстан далаларындағы ҡышлаҡтарҙа ла мәғрифәтселек менән шөғөлләнә.

Беҙ, бөгөнгө яҙыусылар, Ватаныбыҙҙы яҡлап ҡан ҡойған, тыныс тормошта КПСС идеологияһына хеҙмәт иткәндәре өсөн дан яулаған, бер аҙ балға-майға яҡынайтылған яҙыусыларҙы күреп формалаштыҡ. Үҫешкән социализмды данлаусы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре матди мәхрүмлектә йәшәмәне. Ә капитализмдың төп формулаһы һәм уның уңыштарын пропагандалаусы лозунг бирәү: “Тауар — аҡса — тауар”. Яҙыусы яңы йәмғиәткә кәрәкмәй булып сыҡты һәм, әлбиттә, бер ни тиклем күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелеп китте. Әрһеҙерәктәр дәүләт власы органдарының “кеҫәһе”нә инеп ятыу юлдарын эҙләй башланы, матбуғатта комплиментар публицистика, хатта дифирамблы шиғри бағышлауҙар, поэмалар баҫылды. Ваҡытында комплимент әйтә белеүселәргә бер ни тиклем саҙаҡа ташлау күренештәре күҙәтелде, былары намыҫлы инсандарҙы төшөнкөлөккә бирелдерҙе. Минең “Бәйге” тигән шиғырым бар:

— Ҡем беренсе?
— Мин!
— Мин!
— Ә һин?
— Улар түгел, минсе беренсе!
Эй айҡаша майҙан тотоусылар —
Пегас эйәрендә елеүсе.
— Һин нисәнсе?
(Минән һорайҙарсы...)
Ҡай тирәлә һинең урының?
— Яйлап килә ятам...
Хайран ҡалып,
Бынау сәмле бәйге уйынын.
— Аңшайма бик!
Аңлар ваҡыт инде
Тәм-ләззәтен данға үрләүҙең.
— Беренселәр... Оһо!
Яман күп бит!
Мин икенсе генә...
Бер үҙем.

Әммә халыҡ идеалдарына ла, намыҫына ла тоғро яҙыусылар ҙа, журналистар ҙа, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре лә бар бит әле. Власть органдарына яҡынлығым булмаған, әйтә алмайым, шулай ҙа унда эшләүселәр араһында ла халҡыбыҙ яҙмышына битараф булмағандар етерлектер, тигән фекерҙәмен.

Ә халҡыбыҙ... Халҡыбыҙ — диңгеҙ ул. Сүп-сарҙы ярға сығарып ташлай ҙа таҙарына, уға ғына һәм Аллаһҡа ғына билдәле ҡанундарға нигеҙләнеп яңыра.

Беҙ торабыҙ ҙа: “Башҡорт бөтә, телебеҙ юғала”, — тип сәбәләнергә тотонабыҙ. Нишләп бөтһөн, нишләп юғалһын ул? Эйе, милли генә түгел, ил афәтенә әүерелгән эскелек ҡаҡшата-ҡаҡшатыуын. Әммә ниндәйен дә эшлекле, егәрле, уйлы кешеләребеҙ ҙә бар.

Беҙ бер аҙ ҡыҙыуыраҡ, ғәҙелһеҙлекте яратмаған милләт. Ләкин сабырлыҡһыҙ, бәрә-һуғып эш ҡыйратып ташлағаныбыҙ юҡ. Артабан да, тормош һабаҡтарына таяна-таяна, бар буласаҡбыҙ әле, иншалла.

## Уйсандар, һеҙгә өндәшәм...

Раббым, донъялыҡта кешеләргә ҡарата ҡулымдан килгән тиклем изгелек эшләргә көс бир;

Раббым, яуызлыҡты, мәкерҙе, көнсөллөктө, оятһыҙлыҡты үҙгәртерлек көсөм булмауҙы төшөнгәндә көсһөҙлөгөмдө танырға, һәләтһеҙлегемә күнергә ҡөҙрәт бир;

Раббым, ошо төшөнсәләрҙе айыра белерлек аҡылдан яҙҙырма.

Һәр бер дәүләттең, милләт һәм халыҡтың йәшәү мәғәнәһе рухи сәләмәтлек менән дөйөм мәҙәнилеккә бәйле. Рухи ҡиммәттәре арзанайған, мәҙәниәте зәғифләнгән милләт донъяла, кешелек тарихында үҙенә урын яуларға әхлаҡи хоҡуғын юғалта. Дөйөм кешелек тарихы асылда милләттәрҙең бер-береһенә үҙенең барлығын, үҙенсәлеген, бәҫен, генетик көсөн танытыу көрәшенән тора. Элегерәк был көрәш империя идеяһына таянды, һәр империя, донъя эсендәге йоғонтолоҡ даирәһен киңәйтеү маҡсатында, аяуһыҙ идеологик бәрелештәргә лә барып етте, һәм, аҙаҡ килеп, был юлдың ни бары көрсөккә терәтеүен аңлауға ирешкән кешелек, ижтимағи-сәйәси үҫештә ярайһы фажиғәле һәм ҡыйралышлы юл үтеп, милләттәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе аҙмы-күпме демократик юлдар менән хәл итеүгә йөҙ бора башланы.

Беҙ — башҡорттар, кемделер ҡурҡытып торорлоҡ атом бомбабыҙ юҡ, әммә, гуманизм тигән кешелек идеалы күҙлегенән баһалана ҡалһаҡ, төп мәртәбәбеҙ, әлбиттә, шәфҡәтлелек. Бүтән милләттәрҙең йола-ғәҙәттәрен мөрхәтһенмәгән сүрәттә лә уларға ҡарата түҙемлелек һәм сит ерҙәрҙе баҫып алыуға, уларҙың байлығын талау иҫәбенә үҙебеҙгә матди етешлек тәьмин итеүгә йүнәлтелмәгән миһырбанлыҡ менән баһаланыр инек. Ә был дини, философик йәһәттән бәләкәй категориялар түгел. Дөрөҫ, быларҙы инҡар итеүсе көстәрҙең арбағысыраҡ булыуы ла мөмкин, әммә улар беҙҙең идеалдарҙан юғарыраҡ түгел.

Билдәле ки, халыҡ төшөнсәһен, милләттең кемлеген намыҫлы шәхестәре билдәләй. Бөтөн замандарҙа ла, ил яҙмышына ниндәй генә һынауҙар ябырылмаһын, халыҡ намыҫтары тапланмаған, ҡалъя тип өңшәңләмәгән ышаныслы шәхестәрҙең күҙенә текәлә: яҡларһығыҙ, ҡурсаларһығыҙ ҙа инде? Дөрөҫ, ниндәйҙер көрсөк янамаһа, уның мәнфәғәттәре ҡыл өҫтөнә ҡуйылмаһа, халыҡ үҙ араһынан сыҡҡан аҡыллы кешеләр яҙмышына бигүк илтифат бирмәй,

улар, зыялылар, үҙенсә, ә беҙ, халыҡ, үҙебеҙсә йәшәйбеҙ. Совет власы осоронда, яманмы-яҡшымы, әхлаҡи һәм донъяуи мәсьәләләрҙе көйләүҙә партия комитеттары сос булды: ғаиләң бармы-юҡмы, бүтән менән сыуалмайһыңмы, балаларыңдың яҙмышын ҡайғыртаһыңмы, әгәр әхлаҡи нормаларҙы танымайһың икән, һал партбилетыңды өҫтәлгә! Ә партбилеттан яҙыу — карьераңдан яҙыу, мәртәбәңде юғалтыу тигән һүҙ. Әле матбуғатта ишетелеп-ишетелеп ҡала, бигерәк тә йәһүдтәр төшөргән Одесса ҡағиҙәләре нигеҙендәге киноларҙа йәнәһе, кемдәрҙер, азатлыҡ хаҡындағы идеалға ярашлы, коммунистар талап иткән ошондай нормаларҙан юғары булған. Азатлыҡҡа ынтылғандар. Ә азатлыҡты кем яратмаһын? Әммә һине тышҡы экспансиянан аралаусы, һаҡлаусы дәүләттән азат булырға тырышыуҙың өҫтөнлөгө нимәлә? Ватаныңдан ситтә тулып ятҡан экзотик ризыҡтарҙы ашауҙамы ни? Дәүләттең төп маҡсаты — ошо дәүләттә йәшәгән һәр милләттең, халыҡтың именлеген тәьмин итеү, милли үҙенсәлектәр юғалмаҫлыҡ шарттар тыуҙырыу ул. Ҡалғаны милләттең фантазияһы, белеме һәм эшлеклелек һәләтенә бәйле. Белмәйем, мин, бәлки, аҙ һанлы халыҡ вәкиле булыуым сәбәплелер, глобаль азатлыҡты бигүк аңлап етмәйем, инаныуымса, кеше үҙенең милли рухи талаптары һәм йәне теләгән инаныстары ҡәнәғәтләндерелмәй тороп, үҙен бәхетле һанай алмай. Әйтәләр бит, “Юл киң булыу менәнме ни, ҡатаң тар булғас...” Тимәк, кеше өсөн донъяның иркен булыуы ғына аҙ, тыуған мөхиттәге йәшәү шарттарының ҡулайлы булыуы мөһим. Йәшәү шарттары иһә матдилыҡ менән генә үлсәнмәй. Мин етеш йәшәүҙе инҡар итмәйем, милләт булараҡ беҙгә генә хас самимилығыбыҙ юғала барыуға әсенәм.

Үҙгәртеп ҡороу осоро яңы лидерҙарҙы юғарыға күтәрҙе. Дөрөҫөрәге, албырғабыраҡ ҡалған халыҡ алдына улар үҙҙәре килеп сыҡты. “Беҙ йәшәйешебеҙҙе яҡшыртыу юлдарын беләбеҙ, ышанығыҙ, һеҙҙең мәнфәғәттәр яҡлы буласаҡбыҙ, коммунистар һәммәбеҙҙе лә ил менән идара итә белмәүҙәре, иҡтисадты ойоштороуҙа белемдәре һай булыу арҡаһында төп башына ултыртты. Ә беҙ илебеҙҙе тиҙ арала көрсөктән сығарыу юлдарын беләбеҙ!” Яңы реформаторҙарҙың тел төбө шундайыраҡ мәғәнәлә ине. Беҙ уларға ышандыҡ.

90-сы йылдарҙың иҡтисади һәм әхлаҡи көсөргәнешенә һуңғы йылдарҙа политологтар саҡ-саҡ ҡына баһа бирә башланы. Һәр реформаны, үҙгәреште лидерҙар башлап ебәрә. Ул осорҙа йәмғиәттең киләсәген яңыса һәм ғәҙел ойошторорға вәғәҙә иткән яңы шәхестәр алға сыҡты. Башҡорт интеллигенцияһы араһында ла репрессив машинанан, етешһеҙлектән арыған халыҡты реформаларға илһамландырыусы кешеләр барлыҡҡа килде. Мин дә улар араһында булдым. СССР Яҙыусылар союзы ла тарҡалып китте, уның мөлкәтен талау, тегендәбында тарҡатыу күренештәре барлыҡҡа килде. Ҡөрәш ҡаты барҙы буғай Мәскәүҙә. Данлыҡлы кенәз Ростовтың имениеһы булған СССР Яҙыусылар союзы бинаһын, затлы бәлеште бүлгеләгән кеүек, тураҡларға тотондолар. Хатта шуға барып етте — Рәсәй Яҙыусылар союзы секретариаты рәйесе Сергей Михалковты кабинетынан ҡыуып сығарҙылар. Никита Михалков ОМОН саҡыртып, баҫҡынсыларҙы автоматтар менән ҡыуалап сығарып ҡына майҙанды кире яулап алыуға өлгәштеләр. Шөкөр, беҙҙә ул тиклем үк тарҡалыуҙарға юл ҡуйылманы. Татарҙар айырым союз ойошторорға ниәтләй ине ниәтләүен, әммә Динис Бүләков берҙәмлекте һаҡлап ҡалыу зарурлығы яғында булды һәм тормош уның хаҡлығын иҫбатланы.

Мин Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Ҡәтибә Ҡинйәбулатова, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Әнисә Таһировалар шиғриәте үрнәгендә шағирлыҡҡа,

əҙəбиəткə ынтылдым. Əммə əҙəби даирəлə лə, тормоштоң бүтəн юҫығындағы кеүек, етəкселек, əҙəби элита тигəн төшөнсəлəр бар. Етəксе кеше, ҡайһы ғына коллективтың лидеры булмаһын, үҙе етəклəгəн һөнəр эйəлəре даирəһенең яҙмышын ойошторорлоҡ һəлəтле булырға тейеш, минеңсə. Үҙ мəнфəғəтең өсөн генə етəкселеккə ынтылыу — оят күренеш ул. Яҙыусылар союзы идараһы рəйесенə, мəҫəлəн, ябай яҙыусы менəн йəмəғəтселек, хөкүмəт араһында аралашсы булыу зарур. Етəксе кешегə, үҙенəн былай, милләттең интеллект кимəлен тотоп тороусыларҙың мəртəбəһен күтəрерлек көс табырға ла кəрəк бит.

...Күнегелгəн йəшəү рəүешен ҡырҡа һындырған үҙгəртеп ҡороуға һəм киҫкен реформаларға əҙер булмаған беҙҙең быуын бына ике тиҫтəнəн ашыу йыл йəшəүҙең яңы ҡанундарына күнегеп китə алмай. Шул арҡала “халыҡ мəнфəғəтен ҡəнəғəтлəндерəү маҡсатында” башланған был болғанышлы реформалар кешелəрҙе албырғауға, өмөтһөҙлөккə дусар итте. Əхлаҡһыҙлыҡ тамыр йəйергə тотонған ул заманда халҡыбыҙ үҙ мəнфəғəттəрен яҡларҙай кешелəргə һыйынырға мəжбүр булды.

Нəфселе бəндəлəр болартып ебəргəн күнегелгəн көнкүрештə байҙар, ярлылар тигəн полюстар барлыҡҡа килə башланы һəм уларҙың байлыҡ тип аталғаны яғында миллəтебеҙ шəхестəре булмау күңелһеҙ күренеш булыр ине. Əммə ышаныс менəн алға сығарған лидерҙарҙың аумаҡайлығы арҡаһында халыҡтың хəле яйланманы ла яйланманы. Миллəт таянысы тип һаналған шəхестəр етəкселеккə үрлəтелеп, уларҙың матди хəле яҡшырһа ла, хəл үҙгəрешһеҙ ҡалды.

Интеллигентлыҡ кимəле бəлəкəйерəк булған миллəт беҙ шулай ҙа... Беҙҙе һаман-һаман һуғарған этномəҙəниəтлек хаҡында əйтмəйем, ул, шөкөр, тере əле. Кешелектең тарихи эшмəкəрлегенең гуманизм принциптары нигеҙендə барлыҡҡа килтерелгəн, цивилизациялар тарихы аша баһаланған культура (мəҙəниəт түгел) баҫҡысының һыналған юғарылығы беҙҙəн алыҫ əле. Ай-һай, алыҫ. Əммə ул баҫҡысты яуламай тороп, глобализация тип аталған аяуһыҙ доктринаға ҡаршы тороп та, миллəтте рухи ҡыйралыштан аяп алып та булмаясаҡ. Иң зиһенле тигəндəребеҙ ҙə ырғытылған һөйəктəн баш тарта алмай. Юҡ, мин халҡыбыҙҙың власть органдары аша танылыу яулаған кумирҙарынан һыуынлыуын көҫəп яҙмайым быларҙы. Ысынбарлыҡтың əлегə шундай булыуы хаҡында əсенеп уйланыуҙарым менəн генə уртаҡлашам. Шəхестəрҙең һай фекерле, мин-минлекле булыуының сəбəбен мин аңлайым. Был — оҙаҡ йылдар кəмһетелеүле ғүмер итеүгə дусар кешелəрҙең комплексы, күнегелмəгəн өҫтөнлөклө даирəгə барып элəгеүҙəн тамырланған амбицияһылыр.

Ғөмүмəн, беҙ, кешелəр, йыш ҡына йə хистəребеҙ идараһына, йə аҡылыбыҙ талабына буйһоноп китеүсəнбеҙ. Хис-тойғолар менəн интеллект импульстарының икеһе ике төрлө кисереш булыуы тəбиғи. Шуға ла хəсиəтебеҙҙе хис-тойғолар билəп алғанда беҙгə аҡылыбыҙ аяҡ салырға тотона.

Мин байтаҡ йылдар бер күренешкə ғəжəплəнəм һəм тамырҙарына төшөнөргə тырышам. Ул шəхестең үҙ асылы менəн ҡаршылыҡҡа инеү күренеше. Аныҡ ырак əйткəндə, кешенең үҙ асылы менəн көрəше, объектив ижтимағи шарттар талабына күрə, тора-бара үҙенең ысын асылын еңə барырға мəжбүрлеге. Был көрəш даими алып барыла. Кеше үҙен-үҙе еңергə тырыша, əммə эске тəбиғəте йə теге, йə был шарттарҙа, тоҡ эсенə йəшереп булмаған беҙ кеүек, тегенəн-бынан бүҫелеп килеп сыға тора. Эйе, эске хистəребеҙҙе беҙ йүгəнлəргə тейешбеҙҙер, сөнки башлыса тəбиғи инстинкттарға бəйле шəхси асылыбыҙ менəн генə йəшəргə телəһəк, хайуандар донъяһындағы мөнəсəбəт һəм ҡағиҙəлəрҙəн ары китə алмаҫ

инек. Әммә был тәбиғилек менән зарурилыҡ көрәше ауыр эҙемтәләргә лә килтерә. Үҙ-үҙеңде еңергә өйрәнеү, шул юлда уңыштарға өлгәшеү, ниндәй генә батырлыҡ кеүек күренмәһен, кешенең психологияһы һәм эске аңында эҙемтәһеҙ үтмәй. Шул арҡала үҙең ижад иткән яңы образдың хаҡы ҡиммәткә төшөүсән. Ошондай үҙгәрештәр кисерергә мәжбүрлек шәхестең үҫеш эволюцияһы тип баһалана. Был эволюцияны спорттағы физик һәм эмоциялар көсөргәнеше менән сағыштырып булыр ине.

Ә көрәш тик еңеүҙәрҙән генә тормай. Унда еңелеүҙәр ҙә тулып ята. Еңелеүҙәр төшөнкөлөккә бирелдерә, күңел ҡайта, яңғыҙлыҡҡа, депрессияға дусар итә, ғәҙеллеккә, үҙ-үҙеңә ышанысты ҡаҡшата.

Ә еңеүҙәр? Тормошо гел еңеүҙәргә йүнәлтелгән, дан солғанышында ғүмер иткән шәхестәр бәхетлеме һуң? Ә бит уларҙың психологияһы, ҡылыҡтарына ла деформация янай. Тимәк, дан — майлы бутҡа түгел. Ҡеше маһайыусанлыҡҡа бирелеп китә. Ә дин быны иң ҙур гонаһтарҙың береһе тип баһалай. Йыш осраҡта данға өйрәнеүселәр үҙ маҡсатына ирешеү өсөн күп нәмәләрҙе ҡорбан итеүгә бара башлай. Ундайҙар ана шул дан хаҡына үлһә-үлә, ниәтенән тайпылмай.

Ҡешегә хас йәнә бер сифаттың асылы хаҡында ла уйланам. Бәғзеләр үҙҙәре алдында үҙ баһаһын күтәреүҙән (самоутверждение) ләззәт таба. Ә бит ул бүтәндәрҙән өҫтөнлөгөңдө иҫбат итеү маҡсатында эшләнә. Берәүҙең икенсе берәү алдындағы өҫтөнлөгө ана шул икенсе берәүҙең кәмһетелеүе иҫәбенә башҡарыла.

М.Ю.Лермонтов — XIX быуаттың талантлы яҙыусыһы, классик. Яҙыусы, публицист, тәнҡитсе Д.С.Мережковский “М.Ю.Лермонтов. Поэт сверхчеловечества” тигән мәҡәләһендә княжна Екатерина Хворостованың яҙмаларынан өҙөк килтерә:

“Лермонтов Хворостованы оҙаҡ һәм ныҡышмалы рәүештә үҙенә ғашиҡ иттерергә тырыша, — тип яҙа Мережковский.

— Мине ярат, Ҡатя, — тип инәлә Лермонтов. — Һин ратһаң, мин Хоҙайға ышана башлаясаҡмын. Тимәк, минең йәнемде һин генә ҡотҡара алаһың.

“Ул мине тотошлай үҙ ихтыярына буйһондорҙо, — тип яҙа Екатерина Хворостова, — ҡурҡа башланым. Аяғым аҫтындағы ер ҡупҡан кеүек ине. Йәшерен никахлашырға, өйҙән ҡасып сығып китергә тәҡдим итте”.

Ҡыҙҙы үҙ яғына ауҙарып, ризалығын алғас, Лермонтов Екатеринаға аноним хат ебәрә: “Ышанығыҙ, Лермонтов һеҙгә тиң түгел. Уға изгелекле тойғолар ят, ул берәүҙе лә ратмай. Мин уны кешегә лә һанамайым, сөнки ул бындай мөнәсәбәткә лайыҡ”.

Хат Екатеринаның ғаиләһе ҡулына эләгә. Шау-шыу, тауыш ҡубарыла. Екатерина илай ҙа илай. Ул шағирға ғашиҡ булып өлгөргән була. Ләкин Лермонтовтың эҙе лә юҡ.

Екатерина Лермонтовты балдарҙа күреп йөрөй. Тегеһе битараф.

— Хоҙай хаҡына әйтегеҙ, зинһар, ни өсөн һеҙ минән һыуындығыҙ? — тип һорай Лермонтовтан, яйын тура килтереп, Екатерина Хворостова.

— Мин һеҙҙе бүтән ратмайым, шул ғына, — тип яуап бирә шағир. — Дөрөҫөн әйткәндә, бер ҡасан да ратманым”.

Иҫем китте ошоларҙы уҡығас. Тетрәндем. Мин быларҙы рус һәм донъя әҙәбиәтендә талантлы әҫәрҙәре менән дан тотҡан әҙиптең юғарылығын кәмһетер өсөн яҙмайым. Миңә бары кеше күңеле һәм психологияһының ни саҡлым ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы булыуы ғына ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс. Шуныһын да билдәләгем килә: дәрәжәләр, дан, мәртәбәләр яулау хаҡына кеше күңеле һәм

яҙмыштар ҡыйралышы аша үҙенә таҡыр юл әтмәләүселәрҙе мин замандаштарым араһында ла байтаҡ осраттым. Ниндәй генә исемдәр менән баһаланған, ниндәй дәрәжәләргә еткән булыуҙарына ҡарамаҫтан, мин дә уларҙың холоҡ-фиғеленә ыңғай баһа бирә алмайым.

Яҙмыштырмы, Хаҡ Тәғәләме кешене йыш ҡына сатҡа ҡуя. Һайла. Әгәр үҙеңдә һине бүтәндәрҙән өҫтөн итерлек сифаттар бар тип һанайһың икән, уны заманыңа, милләтеңә, яҡын һәм яҡын булмаған әйләнә-тирәңдәге кешеләргә изге эштәр менән ярҙам итеүгә бағышла. Донъяны яҡшыртыуға, кеше күңелдәренә өмөт орлоҡтары сәсеүгә, рухын күтәреүгә тотон һин һәләтеңде. Ләкин шул юлда алған дан-шөһрәтең һиңә бәләкәйме-ҙурмы гонаһтар ҡылыу хоҡуғын бирмәй. Сөнки йыһан бизмәнендәге ғәҙеллек һәм сауап ҡиммәттәре ер үлсәүе менән үлсәнмәй.

## Яңы тарих

*... Намыҫ сүллегендә табын-мәжлес,*
*Миҫкә-миҫкә шарап,*
*Ҡәйеф-сафа.*
*Маһайыулы ъәмһеҙ битарафлыҡ,*
*Ясин сыъыр ерҙә —*
*Күңел аса.*
*Вазифалар яҡлай*
*Баррикада һымаҡ.*
*Ерҙә яңы быуат...*

Минең йәштәштәремә ике быуат, ике төрлө дәүләт системаһында йәшәргә яҙҙы. Беҙ һин дә мин йәшәп ятҡан совет системаһының ҡыйралыуына шаһит булдыҡ. Уның ниндәй эҙемтәләргә килтереren аңлай инекме? 90-сы йылдың сәйәси боларышы беҙгә тәүҙә өйрәнелгән, әммә ярайһы тоталитар системаны яңыртыуға юл кеүек күренде.

Сәйәсмәндәр һәм иҡтисад белгестәре СССР-ҙағы үҙгәртеп ҡороуҙы иҡтисад системаһындағы ҡотолғоһоҙ кризис менән аңлатты. КПСС Үҙәк комитетының яңы Генераль секретары Михаил Горбачев илдә реформалар иғлан иткәс, торғонлоҡтан арыған халыҡтың күңелендә өмөт сатҡылары уянғайны. Ләкин илдә сыуалыштар башланып китте, бөйөк дәүләттең берҙәмлеге ҡаҡшаны. Үҙгәрештәр беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы ла урап үтмәне.

Биш быуатҡа яҡын яҙмышын Рәсәй менән бәйләгән Башҡорт автономиялы республикаһы совет власы йылдарында РСФСР-ҙың терәк төбәктәренең береһе ине. Үткән быуаттың 80-се йылдарында республика территорияһы химия, нефтехимия, биология предприятиелары менән тултырылғайны. Башҡортостанда зарарлы етештереүсәнлек СССР буйынса дөйөм алғанда 33 процент тәшкил итте, икенсе төбәктәрҙә ул 6 проценттан артманы. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәт ресурстарын һаҡлау өсөн индерелгән капитал һалым 3 процент тирәһе генә ине, үҫешкән илдәрҙә был күрһәткес 30 проценттан күберәк булды. 40-сы йылдарҙа уҡ төҙөлгән “Агрохимия” берләшмәһе ассоциацияһының “Химпром” берекмәһе ҡорамалдары бер ҡасан да яңыртылманы, иҫкергән ҡоролмалар кешеләрҙең яҙмышын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя ине.

50 йыллыҡ тарихы эсендә “Башнефть” ер ҡуйынынан 1 миллиард 343 миллион тонна нефть һурып алды. Уның Башҡортостанға файҙаһы булдымы? Юҡ шул,

зыяны күберәк ине. Ер майын һурып алған нефтселәр бушаған өңөрҙәргә тоҙло һыу тултырҙы. Хәҙер республикабыҙҙың күп кенә районддары эсәр һыуға ҡытлыҡ кисереү шарттарына дусар. Республика предприятиеларының 37 проценты СССР һәм РСФСР ҡарамағында булды, үҙәктән идара ителде, Башҡортостан ҡаҙнаһы был зарарлы производствоның рәхәтен күрмәне, халыҡтың сәләмәтлеге иҫәбенә табылған табыш үҙәккә китеп торҙо.

Иҡтисади, милли һәм рухи үҫештәге төрлө ҡыҫырыҡлауҙар, социаль тигеҙһеҙлек, иң ябай ҡулланыу тауарҙарына ҡытлыҡ тотош илдең, шул иҫәптән Башҡортостаныбыҙҙың да, алып барылған сәйәсәт менән ризаһыҙлығына килтерҙе. Халыҡтың милли үҙаңы уяныу милли халыҡ үҙәктәренә тупланыуға этәрҙе. “Урал” башҡорт халыҡ үҙәге, татар йәмәғәт үҙәге һәм башҡа милли ойошмалар эшләй башланы. Уларға энтузиастар, халыҡ мәнфәғәттәре өсөн көрәшселәр тупланды. Мин үҙем дә “Урал” башҡорт халыҡ үҙәгенең әүҙем ҡатнашсыһына әүерелдем һәм арҡадаштар, милләттәштәрем ыңғайына ал-ял белмәй йәмәғәт эштәре буйынса йүгерекләнем. Интеллигенция, ябай эшселәр, колхозсылар йәшәгән ерендә, тотош илдә тормош кимәленең яҡшырыуына өмөтләнде.

Билдәлелек, һүҙ азатлығы баш әйләндергес эйфория ине. Тарихтың бығаса йәшереп тотолған күп серҙәре, аҡ таптары асылды, халыҡтар, шәхестәр яҙмышындағы ҡот осҡос хәлдәрҙе һәм ыңғай яҡтарҙы асыҡлау мөмкинлеге тыуҙы. Арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшенең тарихыбыҙҙа ифрат ҙур әһәмиәткә эйә булыуы дөрөҫлөккә сарсаған күңелдәрҙе аяҙытып ебәрҙе.

XX быуаттың 90-сы йылдары патриоттарҙан ҙур сыҙамлыҡ, тырышлыҡ, Тыуған ил һәм халыҡ яҙмышы өсөн фиҙакәр хеҙмәт талап итте. Ғәҙеллек, тиңлек, ихласлыҡ һөйөүсе, белемле, битарафһыҙ һәм романтик рухлы, халыҡ араһынан сыҡҡан кешеләр ине улар. Илдең иҡтисади хәлен яйға һалыу, рухи һәм матди байлыҡтарыбыҙҙан ғәҙел файҙаланыу, туған телебеҙҙе һаҡлау — реформаторҙарҙың лозунгыһы ошондай ине.

Республика ғалимдары, тикшеренеүселәре, әҙәбиәтселәре һәм журналиста-ры өсөн өр-яңы мөмкинлектәр асылды. Философия фәндәре кандидаты Әмир Юлдашбаев Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың “Хәтирәләр” китабын төрөксәнән башҡортсаға тәржемә итте. Уны мөхәррирләп “Ағиҙел” журналында баҫтырыу өсөн миңә лә ярайһы ҙур көс һалырға насип итте. XX быуат башындағы тарихи ваҡиғаларҙың сенсацион дөрөҫлөгө, башҡорт милли хәрәкәтенең йылъяҙмаһы, милли лидерҙарҙың яҙмышындағы фажиғәле ваҡиғалар, ниһайәт, халыҡҡа барып етте, быға тиклем совет власының ҡан дошманы тип иҫәпләнгән Зәки Вәлиди шуларҙың береһе ине.

Яҙыусы-публицист, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лау-реаты Ғәзим Шафиҡов “Дәүерҙең намыҫы һәм ҡорбандары”, “Ҡабырғаһынан ырғаҡҡа аҫылғандар” исемле ике китап нәшер итте. Уларҙа репрессияға эләккән милләттәштәребеҙ, халҡыбыҙҙың иң аҫыл улдары һәм ҡыҙҙары Дауыт Юлтый, Мөхәмәтша Буранғолов, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәки Вәлиди, Муса Мортазин яҙмыштары хаҡындағы публицистик тикшеренеүҙәр тупланғайны. Ғалимдар Нияз Мәжитов менән Әлфиә Солтановалар башҡорттарҙың ошо ерҙәргә бик боронғо замандарҙан уҡ ереккән булыуын иҫбат иткән китап баҫтырҙы. Ҡитаптың ҡулъяҙмаһын башҡортсаға тәржемә итеп журналда баҫтырыу ҙа минең елкәгә төштө.

Силәбе университеты профессоры Г.Б.Зданович, боронғо Арҡайым ҡаласығында ҡаҙыныу һәм тикшеренеү эштәренең етәксеһе булараҡ, “Арҡайымда йәшәгән ҡәүемдәр Иран тибына ҡарай” тигән һығымта яһаны. Ә ирандарҙың беҙҙең милләтебеҙ араһына ла һеңеп башҡортлашыуы бер кемгә лә сер түгел.

Ғалим Әнүәр Әсфәндиәровтың тикшеренеүҙәре Башҡортостан ауылдарының тарихына ҡағылышлы ине. Әнүәр Закир улы күп йыллыҡ халыҡ иҫәбен алыу материалдарына нигеҙләнеп, Башҡортостан халҡына кемдең ниндәй милләттән булыуын асыҡлап бирҙе.

Мәғрифәт юлында Рәшит Шәкүр, Марат Ҡолшәрипов, Әхмәт Сөләймәнов, Дамир Вәлиев, Нияз Мәжитов, Фәнил Фәйзуллин, Хәлил Барлыбаев, Ирек Аҡманов, Марат Аҙнабаев, Йыһат Солтанов, Рим Йәнғужин, Нәзир Ҡолбахтин, Зөфәр Еникеев, Ғайса Хөсәйенов, Ҡәҙим Аралбай, Ғәлим Хисамов, Таңһылыу Ҡарамышева, Гөлфиә Янбаева, Мәрйәм Бураҡаева, Факиһа Туғыҙбаева һәм башҡа бик күп зыялыларыбыҙ ҙур эшмәкәрлек күрһәтте. Башҡортостан ауылдары һәм ҡалаларынан сыҡҡан илһөйәрҙәр Ватаныбыҙҙың яңырыуы өсөн арымай-талмай хеҙмәт итте. Башҡорт йәштәре лә күп эштәр башҡарҙы.

Филология фәндәре докторы Нәжибә Мәҡсүтова төрки халыҡтарының бөйөк дастаны “Йософ” ҡиссаһын тел үҙенсәлектәре күҙлегенән тикшереп сыҡты һәм дастандың әйле башҡорттары телендә яҙылыуын иҫбатланы. Ошондай асыштар, юғалтыуҙарыбыҙҙы асыҡлау халҡыбыҙҙың милли үҙаңын нығытты һәм рухи донъябыҙға яҡтылыҡ төшөрҙө.

Алдараҡ әйткәнемсә, XXI быуаттың башында һәм артабанғы йылдарҙа шәжәрә байрамдары айырыуса әүҙем уҙғарылды, энтузиастар нигеҙ һалған был саралар халыҡ араһында киң таралып китте. Тыйылған темаларҙың булмауы башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарын яңы ижади бейеклектәргә әйҙәне. Тарихи романдар, үткер темалар күтәргән поэмалар, шиғырҙар яҙылды. Стәрлетамаҡта — башҡорт, Туймазыла һәм Өфөлә — татар, Сибайҙа балалар театры, төбәктәрҙә филармониялар эшләп алып китте һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тамашасыларҙың йөрәген яулаған мәҙәниәт усаҡтарына әүерелде.

Сирек быуатҡа һыйған тарих... Ҡескәй генә ваҡыт арауығы. Ләкин был минең һәм замандаштарым йәшәгән осор өсөн тотош бер дәүер...

XX быуат аҙағында энтузиастар һәм романтиктар нимә өсөн көрәште, реформалар тулҡынында власҡа үрләгәндәр вәғәҙәләрен үтәнеме һуң? Хыялдар тормошҡа аштымы? Робеспьер: “Һәр инҡилап үҙенең ижадсыһының башына етә”, — тигән һығымтаға килгән бит. Был юлы ла шулай булдымы? Шулай һәм улай уҡ та түгел. Ҡүҙ һалайыҡ:

— халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында бер ни тиклем тотороҡлолоҡ, иҡтисад үҫеше өсөн аҙмы-күпме шарттар барлыҡҡа килде;

— сауҙа-иҡтисад өлкәһендә донъяның 100-гә яҡын иле менән партнерлыҡ мөнәсәбәттәре булдырылды;

— бөгөн Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында капиталь төҙөлөш буйынса үҙен-үҙе финанслаусы берҙән-бер республика һанала;

— Рәсәй федерализмына нигеҙ һалынды;

— “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Закон ҡабул ителде (ул республикала йәшәүсе бөтә милләт балаларының үҙ телендә белем алыуына мөмкинлек бирҙе, республикала хәҙер балалар 14 телдә уҡытыла);

— БР-ҙа “Башҡорт халҡының яңырыуы һәм үҫеше”, “БР халыҡтарының телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү”, “Башҡортостан йәштәре программаһы”, “Башҡортостан халыҡтарының фольклорын өйрәнеү программаһы”, “Башҡортостан халыҡтары” кеүек дәүләт программалары эшләнде һәм депутаттар тарафынан баһаланып үҙ көсөнә инде;

— республикала байтаҡ юлдар һалынды, газ үткәреү эштәре әүҙемләште;

— инфраструктура үҫеште, телефон бәйләнеше, мәғлүмәт системалары, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, транспорт коммуникациялары булдырылды;

— милләт-ара мөнәсәбәттәр яҡшырҙы.

Ләкин етешһеҙлектәр ҙә етерлек әле:

— агросәнәғәт комплексы түбәнгә тәгәрәне;

— эшһеҙлек көндән-көн арта бара; элекке колхозсыларыбыҙ, завод, комбинаттар эшселәре ил ҡыҙырып тамаҡ яллыҡ эш эҙләү мәжбүрлегенә дусар ителде;

— күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүселәр эскегә һалышты;

— байҙар менән ярлылар араһында бейек ҡоймалар үҫеп сыҡты;

— приватизацияның ғәҙел үткәрелмәүе халыҡтың рухын һындырҙы;

— ябай халыҡтың күбеһе кредиттар тоҙағына эләкте;

— Башҡортостандағы эш хаҡы тотош илдеке менән сағыштырғанда 20 процентҡа түбән кимәлдә ҡала килә;

— медицина хеҙмәте сифатһыҙ;

— коррупция гөрләп сәскә ата;

— социумға маргиналлыҡ янауы үҙен һиҙҙерә башланы. һ.б.

Милләт яҙмышы ла, тарих та кеше яҙмышына оҡшаған. Тыуыу, бала саҡ, йәшлек... Шунан аҡыл ултырып өлгөрөү кимәленә етеү. Тарихы ни рәүешле генә тәрән мәғәнәле булмаһын, күтәргеһеҙ һынауҙарға дусар ителгән милләт юҡҡа сығыуҙан да азат түгел. Цивилизацияларҙың, эволюцияның ҡанундары шундай. Үҙ-үҙен һаҡламаған, киләсәгенә битараф ҡарағандар тарих майҙанынан иртәрәк китә. Беҙҙе нимә көтөрө әлегә үҙебеҙҙең ихтыяр көсөнә, халҡыбыҙ яҙмышына, тимәк, балаларыбыҙҙың киләсәгенә яуаплы ҡарауыбыҙға бәйле.

Донъялыр был...

*(Аҙағы киләһе һанда)*